*Иғтибар! Икенсе ярты йыллыкка "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡ менән яҙылыу бара: 237 һум 54 тин. 1 апрелдән һуң хаҡтар күтәрелеүе мөмкин. Ашығығыҙ! Квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрергә онотмағыҙ. Индексыбыҙ – 50665.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иреkле

17-23 МАРТ

(БУРАНАЙ)

2007 ЙЫЛ

№11 (221)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аман Тулеев: "Башҡорттар ҡунаҡсыл халыҡ"**



5

**Нимә ул этногенез?**

ул - халыҡтың яралғандан алып, тыуғанға тиклемге йәшәү араһы...



8-9

**Театр – гардеробтан,**

тормош әсәй булыуҙан башлана



11

**Аҡсалары, аҡсалары**

тимер, алтын, көмөштән



12

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15

*Дөм ҡараңғы төн. Ҡайҙандыр, тауҙар яғынан ҡурай моңо ағыла. Колхоз көтөүен көткән тау башҡорттары, төндә усаҡ янына йыйылышып, ҡурай тарта. Уларҙың "Сәлимәкәй" тигән тәрән хисле көйөн әйтерһең йылғалар, тауҙар, урмандар, Ер үҙе йырлай... Тау үҙәндәре буйлап әллә нисәмә саҡрымдарға тиклем таралған ҡурай моңо, төнгө тынлыҡта тағы ла йомшағыраҡ, наҙлыраҡ яңғырай. Ә мин ниндәйҙер илһамлыҡ сағылған был матур көйҙө йотлоғоп тыңлайым да тыңлайым..."*

**В. ЛЕБЕДИНСКИЙ, музыка белгесе һәм фольклорсы.**



I урынға лайыҡ булған Азамат Зәйнетдинов

*БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!*

# Ҡумыҙҙары... күңелдәргә сиртте

**2-4 мартта Мәсетле районы үҙәге Оло Ыҡтамаҡта ҡумыҙсылар һәм өзләүселәрҙең I Асыҡ республика конкурсы уҙғарылды. Беренсе тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, сара ойоштороу яғынан, ҡумыҙсыларҙың оҫталығы, күплеге йәһәтенән көткәндән дә юғары кимәлдә булыуы менән ҡыуандырҙы. Мәсетле ере бәйгегә Башҡортостандың егерме туғыҙ районынан 350-нән ашыу ҡумыҙсыны йыйҙы. Конкурста ҡатнашыусыларға ниндәй талаптар ҡуйылды, конкурсанттарҙың әҙерлек кимәле менән жюри ағзалары ҡәнәғәтме - ошо һәм башҡа һорауҙар менән сараға башланғыс һалған виртуоз ҡумыҙсы, конкурстың жюри ағзаһы, Шәйехзада Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Минлеғәфүр ЗӘЙНЕТДИНОВҠА мөрәжәғәт иттек.**

- 1998 йылда Австрияға халыҡ-ара ҡумыҙсылар фестиваленә барып, Башҡортостанда ла ҡумыҙсылар бәйгеһе үткәрергә ине, тигән хыял менән дәртләнеп ҡайтҡайным. Әммә орлоҡ сәсеү, уның шытҡанын көтөү йәки бындай бәйгелә ҡатнашырҙай ҡумыҙсылар әҙерләү өсөн ваҡыт кәрәк ине. Яйлап эшкә тотондом: райондарға йөрөп, теләге булғандарҙы ҡумыҙҙа уйнау серҙәренә өйрәтә башланым. Ә бит идея - бер, уны тормошҡа атҡарыу байтаҡ көс, матди нигеҙ талап итә. Мәсетле районы хакимиәте башлығы Юнир Солтанов, Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге яғынан ярҙам булмаһа, хыялым һаман да хыял ғына булып ҡалған булыр ине, бәлки. Сөнки әҙерләгән ҡумыҙсылар өлгөрөп етте, был республика кимәлендәге бәйге ойоштороуға ныҡлы нигеҙ бирә. Конкурс ойоштормай, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнаған сакта үҫеш тә булмай. Сараға яңғыҙ башҡарыусыларҙан тыш, 20-23 кешенән торған ансамблдәр ҙә килгәйне. Төп талап - көйҙө боҙмайынса, еренә еткереп уйнау булһа, икенсе шарт - тәбиғәт тауышына бәйле импровизация башҡарыуҙан ғибәрәт ине. Барыбыҙға ла мәғлүм, быға тиклем... быҒаса ҡумыҙ сиртеү баян, ҡурай һәм башҡа музыка ҡоралы менән берлектә башҡарыла ине. Бындай осраҡта ҡумыҙсының оҫталығын тойомлау ҙа бигүк еңел түгел.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

**✓ Федераль миграция хеҙмәте билдәләүенсә, Рәсәйҙә бөгөн 12 миллионға яҡын сит ил хеҙмәткәре эшләй. Уларҙың бары 1 миллион 110 меңе генә рәсми иҫәптә тора.**



ТУРА ЯРЫП...

# ҠУНАҠҠА УРЫН ТҮРҘӘН-

## хеҙмәтсеһе итә тиҙҙән

**Ике тин - бер аҡсаның ҡоло булған сағым... Хәйер, студент ваҡытта кем генә аҡсаға мохтажлыҡ кисермәй, тиһең... Эшләп уҡыр өсөн әрмәндәрҙең икмәк бешереү цехына эшкә индем. Ә ниңә оҙаҡ уйлап торорға? Тиҙ генә барҙың, паспортыңды күрһәтеп, исем-шәрифеңде теркәнең - эшләй ҙә башланың. Әллә ҡайҙа барып, документ артынан документ туплап, хеҙмәт һәм медицина кенәгәһе өсөн аҡса түгеп, бөтөн ошо мәшәҡәткә әллә күпме ваҡыт әрәм итеп тораһы түгел. Көндөҙ уҡыған кешегә төнгө сменала эшләү ҡайһылай уңайлы!**

**Үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр быуындарым ҡалтырағансы арыуымды тойҙом. Эшләп ашауҙың ни икәнен беләм (мин бит ауыл ҡыҙы, өсөнсө синыфтан - арҡыры бысҡы, алтынсынан салғы тотоп өйрәнгәнмен), әммә рухи түбәнһенеүгә физик талсығыу ҡушылғанды тәүләп кисереүем. Төн буйы аяҡ өҫтө тегеләй йүгерәһең, былай сабаһың. Ултырып, бер аҙ ғына ял итеп ҡара, ялбыр ҡашлы уҫал әрмән хәҙер янъял ҡуптара. Эшкә аҙыраҡ һуңлағаныңды күрһә лә ярты эш хаҡыңды киҫергә тора. Улар беҙҙең эше тыныс, сабыр түгел. Ана бер мәл, ут һүнеп тороу сәбәпле, мейес үҙ ваҡытында өлгөрмәне лә, ҡамыры ҡабат төшөп, икмәк уңманы. Бының өсөн талағы ташҡан әрмән бешкән икмәктәрҙе лә, сираттағы ҡамырҙарҙы ла формаһы-ние менән иҙәнгә бәреп, төкөрөк сәсеп енләнде. Шул сағында “Беҙ ғәйеплеме?” тип әйтеп ҡара. Ә иҙәнде беҙ таҙарттыҡ... Йәнде иң әрнеткәне шул: быуаттар дауамында ғорурлығы, тәрбиәлелеге менән дан алған илем һылыуҙарын үҙ еребеҙҙә буйһондороп эшләтеүҙәре етмәгән, ерәнес мыйығы аҫтынан йылмайып, уларға күҙ майлап маташалар.**

**...Береһенән-береһе йәмһеҙерәк була барған, тамуҡ ғазабына әйләнгән эш көндәремде тамамлап, әлһерәп ҡайтып барышым (эш урыны йәмәғәт транспорты туҡталышынан 2 саҡрым йыраҡлыҡта ятҡанға был араны йәйәү үтәбеҙ). Йән төбөнән түгелеп сыҡҡан күҙ йәштәрем сикәләремде яндыра. Бер көн алда имтихан ваҡыты ниндәйҙер сәбәп менән киске тығыҙға күсерелгәс, эшкә һуңларға тура килгәйне. Килмешәк-хужа ишек алдынан уҡ екеренеп ҡаршы алғас, уның алдында отчет биреп торманым, смена хаҡын (өс көнгә 300 һум) тулайым алыр өсөн һәүетемсә генә эшкә тотондом. Әлеге илауым шул мәлдәге рәнйеүемдән. Хәйерсе әрмән алдында меҫкенләнеп торор инемме ни? Башҡаса килмәҫ өсөн ҡайтып киттем. Башымда бер генә уй: ҡасан ғына уҡып бөтәм дә, үҙ халҡыма хеҙмәт итерҙәй юғары белемле кеше булам инде!**

**...Ғәмәлдәге йылдың 15 ғинуарынан Рәсәйҙә яңы миграция закондары булдырылыуы, ошо йәһәттән БДБ илдәренән килеүселәргә Рәсәйҙә эшләргә рөхсәт биреүсе квота индерелеүе, уларға ҡәтғи талаптар һәм квоталар иҫәбенә сик ҡуйылыуы хаҡында ишеткәс, нисектер, һөйөнөп ҡуйҙым. Күңелһеҙ тәжрибәм артта ҡалһа ла, бөгөнгө йәшәйештә шундай уҡ килмешәк-хужаларҙың һаман да арта барыуы, ҡиммәтле-зиннәтле ресторандар, кафе-барҙар, күңел асыу комплекстары асып, беҙҙең халыҡ иҫәбенә байып ятыуы ғына түгел, һыу һөлөгө кеүек егет-ҡыҙҙарыбыҙҙы ике тин аҡса өсөн бил бөктөрөп йөрөтөүҙәре йәнемә тейә ине. Яңы закон буйынса, сит ил эшҡыуары Рәсәй кешеһен эшкә алғанда уңайлы шарттар, тейешенсә эш хаҡы булдырырға бурыслы. Был ҡарар нисек үтәлә? Хеҙмәткәрҙәргә булған мөғәмәлә ниндәй? Ошо һәм башҡа һорауҙар менән бөгөн улар ҡулы аҫтында эшләүселәргә мөрәжәғәт иттек.**

**Сөмбөл ТАҺИРОВА:** Йылдан ашыу төрөк ресторанында эшләйем. Һөнәрем буйынса ауылда эш булмағас, ҡалаға килдем. Кредит алып, бурысҡа батҡан атай-әсәйемә ярҙам итергә кәрәк. Икеөс ай самаһы эш эҙләп ҡараным да, бында урынлаштым. Иртәнге һигеҙҙән киске ун бергә тиклем ике көн эшләп, ике көн ял итәбеҙ. Сменаға 500 һум түләйҙәр. Ҡулға 300-өн биреп, ҡалғанын кассаға һалалар, киткән саҡта бирербеҙ, тиҙәр. Яңы закон сыҡҡандан һуң, смена хаҡына 50-шәр һум өҫтәнеләр. Быға тиклем әҙәмгә лә һанамай, аҡырып-баҡырып торған директор, закон сыҡҡас, һандуғастай һайрап тора тиһеңме? Уларҙың эш алымы шундай - документһыҙниһеҙ, килешеү төҙөмәй генә эшкә ала ла, шулай ҡыуып та сығара. Ә ҡарға күҙен ҡарға суҡымауын йәшереп торорға түгел инде: үҙ кешеләре беҙҙең менән бер үк эште башҡарһа ла, беҙҙән күберәк хаҡ ала. Иртән эшкә килеүебеҙҙе ишек төбөндә минутлап билдәләп торалар, үҙҙәренеке 11-12-гә килһә лә, өндәшмәйҙәр. Күптән түгел санэпидемстанциянан тикшереү килгәс (әйткәндәй, улар был хаҡта алдан иҫкәртелә, сөнки башҡа ресторан-кафелар менән бәйләнештә торалар), медицина кенәгәһе булмағандарҙы тиҙ генә урамға сығарып ебәрҙеләр. Эш хаҡығыҙҙы һораһалар, 1 мең һумға кәметеп әйтегеҙ, тинеләр. Аш бешереүсе Гөлсөм апай ике йылға яҡын бында эшләне, әллә нисә тапҡыр мөрәжәғәт итһә лә, хеҙмәт кенәгәһенә стаж теркәлмәгән. Шуның өсөн генә бында урынлашып, тапҡан-таянғанын ваҡытлыса фатирға түләп йәшәгән апай китергә мәжбүр булды. Әйткәндәй, үҙ хоҡуҡтарын яҡлап, асыуланып ризаһыҙлыҡ белдергәйне, "касса"ла йыйылған аҡсаһын бирмәнеләр.

**Ғәзимә ВӘЛИЕВА:** Ғүмер буйы балалар баҡсаһында эшләнем, ундағы эш хаҡы аҙ булғас, әрмән кафеһына эшкә индем. Хаҡлы ялға етеп барған минең йәштәге кешегә эш табыуы ауыр. Күп урында йәш, дәртле белгестәргә өҫтөнлөк бирелә. Кафеға ла мине һауыт-һаба йыуыусы итеп кенә алғайнылар. Һигеҙ айға яҡын эшләгәс, аяғымды һындырып, эшкә сыға алманым. Шылтыратып белешкәс, "Беҙҙә больничный түләнмәй", тинеләр. Хәйер, бергә эшләгән йәш әхирәтем, ауырға ҡалғас, аш-һыу еҫенән күңеле уйнап, саф һауаға йыш сыҡҡаны өсөн генә лә ҡаты шелтә алғайны. Ҡайҙа инде декрет отпускыһы... Дауаханаға тикшеренеүгә барып, һуңлап килгәйне, икенсе көнөнә урынына яңы кешене килтерҙеләр ҙә ҡуйҙылар.

**Вәсилә ҒИБӘҘУЛЛИНА:** Вьетнам магазинында һатыусы булып эшләйем. Таныш-белеш килеп сыҡһа, йәшенеп ҡалам. Ғәрләндерә. Бер ваҡыт мин эшләгән бүлектән ойоҡбаш һатып алған ҡатын, ярһыптуҙып, ике көндән ҡабат килде. Ҡытай әйберенең сифаты һәр кемгә билдәле инде. Ойоҡбаш тишек булған. Шуны болғап, халыҡ-ғәм алдында миңә: "Оятһыҙ, үҙ халҡыңды алдап тораһың! Ҡытай әтрәғәләмдәренә ярамһаҡланып, брак әйберҙәрен һатып бөтөрөргә тырышаһыңмы?"- тип ҡысҡырҙы. Иң әрнегән ярама телеп-телеп тоҙ ырғытҡандай булды...

Юғары уҡыу йортон тамамлағас, ишектән-ишеккә йөрөп, оҙаҡ эҙләнем эш. Ҡайҙа барһаң да кәмендә өс йыл эш тәжрибәһе талап итәләр. Физматты тамамланым мин, компьютерҙы ла беләм, заманса технологияларҙың башҡаһын да еңел үҙләштерәм. Көнөнөкөкөнгә иҫәпләнеп, ҡулға аҡса инеп торғас, ваҡытлыса бында килдем.



**Булат ҒӘЛИЕВ:** Мәктәптә эшләп йөрөгән йылдарҙа "Йәй көнө бер аҙ аҡса эшләйем" тип, баҙарға сыҡтым. Үзбәк, әзербайжан, грузиндар янына йөк ташыусы булып урынлаштым. Шунда балаларға яңы уҡыу йылына кейем-һалым алырлыҡ ярайһы ғына аҡса эшләнем дә, һатыуға күстем. Уҡыу йылы башланғас та кәсебемде дауам иттем. Һуңынан төп эшемде бөтөнләй ҡалдырып, төҙөлөшкә күстем. Күңелем менән һаман яратҡан эшемдә - мәктәптәмен, әммә быныһы килемлерәк.

Миграцияға бәйле яңы закон сыҡҡас, бергә эшләгән "ҡара коллегалар" ҡайҙалыр юғалып торҙо ла, ҡабат килде. Етәксе үҙҙәренеке бит... Эш хаҡын күҙ буярлыҡ күтәрҙе лә - вәссәләм. Улар менән бер үк хаҡ алып эшләйбеҙ. Американа, мәҫәлән, сит илдән килеп эшләүселәрҙең эш хаҡы урындағыларҙан күпкә түбәнерәк.

**Светлана НАСЫРОВА.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Федераль миграция хеҙмәте билдәләүенсә, Рәсәйҙә бөгөн 12 миллионға яҡын сит ил хеҙмәткәре эшләй. Уларҙың бары 1 миллион 110 меңе генә рәсми иҫәптә тора. Хөкүмәт башлыҡтары яңы законға өҫтәлмәләр индерергә ниәтләй. Яңы системаға ярашлы, квоталар мигранттарҙың һаны буйынса ғына түгел, уларҙың һөнәре, белем кимәле, социаль хәле буйынса ла билдәләнәсәк. Был мәғлүмәттәр ведомстволарҙа һәм министрлыҡтарҙа тикшерелеп, 2008 йылға квоталар биреүҙә файҙаланыласаҡ.**

**Закон сығарыу бер эш, уны ғәмәлгә ашырыу икенсе эш шул. Ҡул ҡуйылғанға байтаҡ ваҡыт үтһә лә, килмешәктәр үҙ "йәшәү законын"да ҡала. Мәғлүмәт саралары аныҡлауынса, илһеҙ-хәйерселәрҙе ҡабул итеүҙә беҙ иң ихласы, иң йыуашы, иң ҡунаҡсылы икән. Ҡунаҡ - хужаның ишәге, тиҙәр. Өс көн үткәс, ҡунаҡлығын онотоп, ил-ер хужаһы менән идара итә башламаҫ, тип кем әйтер...**

**Әйткәндәй, студент сағымда эшләп йөрөгән әрмән икмәкханаһы урынында бөгөн төрлө төҫтә уттар балҡытып, заманса стилдәге ресторан-кафе эшләп тора. Иптәш ҡыҙҙарымдың күҙ йәштәре ҡатыш ҡара тире түгелгән ерҙә, әрмән көйҙәрен яңғыратып, ресторан гөрләй. Хужа эшселәр һайлауҙа һаман элекке традицияһына тоғро ҡалған: йүгереп йөрөп ҡыҙҙарыбыҙ клиенттар һыйлай.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Башҡортостанға эш сәфәре менән килгән "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе Алексей Миллер менән осрашты. Улар нефть химияһы сәнәғәте өлкәһендәге хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов республика бюджеты средстволары иҫәбенә айлыҡ аҡсалата түләүҙәр алыусы граждандарҙың айырым категорияларына айлыҡ аҡсалата түләү күләмен арттырыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.

✓ Булып үткән муниципаль һайлауҙарҙа һайлаусыларҙың 89,77 проценты ҡатнашты. Республиканың 8340 округында ауыл биләмәһе советына 8338 депутат һайланды.

✓ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев исемендәге премияға был юлы Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы уҡытыусылары - филология фәндәре докторы Кәрим Ишбаев менән филология фәндәре кандидаты Зөлфиә Ишкилдина лайыҡ булды. Премия БР Фәндәр академияһы тарафынан булдырылған һәм гуманитар фән өлкәһендәге ҡаҙаныштар өсөн бирелә.

✓ "АПК-ны үҫтереү" милли проекты сиктәрендә йәш ғаиләләрҙең һәм белгестәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса ла эш алып барыла. БР Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, былтыр ошо маҡсатта республика ауылдарында 105507 квадрат метр торлаҡ майҙан сафҡа индерелгән. Уның өсөн 758,334 миллион һум аҡса тотонолған. Быйыл да ошо проект сиктәрендә 39 мең квадрат метр торлаҡ төҙөләсәк, тип күҙаллана.

✓ 1 апрелдән алыҫ араға йөрөүсе поездарҙың купе вагондарына билет алыусыларҙың исеме, фамилияһы һәм атаһының исеме тулыһынса күрһәтелсәк.

✓ Баймаҡта Батыр Вәлид исемендәге төбәк премияһы лауреаттары билдәләнде. Премия "Ҡурайсылар иле" китабы авторы, Баймаҡ ҡалаһының 1-се урта мәктәбе уҡытыусыһы Фәниә Кәримоваға һәм мәҙәниәт-сәнғәт өлкәһендәге хеҙмәте өсөн Хәсәновтар ғаиләһенә бирелде.

✓ Быйыл СССР Төҙөлөш һәм архитектура академияһы мөхбир ағзаһы Барый Кәлимуллиндың тыуыуына 100 йыл тула. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән уның юбилейына арналған саралар билдәләнде.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# Абрамович айырылыша,

## ә Вешняков үҙәк һайлау комиссияһынан китергә мәжбүр

**Байҙар ҙа айырыла икән, йәмәғәт. Улар ҙа беҙҙең кеүек үк кеше лә баһа. Бисәһе менән тыныс ҡына йәшәй алмаһа, айырыла ла ҡуя инде, шулай бит? Кем хаҡында һөйләй был тиһегеҙме? Роман тураһында әйтәм. Фамилияһы - Абрамович. Белгән вазифаһы - Чукотка губернаторы. Асылда иһә илебеҙҙең иң бай кешеһе. Донъя миллиардерҙары исемлегендә Роман Абрамович 16-сы урынды биләй. Аҡса күп булһа ла, ғаиләлә именлек булмаһа, ир менән ҡатын килешеп йәшәй алмаһа, һауыт-һаба шылтыраһа хәләл ефетең менән түҙеп ғүмер итеп булмайҙыр инде.**

Үткән аҙнала илебеҙҙең булған ваҡытлы матбуғат саралары Роман Абрамовичтың ҡатыны Ирина менән айырылышыуҙары хаҡында хәбәр итте. Әйткәндәй, Парижда Абрамовичты 25 йәшлек Дарья Жукова менән күргәндәр, хатта фотоға төшөргәндәр, тап шуға ла Романға биш бала табып биргән Ирина түҙмәгән һәм развутка биргән, имеш. Роман менән Ирина 1991 йылдан бирле бергә. Абрамович менән ул самолетта танышҡа. Ирина Маландина ул саҡта стюардесса булып эшләй. Бизнес менән бергә шөғөлләнә башлайҙар. Ирина сит илдәрҙән йомшаҡ уйынсыҡтар алып килә, ә Роман шуларға ҡарап, бында уйынсыҡтар етештерә башлай.

Аңламаҫһың был байҙарҙы. Нишләп айырылырға инде? Уҙ бағанамдан ҡарайым да, бәлки Роман кистәрен һуңлап ҡайтҡандыр, ашап-эскәндән ҡалған һауыт-һабаны саймағандыр, балаҫтарҙы ҡаҡмағандыр, тип уйлап ҡуям.

Хәйер, Лондонда иң ҡиммәтле бер йортто биләп торған, "Челси" футбол клубын һатып алып, унда донъяның иң көслө һәм һәләтле футболсыларын туплаған, шәхси самолеты, ер шарының төрлө мөйөштәрендә бер нисә виллаһы, яхталары булған, байлығы 19 миллиард доллар тирәһе тәшкил иткән Роман өсөн бындай мәсьәләләр тормайҙыр инде. Байҙарҙың ғәм башҡа тигәндәй - ул хәтлем аҡса менән ауыҙ асыу түгел, бер ым ғына етә - һауыт-һаба ла йыуылыр, балаҫтар ҙа ҡағылыр, футболсылар ҙа тиҙерәк йүгереп алып китер... Тимәк, эш Роман Абрамовичта түгел булып сығамы? Бәлки, айырылышыу идеяһын уның ҡатынының башында тыуғандыр? Ирен, балаларының атаһын икенсе бер ҡыҙ менән йөрөүен күтәрә алмағандыр Ирина? Осон-оска саҡ ялғаған, аванстан расчетка тиклем йәшәгән, яхта һәм футбол командаһы түгел, икмәк менән һөт һатып алырлыҡ аҡсаһы булмаған ир менән ғүмер итергә мәжбүр булған ҡатынҡыҙҙар мине ошо һүҙҙәрем өсөн көлкөгә күтәрер, моғайын. Беҙгә шундай бай ир эләкһәме, өрмәгән ергә ултыртмаҫ инем, усымдан ғына ашатыр инем, күҙҙәренә генә ҡарап торор инем, тип уйлайҙарҙыр улар ошо гәзитте уҡығанда. Бактиһәң, аҡса, хатта ул бик күп булһа ла, кешене бәхетле итә алмай икән. Уға тағы ла нимәләр кәрәк. Әллә тоғролоҡ, әллә азатлыҡ...

Хәйер, Абрамовичтың холкона ҡарағанда ул оҙаҡ иректә йөрөмәҫ, моғайын. Әлеге лә баяғы Дарья Жуковамы, икенсе берәй һылыу ҡыҙмы, Романды уның виллалары, яхталары, миллиардтары менән ҡуша ауыҙлыҡлап, ғаилә ҡамыты кейҙерер, моғайын. Изге урын буш тормай, тиҙәр. Әлекке ире вәғәҙә иткән 1 миллиард фунт стерлинг менән Ирина Абрамович та яңы тормош иптәшен тиҙ арала табасағына шик юҡ. Тимәк, эш ниндәйҙер абстракт азатлыҡта түгел, ә анык шәхестән, конкрет ситуациянан азат булыуҙа.

Тап шундай хәлдә бөгөн Александр Вешняков, Рәсәй үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе. Дөрөҫөрәге, әлекке рәйесе. Үткән аҙнала Рәсәй Президенты Владимир Путин Үҙәк һайлау комиссияһының яңы ағзаларын тәҡдим итте. Улар араһында Александр Вешняковтың фамилияһы булмай сыҡты. Шулай итеп, 1994 йылдың мартынан үҙәк һайлау комиссияһында эшләгән, ә 1999 йылдан бирле уның рәйесе булған, бер нисә һайлауҙарҙы үткәргән кеше Дәүләт Думаһына буласаҡ һайлауҙарға 9 ай, ә президент һайлауҙарына 1 йыл ҡалғас, эшенән азат ителде. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бәлки, Александр Вешняков был хәлгә шаттыр ҙа. Ни тиһәң дә, үтә тынғыһыҙ вазифа бит. Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар үҙе генә ни тора. Ә президент һайлауҙары, ә илдең төбәктәрендә үткән һайлауҙар? Һәр берегендә ҡаңғырыҡ, закондарҙы боҙоу, дәғүәселәрҙең бер-берегенә ташлаған "бысракта" соконоу, еңелеүселәрҙең ғәйепләүҙәренә яуап биреү, властың сәйәси заказын үтәү, йәғни теге партияны Думаға үткәреү, быныһына юлды ябып ҡуйыу. Күрәһең, Вешняков бынан бик нык арығандыр, тип уйлап ҡуйыла хатта. Арыһа, арығандыр. Ул бит һәр ваҡыт телекамералар һәм журналистар алдында бер нәмәне һөйләп, икенсене эшләп ултырған кеше. Һайлауҙар алдынан телевизорҙы күпме тоҡандырһаң да, унда Александр Вешняков демократик принциптар тураһында һөйләй. Асылда иһә, урындарҙа кем нәмә теләй, шуны эшләй. Хәтерләһәгеҙ, республикалағы һуңғы президент һайлауҙарында Вешняков Башҡортостанда һайлау тураһындағы закондар боҙолоуы хаҡында туктауһыҙ белдерҙе. Ә эш ситтән килеп беҙҙә түрә булмаҡсы бер "мыйыҡ"тың бәйһеҙ рәүештә алып барылған һайлау алды кампанияһын ауыҙлыҡлауға барып еткәйне, шымды ла ҡуйҙы.

Әһуңғы арала Александр Вешняков "Берҙәм Рәсәй" партияһының ҡайһы бер инициативаларын туктауһыҙ тәнкитләне. Елгә ҡаршы төкөргәнен аңламаны микән? Әллә, белә тороп та ҡаңғырҙымы? Мәҫәлән, ул "Берҙәм Рәсәй"ҙең һайлау бюллетендәренән "Бөтәһенә лә ҡаршы" тип аталған пунктты алып ташлауға ҡаршы сыҡты, һайлаусыларҙың иң аҙ кимәле хаҡындағы закон проектына үҙ ҡарашын белдерҙе. Башҡа сығыштары ла күп кенә булды. Һөҙөмтәлә үткән аҙнала Президент Владимир Путин Вешняков осраҡҡандан һуң Вешняков вазифаһынан мәхрүм ҡалды. Әлегә уның киләсәге хаҡында төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Берәүҙәр фекеренсә Вешняковты Мальтаға илсе итеп ебәрмәкселәр (үҙенсәлекле бер һөргөн була инде), икенселәр иһә Вешняковка юстиция министрлығында берәй пост бирерлер тип фаразлай. Нисек кенә булмаһын, Рәсәй һайлау майҙанында Вешняков осоро тамамланды тип ышанысты рәүештә әйтергә була.

**Александр Вешняков бөгөн азат. Уға өҫтән, Рәсәй Президенты аппаратынан команда көтөп ултырырға, берәүҙәрҙе ҡыҫырға һәм тәнҡитләргә, ә икенселәрҙе теләһә ниндәй юл менән күтәрмәләргә түгел. Әммә уның азатлығы оҙаҡҡа бармаясаҡ. Яңы урында, Мальтала булһынмы, әллә берәй министрлыктамы, уға барыбер дәүләт эшенең ҡамытына егелергә тура киләсәк. Үҙең һайлаған юлдан бер нисек тә тайпылып булмай икән шул.**

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# Рәхмәтте...

## һорап алмайҙар

**Йылға аша сығып барғанда бер бабайҙың арбаһы ватылған. Бәхеткә күрә, бер егет килеп сығып, оло кешегә ярҙам иткән. Арбанан төшмәй генә бабай былай тигән: "Рәхмәт, тиһәм, улым, күп булыр, мисәүҙәге атты туғарып ал, ул - һинеке".**

"Рәхмәт" һүҙенең күләме шул хәтлем дә ҙур микән ни? Игтибар иткәнегеҙ бармы: был һүҙҙе күпселектә олорактар рухи баһалау кәрәк булған йәштәргә, бала-сағаға әйтә. Тимәк, оҙағырак йәшәп, рухи байлыктан өлөш алғандар үҙ өлөшөнән йәшерәктәргә лә "бүлеп бирә". Бына шуғалыр ҙа, мактауҙың, дәртләндереүҙең, рәхмәттең баһаһы бик ҙур. "Рәхмәт"те уңлы-һуллы өләшеп йөрөп тә булмай, ихлас күңелдән уны тик лайыклы кешегә генә әйтәләр. Әлбиттә, йәштәр ҙә үҙенән өлкәндәргә "рәхмәт"тән өлөш сығара. Әммә был "рәхмәт" оололар үҙ өлөшенә инергә рөхсәт иткән өсөн әйтелә түгелме? Баяғы егет тә бабайға рәхмәт әйткән, әммә уның рәхмәте бабайҙыкына ҡарағанда бәләкәйерәк булған.

Ҡыҙык, рәхмәтте һорап алғандар ҙа бар. Бер танышым: "Ауыл халҡы өсөн күпме нәмә эшләнем, бер кемдән рәхмәт ишеткәнем юк әле", - тине. Һуң, рәхмәт көтөп йөрөгәс, уға ниндәй миҡдарҙа кәрәк икән ул? Алдан уҡ рәхмәт ишетеүҙе көҫәгәс, тимәк, ниәте шул булған, ә изгелек ҡылыу түгел. Бәлки, ауыл халҡы аҡса йыйып бирһә, аңлашылыр, хеҙмәтен эшенә ҡарап баһалау һымаҡ ҡабул ителер ине. Тимәк, халык рәхмәте алырлык кимәлдә бер ни ҙә эшләмәгән әле ул. "Игелек ерҙә ятып ҡалмай: әгәр ҙә ниәтең изге булһа, һиңә әйтелергә тейешле рәхмәтте киләһе быуын балаларыңа әйтеүҙәре лә бар бит әле", - тинем танышыма. Тимәк, бөгөн алған рәхмәт фани донъянан үҙең менән бергә китә, иртәгә аласағы һинең үлемһеҙ икәнеңде күрһәтә.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔16 марттан Пермь крайының Барҙа районында Башҡортостан Республикаһының мәҙәни-мәғлүмәти акцияһы башланды. Унда республика ғалимдары, яҙыусылары, "Йәдкәр" фольклор-эстрада төркөмө артистарынан торған делегация ҡатнаша.

✔Силәбе ҡалаһының Салауат Юлаев урамы районында башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевка һәйкәл ҡуйыласаҡ. Проект авторы Марсель Йосопов әйтеүенсә, ҡала властары Силәбе өлкәһе башҡорттарының был инициативаһын хуплаған. Һәйкәл ҡуйыу сығымдарын өлкә башҡорттары ҡоролтайы үҙ өҫтөнә алған. Сығымдарҙың бер өлөшен эшкыуар Марсель Йосопов түләйәсәк.

✔Республиканың Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһына лауреатлыкка кандидаттар тәҡдим итеү дауам итә. Ижади эштәр 1 майға тиклем дауам итә. Белешмәләр өсөн телефондар: 251-57-19, 257-14-75.

✔Лос-Анджелестағы марафонда Башҡортостан спортсыһы Рәмилә Бурანғолова һоҡланғыс уңышҡа өлгәште. Ул бына нисәмә йыл инде "мастерс" категорияһында /40 йәштән уҙғандар/ сығыш яһай. Был юлы ул Кения спортсыһынан ғына ҡалышты.

✔Республикала 322 әсә "Әсәлек капиталы" сертификатына эйә булды. Тәүге сертификаттар Баймаҡ, Күгәрсен районҙарында, Өфө ҡалаһында тапшырылды. Сертификаттар буйынса Башҡортостан рекордсы төбәктәрҙең иң башында тора. Йыл башынан алып республикала 6053 бала тыуған. Шуларҙың 2935-е - ғаиләлә икенсе һәм өсөнсө бала. Ошоға саҡлы Пенсия фондының республика идаралығына "Әсәлек капиталы" сертификаты алыуға ғариза менән 756 кеше мөрәжәғәт иткән. Уларҙың 380-е буйынса ҡарар ҡабул ителгән һәм хаттар ебәрелгән.

✔Март айынан баш ҡалалағы барлыҡ юғары уҡыу йорттары Асыҡ ишектәр көнө үткәрә. БДУ-ла, Башҡорт дәүләт медицина университетында - 24 мартта, Башҡорт дәүләт педагогия университетында 30 мартта үтә.

✓ ***Роспотребнадзор Рәсәй баҙарҙарының 30 процентҡа яҡыны санитар-эпидемиологик режимды боҙоуын асыҡлаған. Уларҙың 10 проценты ғына санитар-техник нормаларға яуап бирә.***



*БЕЛЕҮ КӘРӘК*

# Ауырыған өсөн,

## бала баҡҡан өсөн түләүҙәр

Әгәр балаға 7 йәш тулмаған булһа, уны амбулатори-яла дауалағанда тәүге 10 көн өсөн стажығыҙға ҡарап 60, 80 йәки 100 процент пособие түләнә. Дауалау ваҡыты 10 көндән артып китһә, эштә булмауығыҙ өсөн ур-таса эш хаҡының 50 проценты, ә стационар дауала-ғанда пособие күләме страховка стажығыҙҙың оҙай-лығына ҡарап түләнә.

Әгәр бала (7-нән 15 йәшкә тиклем) ауырып китеп, ҡарауға мохтаж булһа, амбулатор дауалауҙың һәр ос-рағы буйынса 15 календарь көнгә тиклемгә осор өсөн пособие түләнәсәк, ләкин ауырыу баланы ҡарауҙың бөтөн осрағы буйынса йылына 45 календарь көндән артығына түләнмәй.

Йөклөлөк һәм бала тыуҙырыу буйынса пособие түбәндәгесә түләнә: йөклөлөк һәм бала тыуҙырыу буй-ынса 70 календарь көн (йөклөлөк игеҙәк булғанда - 84, бала тапҡанда ауырлыҡтар булғанда - 86, ә ике йәки өс бала тапҡанда -110) оҙайлығындағы отпускы һәм бала тапҡандан һуңғы 70 көн өсөн уртаса эш хаҡ-ынан 100 процент пособие түләнә.

Унан башҡа 2007 йылдың ғинуарынан баланы йәш ярымлыҡ булғансы ҡарау өсөн ай һайын түбәндәге күләмдә пособие бирелә: декрет отпускыһына тиклем эшләмәгән ҡатындар беренсе балаһы өсөн 1725 һум (1,5 мең плюс 15 процент Урал коэффициенты), шу-лай уҡ декретҡа тиклем эшләмәй тапҡан икенсе йә өсөнсө балаһы өсөн ай һайын 3450 һум күләмендә по-собие алаҡаҡ.

Әгәр ҡатын эшләһә, баланы йәш ярымлыҡ булғансы ҡарау өсөн пособие уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмендә түләнә, ләкин айына 6 мең һумдан артыҡ түгел. Әгәр әсә йәш ярымға тиклем бер үк ваҡытта игеҙәктәрҙе һәм тағы ла бер нисә бала ҡараһа, посо-биеның күләме дөйөмләштерелә.

РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Ми-хаил Зурабов әйтеүенсә, яңы пособиеларҙы 2007 йылда бала тапҡандар һына түгел, ә унан алдараҡ та-пҡандар ҙа алырға хоҡуҡлы. Бала тапҡанда бирелә торған 8 мең һум пособие Урал коэфициентын да ин-дереп 9,2 мең һум тәшкил итә.

2007 йылдан балалар баҡсаһына йөрөгән балалар өсөн дә компенсация күләме артты. М. Зурабов шу-лай уҡ 4,5 миллионға яҡын ғаиләләр балалар баҡсаһы сығымдары өсөн компенсация ала аласаҡ, тине. Әлегә бындай түләүҙәрҙең механизмы эшләнеп бөтмәһә лә, министр был средстволы ата-әсәләр льгота фор-маһында түгел, ә "тере" аҡса менән ҡулына аласаҡ, ти.

Быйылғы йылдың тағы бер яңылығы - баланы ға-иләгә тәрбиәгә биргәндә 8 мең һум (Урал коэфициен-ты иҫәпкә алынмайынса) күләмендә берҙәм пособие түләнәсәк. Унан тыш, Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостанда балаға һәр ай биреләсәк пособие тураһында" Законының 4-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы БР Законына ярашлы, 2007 йылдың 1 ғинуарынан балаға ай һайын түләнгән посо-бие күләме 110 һумға (90 һум ине) артты һәм ул Урал коэфициенты иҫәбе менән 126,5 һум, яңғыҙы бала үҫтергән әсәгә 253 һум, хәрби хеҙмәткәр ға-иләһендәге һәм ата-әсәһе эҙләүҙә булған балаларға 189,75 һум тәшкил итәсәк.

Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, республикала күп бала-лы ғаиләләргә пособие ай һайын түләнәсәк. Ул дүрт балалы ғаиләләргә - 1 мең, ә биш йәки унан күберәк балалы ғаиләләргә 1 мең 500 һум тәшкил итә.

**Галина БАХШИЕВА.**
**"Башинформ".**

**(Аҙағы. Башы 10-сы һанда).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

### Төндә араҡы һатылмаясаҡ

**Был закон тиҙ ҡабул ителде, сөнки БР-һы Дәүләт Йыйылы-шы - Ҡоролтай депутаттары-ның халыҡты сәләмәт йәшәүгә ылыҡтырыу теләге көслө ине.**

- Тикшереүҙәр буйынса, рес-публика халҡы аҙыҡ-түлеккә то-тонған аҡсаһының 30 процентын араҡыға түгә. Алкоголле эсемлек-тең 15-30 проценты төндә һаты-ла, - ти депутаттар.

Хәҙер 15 градустан көслөрәк спиртлы эсемлектәр киске сәғәт 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем һатылмаясаҡ.

Тәүлек әйләнәһенә эшләүсе су-пермаркеттар был мәсьәләне си-сеү юлын эҙләй. Улар спиртлы эсемлектәрҙе киске сәғәт 11-ҙән һуң һатыусы күҙенән йәше-рерҙәрме, әллә кассала алып ҡа-лырҙармы - әлегә билдәһеҙ.

Эшҡыуарҙар яңы закон сығыу-ына бик ҡайғырмай, сөнки төндә араҡы һатыуҙан килем ни бары дөйөм сумманың 10-15 процен-тын ғына тәшкил итә.

### Бал ҡорто - юбилей талисманы

**Республика Хөкүмәте башҡ-орт балын бөтөн донъяға билдәле иткән Бөрйән ҡортон Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушы-лыуының 450 йыллыҡ талис-маны итеп һайланы.** Ҙур бай-



рамға әҙерләнеү сараларының бер йүнәлеше - сувенирҙар эшләп сығарыу буйынса БР Хөкүмәте эргәһендәге махсус булдырылған эшсе төркөм шөғөлләнә. Сәнәғәт, инвестиция һәм инновация сәйәсәте министр-ры Юрий Пустовгаров әйтеүенсә, сувенирҙар ҡунаҡтарға ғына түгел, ә Башҡортостанда йәшәгән бөтөн кешеләргә етерлек итеп эшләнергә тейеш. Ҡайын туҙы, һалам, ағас, таш, фарфор һәм еҙҙән эшләнгән сувенирҙарҙың 200 төрлө өлгөһө тәҡдим ителгән дә инде. Төрлө конкурстарҙа 50-гә яҡын рәссам һәм шәхси эшҡы-уарҙарҙан башлап, тотош коллек-тивтар ҡатнашты.

Стәрлетамаҡтың "Дело" фир-маһы тәҡдим иткән Бөрйән ҡорто талисманы дизайны әлегә иң уңышлыһы һанала. Талисманды Өфөнөң "Полноцвет" яуаплылығы сикләнгән ойошма етештерергә әҙер булыуға ҡарамаҫтан, кон-курс тамамланмаған әле, шуға күрә унда башҡа авторҙар ҙа ҡат-наша ала. Кем башҡорт балын бөтөн донъяға билдәле иткән егәрле Бөрйән ҡортон зауыҡ менән эшләй - шул проекттың еңеүсеһе буласаҡ.

### Байҙар менән ярлылар араһы

**Иҡтисад үҫеше министрлығы башлығы Герман Грефтың билдәләүенсә, юғары һәм түбән эш хаҡы алып эшләүсе Рәсәй граждандары араһында-ғы айырма 2006 йылда 14,9-ҙан 15,3 тапҡырға арҡан.** Шу-лай уҡ ул бюджет өлкәһендәгеләр менән иҡтисадтың реаль секто-рында эшләүселәрҙең эш хаҡы күпкә айырылыуға ҡарамаҫтан, халыҡтың йәшәү кимәле былтыр ҡәҙимгә яҡшырҙы, тип билдәләгән. Ил халҡының реаль аҡса килеме 10,2 процентҡа, ә эш хаҡы уртаса 13,4 процентҡа артҡан. Министр шулай уҡ соци-аль пенсия күләме 2009 йыл аҙағына йәшәү минимумына тик-лем күтәреләсәк һәм пенсия си-стемаһындағы тигеҙһеҙлекте бөтөрөү өсөн тиҙҙән был өлкәлә реформа үткәреү мәсьәләләре хәл ителәсәк, тип вәғәҙә итә.

### Социаль фатир

**Ҡала социаль торлаҡ про-граммаһында ҡатнашыусы тәүге 100 кеше фатир алырға документтар әҙерләй башла-ны.** Билдәле булыуынса, 2006 йыл аҙағында граждандарға ар-зан хаҡҡа торлаҡ тәҡдим итеү буйынса программа ҡабул ителгәйне. Программа буйынса торлаҡ сиратҡа ярашлы бюджет сфераһында эшләүселәргә тәҡдим ителә. Социаль норма буйынса фатирҙар (ғаиләләге бер кешегә 12 кв. метр) уның дөйөм хаҡының 30 процентынан түбән булмаған тәүге взнос менән "квадратына" 24,5 мең һумға бирелә. Ҡалған суммаға кредит "УРАЛСИБ" банкында юл-лана. Әле 100 ғаилә Дим биҫтәһенән биреләсәк йорттан аласаҡ фатирҙарына документтар һәм кредит юллай. Фатирға займ 15 йылға тиклем бирелә һәм кре-дит буйынса уны түләп бөтөрмәйенсә, хужаһы фатирҙы һата алмай.

Әле республикала 130 меңдән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж, шуларҙың 17 проценты йәшәү минимумы-нан түбәнерәк эш хаҡы ала. Ун-дайҙар социаль найм киле-шеүҙәре буйынса торлаҡ менән тәьмин ителергә тейеш. Фатир шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарҙың 74 проценты предприятиеларҙа һәм ойошма-ларҙа сиратта тора. Ошоға бәйле республикала хеҙмәткәрҙәрҙең торлаҡ проблемаһын хәл итеүгә предприятиеларҙа әйләнештән бер процентты тотоп ҡалыу мөмкинлеген биргән закон ҡабул ителде. Әле БР Торлаҡ төҙөлөшө фонды менән 22 предприятие ки-лешеү төҙөнө һәм уларҙан 10 предприятие 7,3 миллион һум аҡ-са күсереп тә өлгөрҙө. Торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеүгә былтыр предприятие һәм ойошмалар бөтәһе 274 миллион һум аҡса ебәрҙе, фаразлауҙар буйынса быйыл 666 миллион һум аҡса алынасаҡ.

### Белем алыу

**РФ хөкүмәте ике кимәлле юғары белем системаһына күсеү тураһындағы закон про-ектын хупланы.** РФ хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Д. Мед-ведев әйтеүенсә, "юғары белем ике кимәлләгә күсеүгә әҙер". За-кон проекты Рәсәйҙә бакалаври-ат (беренсе кимәл), магистратура йәки белгес әҙерләү (икенсе кимәл) кеүек юғары профессио-наль белем биреүҙе индермәксе. Документтың 2007 йылдың 1 сен-тябрҙә үк үҙ көсөнә инеүе бар. Был закон проектын ҡабул итеү хеҙмәт баҙарында кадрҙарҙы тәҡдим итеү менән уларға ҡыт-лыҡ араһындағы структур тап килмәүҙәрҙе бөтөрөүгә тәүшарт-тар тыуҙырасаҡ.

### Баҙарҙар ябылырмы?..

**Роспотребнадзор Рәсәй баҙарҙарының 30 процентҡа яҡыны санитар-эпидемиоло-гик режимды боҙоуын асыҡла-ған.** Уларҙың 10 проценты ғына санитар-техник нормаларға яуап бирә. Шул сәбәпле режимды һанға һуҡмаусыларға 41 миллион һумдан ашыуыраҡҡа 30 мең штраф һалынған һәм суд ҡарауы-на 755 эш ебәрелгән.

Макроиҡтисад тикшеренеүҙәре институты директоры Владимир Костаков, хөкүмәттең мөмкин тиклем күберәк заманса матур сауҙа үҙәктәре асырға тырышыу-ына аптырарға ярамай, сөнки Рәсәй баҙарҙарының прилавка тирәһе һәр саҡ быраҡ һәм унда йыш ҡына күптән һатыуҙан алы-нырға тейешле тауарҙар менән сауҙа итәләр. Ә яңы сауҙа үҙәктәре матур һәм таҙа бу-лыуҙан тыш, тауарҙарының да баҙарҙағыға ҡарағанда күпкә ар-зан булыуы менән һатып алыусы-ларҙы үҙенә йәлеп итеп тора-саҡ, ти.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Республикала беренсе тапҡыр сноубордистар фестивале үткәрелде. Республиканан ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән был экстремаль спорт төрөн яратыусыларҙы Ирәмәл тауына йыйҙылар. Был фестиваль ту-раһында документаль фильмды "Вся Уфа" каналынан ҡарай алаһығыҙ.

☑ Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүсе "Симакс" үҙәге баш ҡала баҙарҙарындағы аҙыҡ-түлек хаҡтары менән танышты. Февралдә иң ҡиммәтле ит Үҙәк баҙарҙа булған һәм ул 155 һумға барып еткән. Иң арзан ит "Радуга" һәм "Юрматы" баҙарҙарында, бында бер кг ит 115 һум торған.

☑ Өфөлә каратэ буйынса "Сыбар юлбарыҫ" VI халыҡ-ара турниры үтте. Был турнир тәүге тапҡыр 1994 йылда Өфөлә ойошторола. 1996 йылдан ярышта Рәсәйҙең төрлө төбәк спорт-сылары ҡатнаша башлай. 2002 йылда уға халыҡ-ара статус бирелә. Ярышта Силәбе һәм Башҡортостан спортсы-лары иң яҡшылары булды.

☑ Өфө урамдарының юл саттарын-да ваҡыт һынағысы светофорҙар - таймфорҙар ҡуйыу дауам иттерелә. Әле ҡалала 84 таймфор ҡуйылған, та-ғы 200-ө ҡуйыласаҡ. Тиҙҙән бындай таблолар Стәрлетамаҡ, Салауат, Ок-тябрьский ҡалаларында ла барлыҡҡа киләсәк.

☑ Сипайлово биҫтәһенең ҡап ур-таһында, Ҡариҙел йылғаһы буйында яңы күңел асыу һәм сауҙа комплексы төҙөләсәк.

☑ "Ҡунаҡһарай" комплексында "Банкылар. Страховка. Баһалау - 2007" тигән күргәҙмә ойошторолдо. Унда 40-лап банк, финанс, баһалау һәм аудитор фирмалары ҡатнашты.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендә "Башҡортостан Республи-каһы халыҡтары телдәре тураһын-да"ғы БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса Терминология төркөмө ойо-шторолдо. Был төркөм рәсми өлкәлә башҡорт һәм рус телдәрендәге тер-миндарҙың дөрөҫлөгән, һүҙҙәрҙе ҡул-ланыуҙың нормаларын контролдә то-тоу буйынса эш алып барасаҡ.

☑ Оҙаҡламай Өфө йорттары ҡуҙәтеү камералары менән йыһазлан-дырыласаҡ. Был яңы система халыҡты төрлө тәртип боҙоусыларҙан, хулиган-дарҙан һаҡларға ярҙам итәсәк, тип фаразлана. Экспериментҡа тәү-геләрҙән булып Бикбай һәм Сипай-ловский урамдарындағы алты йорт эләкте. Йортта һәм подъездарҙа бул-ған хәлдәрҙе диспетчерҙар тәүлек әйләнәһенә күҙәтә, яҙып бара һәм ар-хивҡа тапшыра. Был камералар бала-лар майҙансыҡтарына һәм автомо-биль парковкаларына ла ҡуйыласаҡ.

*СИТ-ЯТТАР ШУЛАЙ ТИ*

# Аман Тулеев: "БАШҠОРТТАР ҠУНАҠСЫЛ ХАЛЫҠ"



**Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллыҡ юбилейы алдынан Кемерово өлкәһе губернаторы Аман ТУЛЕЕВ "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына интервью бирҙе.**

- Башҡортостанға ҡарата мин йылы хистәр һаҡлайым, сөнки минең иң яҡты балалыҡ хәтирәләре һеҙҙең төбәк менән бәйләнгән. Беҙҙең ғаилә бер нисә йыл Күмертауҙа йәшәне. Был һуғыштан һуңғы йылдар ине. Тормош мине бала сағымда уҡ "ҡара алтын" табыусылар менән осраштырҙы. Бәләкәй генә ҡалала мәктәп тормошо башланды, мин тап бында беренсе синыфҡа төштөм, бында тимер юлына һөйөү уянды. Башҡорттар - изгелеккә изгелек, дуҫлыҡҡа дуҫлыҡ менән яуап бирә торған халыҡ, ә уларҙың иң яҡшы милли сифаттары - ҡунаҡсыллыҡ, башҡа халыҡтарға, уларҙың теленә, мәҙәниәтенә һәм традицияларына ихтирамлы мөнәсәбәт, биргән һүҙгә тоғролоҡ. Шуға күрә һеҙҙең республикаға һәм уның кешеләренә ҙур хөрмәт менән ҡарайым.

Кемерово өлкәһе Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Хәҙерге ваҡытта Кузбасты 125 милләт вәкиле төйәк иткән: Башҡортостандан сыҡҡандар - өс меңдән ашыу. Уларҙың күп өлөшө Прокопьевск һәм Ленинск-Кузнецкий ҡалаларында йәшәй. Ленинск-Кузнецкий ҡалаһында "Урал" башҡорт мәҙәни үҙәге" өлкә ойошмаһы эшләй. Уның менән Ғаян Сабир улы Исмәғилев етәкселек итә.

Башҡорт милли ижади коллективтар ҙа байтаҡ. Улар төрлө конкурстарҙа һәм башҡа сараларҙа өлкә исеменән уңышлы сығыш яһай. Был үҙәктәр балаларға үҙ халҡының туған телен, мәҙәниәтен һәм традицияларын өйрәтеү буйынса ла байтаҡ эш башҡара. Беҙҙә йыл һайын "Һабантуй", "Ураҙа байрамы" һәм башҡа дини йолалар байрамы үтә. Өлкәлә эшләп килгән "Кемерово өлкәһендә милләттәр һәм халыҡтарҙың социаль-иҡтисади үҫеше" төбәк маҡсатлы программаһы ҡала һәм райондарҙа төрлө саралар уҙғарыуҙа ярҙам итә.

Башҡорт милләте вәкилдәре Кузбасс үҫешенә тос өлөш индергәне өсөн Кемерово өлкәһе миҙалы һәм ордендары, Кемерово өлкәһе хакимиәтенең Почет грамотаһы һәм рәхмәт хаттары менән наградланды. Улар араһында үҙенең фиҙаҡәр хеҙмәте менән танылыу яулаған кешеләр бар. Улар араһынан Салауат Ғилмишәриф улы Итҡолов - Өлкә халыҡ депутаттары Советы депутаты, Кемерово өлкәһе ҡулланыусылар союзы советы рәйесе. Ул 1998 йылда Кузбаста беренсе губерна баҙары ойоштороусы етәксе.

Беҙҙең иҡтисади бәйләнештәребеҙ ҙә үҫешә бара. Төбәктәребеҙ араһындағы тауар әйләнеше күләме йылына ике миллиард һум тәшкил итә. Кузбастан сығарылған продукцияның бер проценты Башҡортостанға тура килә, Кузбасҡа ингән продукция 1,6 процент тәшкил итә. Башҡортостан Республикаһы Кузбасҡа дизель яғыулығы, мазут, автобустар ебәрә.

2006 йылдың майында төбәктәребеҙ араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Иҡтисади мөнәсәбәттәр сауҙа менән генә сикләнергә тейеш түгел. Шуға күрә беҙ берлектәге инвестиция проекттары һәм программалары эшләүҙе лә планлаштырабыҙ.

Башҡортостан Республикаһының уңыштары Президентығыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән бәйле булыуын айырып әйтке килә. Беҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән күптәнге таныштарбыҙ. Миңә уның дәүләт кимәлендә фекер йөрөтөүсе етәксе булыуы оҡшай. Ул илебеҙҙең берҙәмлеген, Рәсәй халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты нығытыу буйынса арымай-талмай эшләй. Мин Президент Мортаза Рәхимовтың республикала эшләгән барлыҡ эштәрен - социаль йүнәлешле сәйәсәтен, халыҡтың тормош кимәлен күтәреүгә йүнәлдерелгән тырышлығын, өлкән кешеләргә һәм йәштәргә иғтибарлы мөнәсәбәтен ихлас хуплайым. Иң мөһиме, кешеләрҙең уға ышаныс менән ҡарауына ҡыуанам.

Башҡортостан халҡына тыныслыҡ, тыуған төйәк һәм Ватан хаҡына уңышлы һәм ижади хеҙмәт теләйем!

**Сергей ЖИДКОВ.**

**"Башинформ".**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## Һүҙ ҡәҙере

**Һүҙҙәр, һүҙҙәр... Айырым өндәрҙән төҙөлөп, һүҙ булып тышҡа бәреп сығаһығыҙ, телмәргә әйләнәһегеҙ. Фекер булып төйнәләһегеҙ, ҡараш булып нығынаһығыҙ, иман булып, асылға ҡайтырға саҡыраһығыҙ.** Айырым хәрефтәрҙән төҙөләһегеҙ ҙә, ташҡа баҫылаһығыҙ, тарихты теркәйһегеҙ, киләсәк быуындарға йә күңел йыуанысы, йә ғибрәт булып, юл алаһығыҙ. Әммә һәр һүҙҙең һәм һүҙҙәр бәйләнешенең мәғәнәһе булмаһа, һүҙҙәр күптән тырым-тырағай таралышып бөтөр һәм кешелек хәтере юйылыр ине. Алла һаҡлаһын, беҙ шул саҡ ым-ишара ярҙамында ғына аралашыр инек микән? Аралашыу мөхите тарайып, аралашыуҙың мәғәнәһе лә күҙ күремендә һәм ҡул һуҙымы араһында ғына булыр ине.

Һүҙҙәр, һүҙҙәр... Әл дә һеҙ бар. Һеҙ булмаһағыҙ, һүҙҙәрҙең иң камил һәм мәңгелек дөрөҫ теҙмәһе булған Аллаһы Тәғәлә һүҙҙәрен дә ишетмәҫ инек. Беҙ, әҙәми заттар, бары тик тырым-тырағай фекерҙәрҙән мәғәнә табып, камиллыҡҡа яҡынайып, асылыбыҙҙы асабыҙ, иманға ҡайтабыҙ.

**Кинйә ШӘМСИНУРОВ.**

*ӘЙТӘГҮР!*

**Заман беҙгә күп ваҡыт күңел тартҡан шөғөл менән түгел, табыш биргән эш менән булыуҙы талап итә. Ошо ҡыйынлыҡ менән осрашҡан һәр йәш кеше һайлау алдында торорға мәжбүр. Аҡсалы, ләкин күңелең толҡа тапмаған эш урынымы, әллә һине хәйерселектә тотҡан, әммә күңелеңә ял бирерлек шөғөлмө? Һәр кем был мәсьәләне үҙенсә хәл итә. Ғөмүмән, хәҙерге көндә эш табыуы еңелме? Ошо һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:**

## Ниндәй һөнәр яҡшы?

### Заманға яраҡлыһы

● **Әлфинур, уҡытыусы:**

- Мәктәптә эш була инде ул. Мин унда килеп кергәс тә, шундуҡ эшкә алдылар. Уҡытҡан фән буйынса уҡытыусылар Өфөлә түгел, тотош республикала етешмәй. Шуға күрә эш эҙләгәндә әллә ни ҡыйын булманы. Балалар менән эшләүе оҡшай, тик мәктәптән тиҙҙән китермен, ахыры. Алған аҡсам фатирға түләргә лә етмәй.

● **Ғәфүр, һатыусы:**

- Ауыл хужалығы белгесемен. Магазинда эш юҡлыҡтан түгел, аҡсаһы булғаны өсөн ултырам. Ғаиләмде аҫырарға кәрәк тә инде. Курсташым районда баш агроном булып та, аҡсаны минән, ябай һатыусынан, түбән ала. Яратҡан эшең аҡса килтермәһә, күңел тыныс булмай инде ул. Был эште бик оҙаҡ эҙләп, эш тәҡдим итеүселәр менән әллә күпме һөйләшеүҙәр үткәреп, таптым.

● **Алһыу, эшҡыуар:**

- Был эш менән өйҙә ултырып ялҡҡанға шөғөлләнә башлағайным. Тора-бара оҡшап китте, табышы ла бар. Эшем аҡсалы ла, күңелгә лә ята. Үҙ эшемде башлап китеүе ауыр булһа ла, хәҙер үкенмәйем.

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:**

**Хеҙмәт баҙарындағы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бөгөнгө көндә маркетолог, иҡтисадсылар, һатыусы, юрист, программист һөнәрҙәре кәрәкле һанала. Ни өсөн? Тәү сиратта барыһы ла баҙар иҡтисады үҫеше менән аңлатыла. Мәҫәлән, маркетологтар реклама, компанияның үҫеш мөмкинлектәрен өйрәнә. Хеҙмәт баҙарында маркетологтарға ҡытлыҡ юҡ, әммә был өлкәләге ысын белгестәр аҙ. Шулай уҡ хәҙер бөтә Рәсәй күләмендә яңы компаниялар барлыҡҡа килә, бик күп предприятиелар "күләгәнән" сығып, ҡайтанан эш башлай, тимәк, иҡтисад өлкәһе белгестәре өсөн эш күп.**

**Ниңәлер, ҡайһы бер кешеләр һатыусы һөнәренә бер аҙ кәмһетеберәк ҡарай. Йәнәһе, һатыусы булыу өсөн артыҡ ҙур белем талап ителмәй. Һатыусы һөнәрен һайлағандар махсус белемле генә түгел, яуаплы, аралашыусан, төрлө ҡыйынлыҡтарға бирешә һалмаған кешеләр булырға тейеш. Ул үҙенсәлектәргә эйә булған кешеләр бик үк күп тип әйтеп булмай. Шуға күрә һатыусылар хеҙмәт баҙарында һәр саҡ кәрәк. Электрик, ташсы, төҙөүсе, тәртип һаҡсылары ла киләсәктә эшһеҙ ҡалмаҫ.**

**Ә бына гуманитар фәндәр буйынса белгестәргә ҡытлыҡ юҡ. Тәжрибәһе булмаһа, йәш белгес бөтөнләй эш таба алмай йөрөргә мөмкин.**

**Быйыл бөтә мәктәптәрҙә, техникумдарҙа, юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыу индерелде. Бер мәктәпкә, кәмендә, дүрт уҡытыусы кәрәк. Тимәк, башҡорт теле һәм әҙәбиәте белгестәренә эш тә, иғтибар ҙа артасаҡ.**

**Шулай итеп, эш эҙләү яҙмышыңды эҙләү менән бер. Иң мөһиме - ваҡытында үҙеңде табыу һәм күңелеңә бар яҡлап та ятҡан эшле булыу.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

# БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ



### Планета мунсаһы

Яңы Зеландияла боронғо халыҡ маориҙарҙың Вакаревара тигән бәләкәй генә ауылы бөтөн донъяға билдәле. Ул ер йөҙөндәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ гейзерҙар урғылып торған ерҙә урынлашҡан. Фонтан шишмәләрҙән барлыҡҡа килгән быу эсендә ҡалған тирә-йүн алыҫтан шомло бер урын һымаҡ күренә. Һауаның даими дымлылығынан тыш, тупрағы ла эҫе булған был ерҙә ниндәй ҙә булһа үҫемлек үҫеренә ышанғы ла килмәй, әммә тырым-тырағай булып үҫһәләр ҙә, улар бар һәм бик күп төрлөләр. Был фантастик пейзажға ҡарап, моғайын, Ер планетаһы "йәш сағы"нда шулай бер туктамай сажлап ҡайнап торғандыр, тип уйлайһың.

Ҡайнар фонтандар шауы, быуҙың шыжлауы, ер аҫтында һыуҙың бүлкелдәп ҡайнауы һәм башҡа тауыштар һис тынмаған был "боронғо мөһабәт мунса" уртаһынан Пуаренга тигән һалҡын һыулы шишмә аға. Шишмәнән алыҫ түгел ерҙә "мейе һалынған көршәк" тип исемләнгән эҫе һыулы түңәрәк инеш бар. Йылға үрендә гейзерҙарҙың иң тынғыһыҙы - "Гигант ҡаҙан" урынлашҡан һәм уға яҡындағы тағы бер ҙур күлдән күтәрелгән быуҙың эҫелегенән дымланған һауанан да ҡайнар ипкен бөркөлөп тора. Ғәҙәттә, тәбиғәттең бындай хәүефле йүгәнһеҙлеге кешеләрҙе ҡурҡыта, ләкин Вакаревара ауылы кешеләренең инде нисәмә быуыны гейзерҙар менән йәнәш йәшәй. Улар эҫе йылғаларҙа кер йыуа, бәләкәйерәк тишектән урғылған ҡайнар быу өҫтөндә ашһыу бешерә, һыуы уртаса эҫелектәге йылғаларҙа рәхәтләнеп "мунса инә". Улар ыңғайына ҡыйыуыраҡ туристар ҙа эҫе йылғала "мунса инергә" тәүәккәлләп, тәбиғәттең ҡөҙрәтен тыштан күреүҙән тыш, тәндәре менән тойорға ла ярата.



УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

# Балаҙы шәхес итеп күр

**Тәрбиә ҡанундары хаҡында һүҙ сыҡһа, әхирәтемдең мәктәптә эшләй башлаған дәүерен моңһоу ғына йылмайып иҫләп алам. Ул балаларҙан ныҡ ҡурҡа ине. Уҡыусылар шуны һиҙепме, әхирәтемдең һарыуын ҡайнатырға әҙер генә торҙо. Йыш ҡына дәрес барышында уның тауышын балаларҙың шау-шыуы күмеп китә ине. Бер-ике тапҡыр завуч ярҙамға килеп, уҡыусыларҙы урынына ултыртып сыға.**

-Һеҙҙән ҡурҡмайҙар, Ләйлә, шуға класта тәртип юҡ. Уҫалыраҡ булыр кәрәк ине һеҙгә,- тип кәңәш бирә завуч.

Уҫалыраҡ булыр өсөн ниҙәр генә ҡылманы әхирәтем. Ҡап-ҡаранан кейенеп килә, балаларға "икеле"ләр менән янай. Яманыраҡ тауыш менән ҡысҡырырға өйрәнеп алды. Уҡыусылары саҡ ҡына ыжлаһасы! Бер көн тәнәфес ваҡытында уның пальтоһын кейеп алып, коридорҙа йөрөгәндәрен күргәс, әхирәтем ғариза тотоп, директорға инә.

-Китер өсөн сәбәп кәрәк, Ләйлә.

-Балалар мине яратмай.

-Ә һин уларҙы яратаһыңмы һуң?- директор ҡағыҙҙарынан айырылып, йәш уҡытыусыға текәлә.

"Мин ыңғай яуап бирергә уҡталдым да, ҡапыл, ниңәлер, ярты һүҙҙән туҡтап ҡалдым",- тип һөйләгәйне Ләйлә.

Ул ғаризаны йомарлап, сүп кәрзиненә ата ла, класҡа инеп китә. Дөрөҫлөктө ишетеү ҡыйын була Ләйләгә. "Мин балаларҙы яратыу түгел, уларға бер тапҡыр булһа ла ихлас йылмайғаным, күтәрелеп ҡарағаным юҡ ине",- тип һөйләгәйне аҙаҡ әхирәтем. Ошонан һуң хәлдәр ҡырҡа яҡшыға үҙгәрҙе тип әйтә алмаһам да, Ләйләгә еңелерәк булып китте. Сөнки ул балаларға һөйөү аша белем бирергә кәрәклеген аңлағайны һәм шул ҡағиҙәне үтәргә тырыша ине.

Ошо ваҡиғанан да ниндәйҙер һығымта яһарға була. Беҙҙә күп ваҡыт тәрбиә мәсьәләләрендә һиҙгерлек, үҙ-үҙебеҙгә талапсанлыҡ етешмәй. Был мәҡәләлә бирелгән педагог тәрбиәһе кәңәштәре, бәлки, ата-әсәгә лә, уҡытыусыға ла ярап ҡалыр.

Беренсенән, баланы тыңларға өйрәнергә кәрәк. Ул ғына һеҙҙе тыңларға тейеш түгел дә инде! Ул ҡысҡыра икән, яуап итеп тауышығыҙҙы күтәрмәгеҙ. Кеше ни өсөн ҡысҡыра? Уны ишетмәҫтәр, фекерен тыңламаҫтар, тип ҡурҡыуға ҡалғанда. Балаларға йомшағыраҡ булырға тырышығыҙ. Бала психологияһы үтә лә һиҙгер, уяу. Иң тәүҙә баланың көйһөҙләнеү сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Был сәбәптәрҙе юҡ итеү өсөн һеҙ ниҙер эшләргә тейешһегеҙ. Балағыҙҙы йәлләү ысулдарын тик һеҙ үҙегеҙ генә беләһегеҙ.

Икенсенән, был донъяға бала күҙлегенән сығып ҡарарға өйрәнеү мөһим. Ваҡытлыса ғына булһа ла. Мәҫәлән, балаң йә уҡыусың бер нисек тә алфавитты иҫләп ҡала алмай. Һеҙ был хәлде трагедия итеп ҡабул итәһегеҙ һәм, ниһайәт, түҙемлелегегеҙ бөтөп, әрләшергә тотонаһығыҙ. Өйҙә атаһы ҡыҙа:"Нисек инде уҡый алмайһың? Еп-еңел дә баһа!". Һәм бала, ҙур кешеләр донъяһына һыймай, ҡайҙалыр төпкә, кәмһенеү һаҙлығына барып тәкмәсә.

Шул мәлдә балаға ярҙам кәрәк. Алфавитты нисек иҫтә ҡалдырыу ысулдарын төшөндөрөгөҙ. Һеҙ уларҙы үҙегеҙ ҙә белмәйһегеҙме? Ә ни өсөн уларҙы бала белергә тейеш? Ҡулығыҙға китап алығыҙ, өйрәнегеҙ. Баланың нимәнәндер өлгәшә алмауында тәү сиратта ата-әсә ғәйепле. Шул дөрөҫлөктө ҡабул итеү һеҙҙең өсөн дә, балаларығыҙ өсөн дә ыңғай һөҙөмтә бирер ине.

Өсөнсөнән, балаларығыҙ менән ихлас һөйләшегеҙ. Улар һеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе ишетеп үҫергә тейеш. Шул фекерҙәр арҡылы ул донъя менән таныша, уны яҡшыға-яманға бүлә. Был мәғлүмәтте һеҙҙән алмай, кемдән алһын бала?

Дүртенсенән, үҙегеҙҙең хатағыҙҙы таный белеү мөһим. Беҙ барыһын да өлкән кеше психологияһы менән хәл итергә өйрәнгәнбеҙ. Беҙ ҙур, тимәк аҡыллы, хаҡлы. Бала бәләкәй, тимәк, хата уйлай. Эштән ҡайтып, балағыҙҙы буштан-бушҡа туҙҙырып әрләп ташланығыҙмы? Балағыҙ һеҙҙең кәйефегеҙ юҡлыҡҡа ғәйепле түгел бит. Әрләшә белгәс, ғәфү үтенә лә белегеҙ.

Бишенсенән, балағыҙҙың шәхес булыуын танығыҙ. Һеҙҙең балағыҙҙың фәҡәт үҙе булып ҡалырға хоҡуғы бар. Ниңә уға кемгәлер оҡшап, үҙенә хас булмаған үҙенсәлектәргә эйә булырға? Ул былай ҙа матур, аҡыллы, һәләтле түгелме ни?

Алда әйтеп үткән һүҙҙәргә ҡайтып, шуны һыҙыҡ өҫтөнә алғым килә. Бала һеҙҙең һөйөүегеҙҙе тойһон: мөхәббәт хисендә туҡылған тәрбиә күпкә отошлораҡ.

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

**"Балағыҙ көйһөҙләнгәндә уны ипкә килтерер өсөн ниндәй алымдар ҡулланаһығыҙ?"**

**АЙГӨЛ, хужабикә: - Ғәҙәттә, мыжыуына иғтибар итмәйем. Ҡыҙым илаулап йөрөй-йөрөй ҙә, икенсе нәмәгә әүрәп китә. Былай итеү өсөн ныҡлы нервыларға эйә булырға кәрәк, әлбиттә.**

**РӨСТӘМ, эшсе: - Беҙҙе нисек тәрбиәләнеләр, шулай: ун минутҡа улымды мөйөшкә ҡуям. Бала бер үк ваҡытта тыныслана ла, үҙенең тәртибе хаҡында ла уйлана.**

**ӘЛФИӘ, һатыусы: - Ҡайһы саҡ түҙемем етмәй, елтерәтеп алған саҡтарым да булғылай. Һуңынан баламды йәлләп, йәнем һыҙлай. Ғөмүмән, тәрбиә мәсьәләһендә алтын урталығым юҡ: йә ҡыҙымды алдымдан төшөрмәйем, йә әрләүҙән туҡтай алмай аҙапланам...**

**РӘСИМӘ, уҡытыусы: - Балаларым көйһөҙләнһә, эргәмә ултыртып тороп, тыныс ҡына һөйләшеп алам. Ҡыҙҙарым шундуҡ тынyслана. Бала ла бит кешесә мөғәмәләне аңлай.**

**ПСИХОЛОГ ФЕКЕРЕ:**

**- Һәр осраҡта ла баланың көйһөҙләнеү сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Бәлки беҙ үҙ балабыҙҙы ишетә белмәйбеҙҙер? Ғәҙәти мыжыу артында төрлө проблемалар йәшеренеүе мөмкин. Мәҫәлән, ниңә балалар төнөн йоҡоға китмәй аптырата? Улар бүлмәлә яңғыҙы ҡалырға ҡурҡыуы мөмкин. Тимәк, уларҙың күңелен ниҙер өйкәй, тынғы бирмәй. Бәләкәс кешеләрҙең дә үҙенә күрә проблемалары була бит. Ә беҙ, уларға ярҙам итеү урынына, асыуланабыҙ, "йоҡла!" тип бойорабыҙ. Бала һеҙҙең ышанысты, яҡлауҙы тойоп йәшәһен - шул саҡта ул бөтөн күңелле, һау психикалы шәхес булып үҫәсәк.**

**Ләйсән МАРАҠАНОВА әҙерләне.**

ТУҒАН ТЕЛЕМ

# АРАЛАШЫУ ӨСӨН ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## тел халҡыңды аңлау ҡоралы ла

**Телдең аралашыу ҡоралы буйынса әһәмиәте аңыбыҙға ныҡ һеңдерелгән, һәм беҙ туған телгә лә фәҡәт ошо йәһәттән генә баһа биреүсәнбеҙ. Ә бит беҙгә аралашыу ҡоралы булараҡ туған тел түгел, башҡа телдәр хеҙмәт итә. Әйтәйек, илебеҙ кимәлендә - рус теле, донъя кимәлендә - рус, инглиз, испан, немец, ҡытай, француз, ғәрәп һәм башҡа телдәр. Ә инде туған телебеҙ - аралашыу ҡоралы ғына түгел.**

Билдәле, Тәбиғәт ер йөҙөнә төрлө милләттәрҙе бар иткән. Милләттәр төрлөлөгөнөң беҙ белеп бөтмәгән хикмәте барҙыр. Сөнки Тәбиғәттә һәр нәмә үҙ тәғәйенләнеше менән бар ителгән. Хатта ваҡ ҡына бөжәктәр ҙә был донъяға ниндәйҙер "бурыс" үтәргә тыуа.

Бынһы - Тәбиғәттең бөйөк серелер. Бәләкәй генә тажлы сәскәләрҙән алып, ҡолас етмәҫ олонло ағастар, күрер күҙ абайламаҫ бөжәктәрҙән алып, бүрәнәләй аяҡлы хайуандар һәм селбәрәләрҙән алып, киттарға һәм башҡа ҡырым сиреүендәй төрлө ҡиммәттәрҙең барыһының да үҙ тәғәйенләнеше булған кеүек, милләттәр төрлөлөгөнөң дә, һис шикһеҙ, үҙ билдәләнеше бар. Шуға ла Тәбиғәт был төрлөлөктө һаҡлау, ҡурсалау, ишәйтеү өсөн ҙур көс һала, кешене лә үҙ ҡанундарынан тайпылмау, үҙ-үҙен ҡурсалау зарурлығы һалынған аңлы йән эйәһе итеп яратҡан.

Әйтәйек, милләттәр төрлөлөгөн географик һәм тарихи шарттар аша ғына түгел, ә тел, традиция (ғөрөф-ғәҙәт, йола, көнкүреш, тәрбиә ҡанундары, йыр-моң, һәр төрлө ижад һәм башҡалар) төрлөлөгө менән дә һаҡларға тырыша. Ошоларҙың араһында милләт төрлөлөгөн һаҡлауҙың төп шарты, әлбиттә, тел. Туған тел.

Беренсенән, туған тел - ул үҙ халҡыңды аңлау теле. Халыҡ - ул бөгөнгө көндә йәшәгән милләттәштәрең генә түгел. Халыҡ - үткәндең рухы, бөгөнгөнөң һынланышы, киләсәктең нурланышы. Ә туған тел - халҡыңды аңлау, белеү асҡысы. Халҡыңдың ижадын, ижады аша тарихын, фәлсәфәһен, йыр-моңон, уй-хыялын белмәй тороп, уны беләм тип әйтеп булмай. Халҡын белмәгән кеше - тамырһыҙ ҡамғаҡ. Үҙ халҡын белмәгән кешенән дә нығыраҡ наҙан юҡ. Тамырһыҙ ағас үҫә алмаған кеүек - кеше лә рухи яҡтан үҙ халҡынан башҡа үҫә алмай. Ә кеше башҡа йән эйәләренән рухлы булыуы менән айырыла. Үҙ рухи тамыры булмаған кеше башҡа халыҡ тамырынан һут ала алмай. Рухи донъяһыҙ ҡалған кеше үҙен тулы ҡанлы кешемен тип тә тоя алмай. Сөнки ул Тәбиғәт тарафынан Кешегә йөкмәтелгән бурыстарҙың иң бөйөгөн - үҙ тамырыңдан (ҡан йәһәтенән генә түгел, рух йәһәтенән) нәҫел ҡалдырыу бурысын үтәй алмай.

Икенсенән, туған тел - ул халҡыбыҙҙың боронғо ғилеменә юл. Халҡыбыҙҙың боронғоһо, донъяға ҡарашы, ғилем эстәүҙәге ҡаҙаныштары, йола нигеҙҙәре - барыһы ла ижадында сағыла. Медицинаның терапия, хирургия, психотерапия, фитотерапия һәм башҡа тармаҡтары буйынса ғәжәп белемгә эйә булған халҡыбыҙҙың ғилми ҡараштары ла ижадында сағылыш таба. Шулай уҡ геология, география, астрономия, математика буйынса ла белем сағылыштарын табып була. Иҫ китмәле тәрбиә ҡанундары ла, кешелек донъяһының йәшәйеше тураһында фәлсәфәһе лә сағылған. Әлбиттә, халҡыбыҙға хас булғанса, улар кинәйә, тел төбө менән әйтелгән. Уны телде аңлап ҡына түгел, тойоп белгәндәр генә ынйы бөртөгөндәй сүпләп йыйып, ғилем бейеклегенә күтәрә ала.

Өсөнсөнән, туған тел - туған моң теле. Моңдоң кәйефкә, нервылар күҙәнәктәрен яйға һалыу аша сәләмәтлеккә тәьҫире иҫ китмәле. Бөгөнгө көндә профессиональ медицина музыка терапияһын ғәмәлдә ҡуллана һәм ғәжәп уңыштарға өлгәшә икән, Тәбиғәттең ғәжәп серле һәм ҡиммәтле бүләге - моңдоң, йырҙың, шиғриәттең, бейеүҙең булыуы, фани донъяға йыраусыларҙың, шағирҙарҙың, сәсәндәрҙең, уйынсыларҙың яратылыуы юҡҡа түгел. Һәм, әлбиттә, һүҙ туған музыка тураһында бара икән, туған телһеҙ уға нисек эйә булаһың?!

Дүртенсенән, туған тел - милләтеңде ҡурсалау теле. Тәбиғәт кеше мейеһен ғәжәп киң мөмкинлекле итеп яратҡан. Кеше 5-6 һәм унан да күберәк телдәрҙә иркен һөйләшә, тиҫтәнән ашыу телдә аралаша ала. Бындай зиһен аралашыу даирәһен киңәйтеү, күберәк белеү, донъя кимәлендә белем эстәү өсөн бирелгәндер. Әлбиттә, бындай һәләт биреүҙең иң төп ғилләһе шундалыр: әйҙә, теләгән тиклем тел өйрән, һөйләш, аралаш, әммә былар ТУҒАН ТЕЛЕҢ иҫәбенә генә башҡарылмаһын, тигән фекер һалынғандыр.

Бишенсенән, туған тел - традициялар һаҡлау теле. Һәр халыҡтың үҙ фиғеленә ярашлы үҙ традициялары барлыҡҡа килә. Был традицияларҙың асылын аңлау өсөн шул мөхиттә үҫергә, ул әсә ҡарынында ваҡыттан уҡ ҡанға һеңергә тейеш. Шулай булмағанда, ул ҡабул ителмәй һәм үҙ милли ҡанундарыңдан тайпылыу күренешенә әйләнә. Ә тел белмәү, әлбиттә, традицияларҙан ситләштерә.

Бөгөнгө көндә беҙ донъя кимәлендәге ҡаҙаныштар менән хәбәрҙарбыҙ һәм донъя кимәлендә милләттәр хаҡында фекер йөрөтә алабыҙ. Нимә күҙгә ташлана һуң? Борондан килгән традицияһы нигеҙендә заманса йәшәгән илдәр уңыш ҡаҙана. Традицияһын юғалтҡан, тәбиғәт ҡанундарынан тайпылған илдәр әхлаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек сығанағына әйләнә бара.

Алтынсынан, туған тел - быуындар бәйләнешен, туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытыу теле. Билдәле булыуынса, өлкән быуындан айырылмаған, ҡартатай-өләсәйҙәр менән йәшәгән, йыш аралашҡан ғаиләләрҙә әҙәплелек, әхлаҡлылыҡ нығыраҡ һаҡлана. Өлкән быуын кәрәк урында мәҡәлдәрен дә әйтеп ебәрә, риүәйәттәр ҙә һөйләй, йыр аша ла тәрбиәһен бирә. Ә туған теленән айырылған кеше алмаштырғыһыҙ был байлыҡҡа эйә була алмай.

Тағы ла шул күҙәтелә: туғандары менән туған телдә аралашмағандарҙа, хатта атаһы менән әсәһенә ҡарата ла, яҡынлыҡ-йылылыҡ самалы ғына була. Сит илдәргә йәшәргә сығып китеүселәр һәм кире ҡайтмаусылар араһында, нигеҙҙә, туған телдә аралашмаусылар. Уларҙың күбеһе хатта атай-әсәй ҡәберенә бер ус тупраҡ һалыуҙа ла ҡатнаша алмай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Тәбиғәт (Хоҙай) милләтте ҡан аҙашыуынан ҡурсалау өсөн туған телле иткән. Туған теленән айырылған баланың үҙ мөхите булмай, ә ят мөхиттә Үҙ була алмай, күңел һыйынысы ла, йыуанысы ла таба алмай, ят мөхит тә уны Үҙ итеп ҡабул итмәй. Хатта оҡшаш телле, оҡшаш традициялы булһа ла ҡан аҙашыу хәүефе бар.**

**Тимәк, бынан 450 йыл элек Рус дәүләтенә ҡушылыуҙы хуп һанаған аҡыл эйәләренең башҡорт уҙамандарыбыҙҙың зирәклегенә һоҡланырға ғына ҡала. Оҡшаш телле, оҡшаш традициялы милләттәрҙән йотолмау йәһәтенән эшләнгән үтә лә дөрөҫ аҙым булған был.**

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# Шәмиғол хәлфә

### Хәҙрәттең һөйләгәндәренән:

"Ул саҡта ҡаҙаҡ ерҙәрендә, Бохара яҡтарында дин көслө булған. Мин үҙем дә Бохарала уҡып, белем алыуға ирештем. Әхмәҙулла хәҙрәттә лә, Троицк мәҙрәсәһендә Зәйнулла хәҙрәттә лә дәрес алдым. Доғалар өйрәндем, ятланым. Рәхмәт уларға. Әхмәҙулла хәҙрәт: "Мин донъянан икенсе хаҡ донъяға күскәндә күктә ауаз булыр, шуны күреп уҡығас та, ерләргә килерһегеҙ", - ти ине. 1934 йыл кис һауала Әхмәҙулла хәҙрәттең үлеүе тураһында яҙыу булды. Мин уларҙы үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Әсәйем Миңлехаят Миңлевәли ҡыҙы яҙыуҙы уҡыны ла, доға ҡылып, биттәрҙе һыпырырға ҡушты. Хәлфәне ерләргә Юлдыбай ауылынан Вәхитов Вәли, Алламоратов Ғатаулла, Ишбирҙенән мин һәм Бикбулат ауылынан Мәхиән мулла, йәғни уның ҡырҡ шәкертенән иҫәндәре барыһы ла барҙыҡ.

Ахыры заман етер алдынан дин көсәйер, әҙәм балаһы тәбиғәт ғәрәсәттәрен күреп, ҡурҡып, Аллаға табыныр, ләкин сығырынан сығып шашынған халыҡтың ҡыланышын һис тә кисерә алмау сәбәпле, фажиғә артынан фажиғә килер, ер тетрәр, һыу баҫыр, ҡоролоҡтар миңкетер, ҡошҡорт, йәнлектәр бөтөр, кеше кешене һуйыр, ата - улды, әсә ҡыҙҙы белмәй, зина ҡылыр мәл етәсәк. Кешеләр меңәр саҡырымдарға һыу эҙләп юлға сығыр. Хайуандар, кешеләр һыуға сарсар. Тормоштоң йәме бөтөр. Ашар ризыҡтың тәме, бәрәкәте булмаҫ. Ҡатын-ҡыҙҙы ир-аттан айырып булмаҫ, тормош ҡороу өсөн ҡатын-ҡыҙ ирҙәргә үҙе яусы ебәрер. Илдә ҡот бөтөр, гүзәл заттар яланғас йөрөр, тәтән һурыр, зәғифлек артыр, балаларҙы урамға ташлап ҡалдырырҙар. Был боҙоҡлоҡтарҙың барыһын да Аллаһы Тәғәлә халыҡты тәүбәгә ҡайтһын өсөн бирә. Ә халыҡ аңламай, байлыҡ артынан шашыпҡыуып, ахырызаманды үҙҙәре яҡынайта. Ер түңкәрелеүе лә - ысынбарлыҡ, ер өҫтөн ҡара төн ҡаплап, бөтә тереклек, тәбиғәт туңасаҡ. Көтмәгән урында ер ризаһыҙлыҡ белдереп, тетрәйәсәк. Йылғалар ярҙарынан сығып, халыҡтан әҙәпһеҙлектәре өсөн үс аласаҡ. Былар бөтәһе лә Алланың берлегенә, ҡөҙрәтенә ышанмаған иблестәргә иҫкәртеү буласаҡ. Мин үлгәс, ҡәберемә барып йөрө, иҫкә ал. Ҡәбер тупрағым менән бит-ҡулыңды, һыҙлаған ереңде ыу, ләззәт табырһың. Теләк теләһәң, күккә ҡарап телә. Һәр нәмәне ихлас күңел, асыҡ йөҙ менән ҡабул ит. Һыу эсһәң дә, аҙыҡ ҡапһаң да "Вәсәҡәһем раббыһым, шарабан таһура" тип өс тапҡыр әйтеп башҡар. Бер сихыр ҙа, ауырыу ҙа һиңә ҡағыла алмаҫ. Быны балаларыңа ла өйрәт. Һиңә гел яҡшы төштәр инер, уларҙы яҡшыға юра. Хужалар менән осрашҡанда уң яҡтан торорға тырыш, ул һис һүҙһеҙ һинең әйткәнеңдә үтәр, Хоҙай шулай бойорор".

### Улын әрменән алып ҡайтҡаны

Үрҙә әйтеп үткәйнем инде, Шәмиғол хәлфә һәр саҡ минең ҡайҙа булғанымды белеп тора ине. Улы Дамир Нуҡай ҡыҙы Зифа Итҡоловаға өйләнгәндә хәлфә мине йәштәр туйына табынсы итеп тәғәйенләне. Туй матур үтте. Оҙаҡламай Дамирҙы әрме сафына алдылар. Хәлфә өйҙә юҡ ине. Тиҙҙән Нуҡай мәктәбенән Яңауыл мәктәбенә эшкә күстем. 1956 йылдың яҙында Сапыҡ ауылы яланында йәштәр "Бәйембәт" байрамына йыйылды. Уйын-көлкө тамамланғас, һәр ауыл кешеләре айырым табын йыйҙы. Мин Сәйетҡол ауылы кешеләре менән ултырам. Табын ҡыҙғас, ялан буйлап килеүсе аҡ төҫтәге еңел машина күренде. Машина туҡтаны һәм унан төшкән бер егет табын эргәһенә килеп: "Арағыҙҙа уҡытыусы Миңнулла бармы?" - тип һораны. "Мин Әлимғолов Миңнулла булам", тигәс, егет мине Шәмиғол хәлфә саҡырыуын әйтте. Мин етеҙ атлап машина эргәһенә килдем. Олатай мине йылмайып ҡаршы алды ла: "Бына, улым, мин Дамир улымды Чита өлкәһенән алып ҡайтып барам. Хәрби частағыларҙың барыһын да, хатта командирҙарҙың ҡатындарын, балаларын өшкөрөп дауаланым, шәбәйтә алдым. Шунан бына хеҙмәт итеү ваҡыты бөтмәһә лә Дамир улымды ҡайтарып ебәрҙеләр. Ултыр, күстәнәстән ауыҙ ит. Бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа барырһың", - тине. "Олатай, мин бөгөн бара алмайым, иртәгә мәктәптә кисектергеһеҙ эштәрем бар, районда мәғариф идаралығы мөдире, инспекторҙары килә. Улар киткәс, һүҙһеҙ барасаҡмын", - тигәс, олатай риза булды. Иртәгәһенә һуңлап булһа ла барҙым. Хәлфә "Бәйембәт" байрамы үткәрелеүен, уның урынын, минең унда булыуымды ҡайҙан белгәндер? Ә бит халҡыбыҙҙың был боронғо байрамы төрлө ерҙә - йортта, яланда, сәсеү тамамланғас уҙғарыла ине.

Олатай яҡты донъянан иртәрәк китте. Мин уның васыятын үтәп, ҡәберенә барам, өндәшәм, һаулыҡ һорашам, тупрағы менән ҡул-битемде йыуам, шунан ҡоштай талпынып ҡайтып китәм. Сәлмән Ярмуллиндың "Ахыры заман аяҡ аҫтында" китабында Шәмиғол хәлфә тураһында ла мәҡәлә урын алыуы шатландыра мине. Рәхмәт Сәлмән ҡустыға.

> Әхмәҙулла хәҙрәт: "Мин донъянан икенсе хаҡ донъяға күскәндә күктә ауаз булыр, шуны күреп уҡығас та, ерләргә килерһегеҙ", - ти ине. 1934 йыл кис һауала Әхмәҙулла хәҙрәттең үлеүе тураһында яҙыу булды. Мин уларҙы үҙ күҙҙәрем менән күрҙем.

### Хәлфә менән булған хәлдәр

Шәмиғол хәлфәнең апаһы Бикбаева Ғәйникамал Әхмәҙулла ҡыҙы Төпсәндәге Насиров Мөхәммәтшәрифкә кейәүгә сыға. Улдары Әхмәҙулла Герман һуғышында 1914 йылда үлеп ҡала. Оло ҡыҙҙары Шәмсиямал Мөхәмәтшәриф ҡыҙы Бикбулат ауылы Иҫәнгилдин Мәхмүт менән тормошон бәйләй. Ул ҡыҙ сағында мәрткә китә. Арҡаһында мисәте бар, тиҙәр ине уның тураһында. Ул мәрттә күргәндәрен һөйләй. Атайымдың урынын ожмахта күрҙем, ә әсәйемдең урыны юҡ - ул тамуҡта, тип һөйләгәс, әсәһе ғүмере буйы ҡыҙын өйөнә аяҡ баҫтырманы, үҙе лә уларға барманы. Ул ҡыҙы ураҙа тота ине. Башҡа ҡыҙҙары - Өмикамал, Хөсникамал, Мәстүрә ауылда йәшәнеләр.

Шәмиғол хәлфә апаһына йыш килә торғайны. Һәр саҡ Әүлиә тауына күтәрелә ине ул. Был тау тураһында һәр саҡ:

"Тауҙы ҡәҙерләгеҙ. Тауға иҫеректәр менеп, бейеп, тәртип боҙоп йөрөрҙәр, ә һеҙ уны, ундағы әүлиә ҡәберҙәрен тәрбиәләп торорға тырышығыҙ", – тип өгөт бирә торғайны

Шәмиғол хәлфә халыҡ араһында хөрмәт ҡаҙанған кеше ине. Кем генә ярҙам һорап килһә лә, уны өшкөрөп, дарыу төнәтмәләре менән һауыҡтырып ебәрә ине. Уның дауалау саралары бер нисек тә аңлата алмайым. Ен ҡағылған, фалиж һуҡҡан кешене алып килһәләр, хәлфә тәүҙә иһәнләп, күҙҙәрен йомоп, бер аҙ ултыра торғайны. Шунан ауырыуҙы йә тал сыбығы, йәиһә үҙҙәре алып килгән таҫтамал, сепрәк киҫәге менән һуҡҡылай торғайны. Арбаға һуҙып һалып алып килтерелгән ауырыу тороп ултырыу ғына түгел, йүгереп атлап китә ине.

Бына бер саҡ Юлдыбай ауылынан Яныбай Килсенбаев ағай үҙенең ҡатынын арбаға бәйләп һалып, Ишбирҙегә Шәмиғол хәлфәгә алып килә. Был ваҡиға тураһында Яныбай ағайҙың улы Мөхәммәт ағай һөйләгәйне: "Әсәйем юл буйына туҙға яҙмаған хәбәр һөйләп, аҡырып барҙы. Уның менән ни булғанын да аңламайбыҙ, хәле торған һайын насарланғанын ғына тоябыҙ. Ишбирҙегә барып еткәс, атайым атты ҡапҡа янында бәйләне лә, беҙҙе урамда ҡалдырып, өйгә инеп китте. Бер аҙҙан хәлфә сыҡты. Ҡулына сыбыҡ тотоп алған. Киҙәнеп тороп, өс тапҡыр арбала ятҡан әсәйемә сыбығы менән ныҡ итеп һуҡты ла: "Сисегеҙ ауырыуҙы", - тине. Әсәйем тороп ултырҙы ла: "Һаумыһығыҙ, хәлфә, миңә ни булған, ни эшләп мине бында алып килгәндәр?" - тип һораны. "Яныбайҙың атаһы донъя ҡуйғаны бирле һеҙгә барғаным булмағас, йортоғоҙға ендәр эйәләшкән, - тине хәлфә. - Етмәһә, урамдағы бөтә йүнһеҙҙәр йортоғоҙға инеп эсә, Яныбай ҙа буш ҡалмай икән. Ана бит, күҙенә шешә ене ҡағылған (Ысынлап та, атайымдың бер күҙенә аҡ һалғайны, бер аҙ аҡһап та йөрөнө). Бына шул ен-шайтандар зәхмәте ҡағылған инде һиңә, килен. Ярай, әйҙәгеҙ, сәй эсәйек". Шунан өйгә инеп, күмәкләп сәй эстек тә, ҡайтырға йыйындыҡ. Арбаға сығып ултырҙыҡ та, атты ҡыуабыҙ. Ләкин арба әйләнмәй ҙә ҡуя. Аптырағас, атайым Шәмиғол хәлфә янына инеп, хәлде һөйләп бирҙе. Хәлфә йылмая биреберәк торҙо ла, былай тине: "Әйләнмәҫ шул. Майламайса, арба әйләнә тимени. Бына һин дә миңә ҡатыныңды дауалаған өсөн әжерен бирмәнең бит, ә араҡы өсөн аҡса йәлләмәйһең", - тине. Атайым уға тәғәйенләп алып килгән хәйерен сығарып бирҙе. "Бына шулай, миңә тәғәйенләнгән хәйереңдең араҡы һатып алыуға тотонолоуын теләмәйем", тине. Шунан һуң тәгәрмәстәр ҙә тәгәрәп китте, әсәйем дә кәйефләнде". Ошолар тураһында аптырап һөйләгәйне Мөхәммәт ағай.

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ.**
Күгәрсен районы.

**(Дауамы бар).**

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Ожмах баҡсаһынан...

### беҙгә тигән гранат емеше



**Был емештең исеме латинса "гранатус", йәғни орлоҡло тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан. Ҡаты ҡабыҡлы гранаттың эсе рубин кеүек ҡыҙыл татлы емдәр менән шығырым тулы. Һутлы емдәре, ысынлап та, ҡиммәтле аҫылташты хәтерләтә, шуға күрә ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге минералды гранат тип йөрөтәләр.**

Гранат - кешеләр иң тәү ашай башлаған емештәрҙең береһе һәм уның тыуған иле Персия (хәҙер Иран) тиһәләр ҙә, әлегә тиклем был фаразды иҫбатлаусы дәлилдәр юҡ. Уның Азия емеше булыуы билдәле. Гранат Урта диңгеҙ буйында, Һиндостанда һәм Египетта борондан уҡ тарала. Египетта һәм Вавилонда емештең тылсымлы шифаһы бар, тип иҫәпләйҙәр. Вавилондар яу алдынан, йәнәһе, дошман күҙенә күренмәҫ тылсым яһай, тип ышанып, уның орлоҡтарын иҙелгәнсе сәйнәр булған. Ә Египетта фирғәүендәрҙе ерләгәндә янына йәндең терелеүен символлаштырған гранатты һалғандар. Көнсығышта файҙалы емеш булараҡ, ул инжир һәм йөҙөм менән бер рәттә тора. Ҡөрьәндә гранат өс сүрәлә иҫкә алынып, ике тапҡыр уны Алла барлыҡҡа килтергән емеш, тип һәм бер тапҡыр Ожмах баҡсаларында үҫкән емеш, тип әйтелә.

Изге китапта ул юҡҡа ғына иҫкә алынмай. Гранат ағасы ҡоро тупраҡта ла йәшәү көсөн юғалтмаған, насар һауа шарттарына, көслө ел-дауылдарға бирешмәҫ сыҙамлығы менән айырыла. Ул эҫе, ҡоро йәйҙе һәм 9-12 градус һалҡын ҡышты ла сыҙам үткәрә ала. Әллә ни тәрбиә талап итмәһә лә, йыл һайын ал сәскәләргә күмелеп сәскә ата һәм фонарь формаһындағы эре ҡыҙыл емеш бирә.

Ҡыҙыл емдәре һутлы ғына түгел, шифалы ла. Боронғо табиптар беҙҙең дәүергә тиклем үк уны медицинала ҡулланған. Гиппократ, мәҫәлән, ашҡаҙаны ауыртҡан кешеләргә гранат һуты һығып эсергә ҡушҡан, ә емдең йоҡа тышын яраларҙы уңалтыр өсөн һәм дизентерия ваҡытында файҙаланғандар.

Ғәрәптәр уны баш ауыртҡанда һәм ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары яфалағанда өҙмәй ашарға ҡушҡан. Унда, мәҫәлән, кеше организмы өсөн тәүлегенә кәрәкле 40 процент С витамины бар. Емдәре тимергә бай булғанлыҡтан, табиптар бөгөн дә гранатты анемия һәм аҙ ҡанлылыҡ ауырыуҙары менән интеккән кешеләргә күпләп ашарға ҡуша, сөнки бер гранат ҡына ла ҡандағы гемоглобинды байтаҡҡа арттыра. Шулай уҡ гранат үҙенең составында эритроцит ҡына түгел лейкоцитты барлыҡҡа килтереүсе фолий кислотаһы булыуы менән ҡиммәтле емеш һанала. Емештәге фолий кислотаһы шулай уҡ тәүҙә яралғының, аҙаҡ сабыйҙың нормаль үҫешенә булышлыҡ итеүе менән ауырлы һәм бала имеҙеүсе ҡатындар өсөн айырыуса файҙалы.

Гранаттың әскелтем тәме аппетитты аса, ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй һәм аш һеңдереү процесын еңелләштерә. Һалҡын тейеп йүткергәндә, бөйөрҙәр ауыртҡанда, бауырҙа һәм үт ҡыуығында таш булғанда һутын һығып, ашар алдынан ас ҡарынға эсеү файҙалы. Әскелтем һуты һыуһынды ҡандыра һәм бер аҙ тән температураһын төшөрә. Уның ҡабығындағы һәм еме тирәләй ятҡан йомшаҡ туҡымаһындағы танин матдәһе эс киткәндә, тән бешкәндә, яралғанда тирене бөтәштереү һәм зарарлы микробтарға ҡаршы көрәшеү өсөн файҙалы. Стоматит, фарингит, сей яра һәм тире һыҙырылғанда ла уны яра бөтәштереүсе булараҡ ҡулланалар. Был сирҙәргә ҡаршы көрәшкәндә ҡабығын һәм эсендәге йомшаҡ туҡымаһы төнәтмәһе менән бергә һутын һығып эсеү был бәләләрҙән тиҙерәк ҡотолорға ярҙам итә.

*✓ Беҙҙең башҡорт халҡында ла иң боронғо генотип ҡатын-ҡыҙҙарҙа ғына һаҡланған. Башҡорт ир-аттарында биш-алты тип, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа понтий һәм Урал тибы халҡыбыҙ яралғандан алып үҙгәрешһеҙ көйө һаҡланып килә.*






**Барыбыҙ ҙа "Башҡорт халҡының тарихы" ете томлығын донъя күреүен түҙемһеҙләнеп көтә. Билдәле булыуынса, халҡыбыҙ тарихының һуңғы дәүерҙәренә ҡараған өлөштәре яҡшыраҡ тикшерелгән. Хәҙер был хеҙмәт өҫтөндә эшләүсе ғалимдарыбыҙ, асылда, халҡыбыҙ тарихының беҙҙең эраға тиклем (артабан б.э.т.) һәм был эра башындағы тарихын өйрәнеү һәм яҙыу эше менән мәшғүл. Халҡыбыҙ тарихының иң боронғо дәүерҙәре һис һүҙһеҙ этногенез мәсьәләһе менән барып тоташа. Күренекле ғалимдар, филология фәндәре докторы, академик Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ менән тарих фәндәре кандидаты, РФ Фәндәр Академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнография һәм антропология бүлеге мөдире Ринат ЙОСОПОВ этногенез һәм этник тарих мәсьәләләре буйынса фекер алыша.**

# Нимә ул этногенез?

## Ул - халыҡтың яралғандан алып, тыуғанға тиклемге йәшәү араһы...

**▶ Этногенез - халыҡтың килеп сығышын аңлатһа, этник тарих - халыҡтың һәр осорҙағы тарихын үҙ эсенә ала. Уларҙың араһында ниндәй айырма бар?**

**Р. ЙОСОПОВ:** Этногенез менән этник тарихты бер итеп ҡарарға ярамай. Һәр баланың ата-әсәһе булған кеүек, һәр халыҡ тарихының нигеҙендә ятҡан компоненттары бар. Сабый әсә ҡарынында туғыҙ ай һуҙымында кеше булып формалаша, халыҡ та үҙенсә тарих ҡарынында шундайыраҡ осорҙо үтә. Донъяға тыуған сабыйға исем ҡушалар, халыҡҡа ла исем башҡалар тарафынан ҡушыла. Исем ҡушылған мәлдән халыҡтың тарихы башлана, үҙенә генә хас булған теле, этнографик мәҙәниәте, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре формалаша.

Ә халыҡтың этногенезы асылда тәүге яралғылары барлыҡҡа килгәндән алып, тыуғанға һәм исем ҡушылыуға тиклем арауыҡты үҙ эсенә ала. Башҡорт халҡының этногенезын өйрәнеүсе ғалимдар уның нигеҙендәге бик күп компоненттарҙы билдәләне. Улар - фин-уғыр, иран, мадьяр, төрөк һәм башҡалар. Беҙ халҡыбыҙҙың тарихын рәсми рәүештә Ибн Фаҙлан яҙмаларына таянып, IX быуаттан башлана, тип әйтеп өйрәнгәнбеҙ. Ысынында иһә, тарихыбыҙ тағы ла боронғораҡ дәүергә барып ялғана. Башҡорттарҙың антропологик типтары араһында понтий тибы бар. Ул - иң боронғо тип һәм халҡыбыҙҙың тамырына, сармат-аландарға барып тоташа. Сармат-аландар Уралда йәшәгән һәм боронғо иран телендә һөйләшкән. Сармат-аландарҙың Болан, Бүре, Эт кеүек бик күп ырыуҙары булған. Шуларҙың Бүре ырыуы башҡорттарҙың нигеҙен тәшкил итә лә инде. "Башҡорт" һүҙенә төрөк телендә аңлатма бирәләр: "Баш"- ата, "ҡорт" - бүре. Әммә "башҡорт" һүҙенә тағы ла боронғораҡ, иран телендәге аңлатмаһы ла бар. Иран телендә "бачагург" "бүре нәҫеле, тоҡомо" тип тәржемә ителә: унда "бача" - тоҡом, нәҫел, "гург" - бүре тигәнде аңлата. Тимәк, башҡорттар боронғо "бачагург" һинд-иран этнонимы яңғырашын төркиләшкән "башҡорт" яңғырашында ғына түгел, шулай уҡ иртә тимер быуатындағы ата-бабаларының понтий антропологик тибын да һаҡлап алып ҡалған. Был тип бөгөн тау-урман һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында күҙәтелә. Был төркөм башҡорттарының XIX быуатта табылған баш һөйәге төҙөлөшө Яңы Мораптал, Филипповка, Иҫке Ҡыйышҡы ҡорғандарында табылған беҙҙең эраға тиклем IV-III быуатта йәшәүсе сарматтарҙың баш һөйәге сифаттары комплексына тап килә. Был башҡорттар этногенезында иртә тимер быуатындағы һинд-иран ҡатламының булыуын һәм милләт формалашыуында мөһим роль башҡарыуын дәлилләй.

Венгр ғалимы Рона Таш, академик Р.Г. Кузеев иҫәпләүенсә, башҡорттарҙың "иштәк" атамаһы ырыу-ҡәбилә башлығы исеменән килеп сыҡҡан. Беҙҙең ҡарашса, был башҡорттарҙың IX-XI быуаттарҙа хәҙерге төркмәндәрҙең ата-бабалары уғыҙҙар менән тығыҙ бәйләнештә (иң беренсе нәүбәттә, ҡыҙ биреш, ҡыҙ алыш) йәшәүе хаҡында һөйләй. "Иштәк" атамаһы иң тәүҙә, күрәһең, уғыҙҙарҙың боронғо ырыуы һаналған текиндарға бажа булып йөрөүсе башҡорттарға ҡарата әйтел-гәндер. "Иштәк" атамаһы иран телендәге "хешдек"тың төркиләшкән әйтелеше тип тә иҫәпләргә булалыр: "хеш" - тоҡом, нәҫел, туған, "дах","даһ","дау" - бөйөк, йәғни "хешдек" "бөйөктәр ырыуының тоҡомдары" тигәнде аңлата.. Был осраҡта башҡорт-иштәктәр дахтарҙың, йәғни иртә тимер эпохаһында Яйыҡ йылғаһы (Дауик, Птолемей картаһында - Джаих) буйында көн күреүсе дах ырыуҙарының тоҡомдаштары булып сыға. Тимәк, Яйыҡ атамаһы "дахтар йәки дауҙар йылғаһы", йәғни төрки телдә "бөйөктәр йылғаһы" тигәнде аңлата. Күрәһең, хәҙерге Ишбулат, Ишмөхәмәт төрки антропонимдар һинд-иран телендә Хешбулат - Хасбулат (Булаттың туғаны, тоҡомдашы), Хешмөхәмәт - Хасмөхәмәт (Мөхәмәттең туғаны, тоҡомдашы) тигәнде аңлатҡандыр. Был фекерҙәр 2006 йылда үткән башҡорт халҡының этногенезына һәм этник тарихына арналған Бөтә Рәсәй конференцияһында минең докладта киңерәк әйтеп үтелде.



***Башҡорттар иртә тимер быуатындағы ата-бабаларының понтий антропологик тибын да һаҡлап алып ҡалған. Был тип бөгөн тау-урман һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында күҙәтелә. Был төркөм башҡорттарының XIX быуатта табылған баш һөйәге төҙөлөшө Яңы Мораптал, Филипповка, Иҫке Ҡыйышҡы ҡорғандарында табылған беҙҙең эраға тиклем IV-III быуатта йәшәүсе сарматтарҙың баш һөйәге сифаттары комплексына тап килә. Был башҡорттар этногенезында иртә тимер быуатындағы һинд-иран ҡатламының булыуын һәм милләт формалашыуында мөһим роль башҡарыуын дәлилләй.***

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Беҙҙә этнос менән этнонимды типәтиң итеп ҡарау ҙа бар. Шулай ҙа булыуы бар бит: әйтәйек, этностың булыуы һәм этнонимдың булмауы ла бар. Боронғо тарихта күп кенә халыҡтар башта төрлө исемдәр менән аталып йөрөтөлгән. Был хәл беҙҙең башҡорт этносына ла ҡағыла. Башҡорт этногенезы, йәғни халҡыбыҙҙың килеп сығышы тарихы ошоға тиклем башлыса "башҡорт" этнонимының яҙма сығанаҡтарҙа күренә башлау осоронан алып ҡына, йәғни Ибн Фаҙландан башлап ҡына өйрәнелде. Мин тарихыбыҙҙы Ибн Фаҙландан башлап өйрәнеү мәсьәләһенә лә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға кәрәктер, тип уйлайым. Сәйәхәтсе Ислам дине сәскә атҡан ваҡытта был яҡтар буйлап үтә һәм бындағы халыҡтарҙы түбәнһетеп ҡарай, уларҙы ҡырағай һәм наҙан итеп күрһәтергә тырыша. Ибн Фаҙлан яҙмаларында Ислам дине кешеһенең бүтән диндәргә, мәжүсилеккә бик түбәнһетеп ҡарауын да онотorға ярамай.

Икенсе яҡтан килгәндә, шуны ла онотмайыҡ, уның янында тәржемәсе булып башҡорт кешеһе йөрөй. Йәғни башҡорт кешеһе шул яҡҡа барып, уҡып, ғәрәп телен өйрәнеп кенә тәржемәсе була алған. Тимәк, яҙмаларында ҡырағай мәжүси башҡорттарҙы, бигерәк тә, урыҫтарҙы кәмһеткән Ибн Фаҙлан ошо урында уҡ үҙ-үҙенә ҡаршы килә. Үҙ телен һәм ғәрәп телен белгән башҡорт, һәр хәлдә, сәйәхәтсенең үҙенән һис тә кәм булмаған. Ул ике телде - үҙ туған телен һәм ғәрәп телен яҡшы белгән.

Мәғлүм булыуынса, төрлө халыҡ-ҡәүемдәрҙең төрлө осорҙа төрлө исем-атамалар аҫтында йөрөүе, этнонимдарҙың алмашынып тороуы ла бик мөмкин. Халыҡ есеменә хас исемен тапҡас та әле уның этник мәғәнәһе һәм күләме үҙгәреүе ихтимал. Башҡорт этносының үҙ исемен алғанғаса тиклемге этник тамырҙарын еңел юллап була. Әйтәйек, уны ике дәү дәүергә - төрки һәм төркигә тиклемге бик боронғо дәүерҙәргә төшөп эҙләргә булыр ине.

Башҡорт этногенезы тарихын тотошлай түбәндәге осорҙарға бүлеп ҡарарға мөмкин: беҙҙең эраға тиклемге осор, беҙҙең эралағы төрки осор, болғар һәм ҡыпсаҡ осорҙары, XVI-XIX быуаттар башҡорт һәм хәҙерге башҡорт осорҙары. Күп кенә атаҡлы ғалимдарҙың раҫлауынса, төрки халыҡтарҙың этногенезының төпкө тамыр остары Евразияның б.э.т. беренсе мең йыллыҡ тарихы баштарына уҡ барып етә. Боронғо Грецияның ата тарихсыһы Геродот үҙ хеҙмәттәрендә Европа менән Азияның күп ерҙәрен биләгән скифтарҙың төрлө телдәрҙә һөйләшкән ҡәбиләләр икәнлеген яҙып ҡалдырған. Унан һуң килгән тарихсылар скифтар араһында төрки ҡәбиләләре күпселекте тәшкил иткәнен күрһәтә. Яңы быуын ғалимдары лингвистик, антропологик, этнологик, мифологик материалдар нигеҙендә скиф, сармат, алан ише боронғо ҙур ҡәбиләләрҙең нигеҙҙә төрки телле булыуын дәлилләй.

Хәҙер төрки-башҡорт этногенезына яҡыныраҡ киләйек. Уның тамырҙарын әле иҫкә алған бик боронғо ҡәүемдәр - скифтар, һундар, төркиҙәр дәүерҙәренән эҙләйек. М. Зәкиев яҙғанса, "Башҡорт" этнонимын йөрөткән ҡәбилә, әүәл бәлки, бер нисә йөҙ, хатта мең йылдар элек булғандыр... Башҡорттарҙың этногенезын IX ғасырҙан ғына эҙләү дөрөҫ булмаҫ ине. Элек башҡорт булмаған, башҡорт ҡәбиләһенә буйһоноп, башҡорт тигән ғөмүми этнонимды алған бик күп ҡәбиләләрҙең этногенезына барып етеп кенә башҡорттоң лингвоэтник һәм этносәйәси тарихын дөрөҫ күҙ алдына килтереп була". Бының өсөн этногенезды, лингвоэтник һәм этносәйәси-тарихи планда ғына түгел, археологик, мифологик, фольклор сығанаҡтар менән берлектә комплекслы тикшергәндә генә төплөрәк һәм аныҡыраҡ һығымталарға өлгәшергә мөмкин. Этногенез барлыҡ этнологик тикшеренеүҙәр синтезы ярҙамында ғына асыҡлана ала.

Телсе ғалим Т.М. Ғариповтың хисаплауынса, "Башҡорт" һүҙенең этимологияһын 35-36 фаразда аңлатып ҡарау бар. Күптәр уны төрки этнонимдар ҡалыбына һалып аңлатырға тырыша: башҡорт - баш уңғар (М. Өмөтбаев), баш уйғыр (Ғ. Ғәбәши), баш огур (Ю. Немет), башҡа ир (Ғ. Ғәбәши), баш ир (М. Зәкиев), баш ҡор (Ә. Усманов), баш ҡорт (В. Филоненко), баш ҡорт (бүре) (В. Татищев), башҡорт антропоним (Н. Бикбулатов), пасиртай (боронғо грек ғалимы Птоломей), Пашерти (Италия сауҙәгәр сәйәхәтселәре Франциско менән Даменко Пицини 1367 йылда төҙөгән картала), Паскорти (В. Егоров), ба-шу-ки-ли (Ҡытай професссоры Чанг Ланг аңлатыуы), бушки, бутки (әрмән географтары VII быуатта төҙөгән картала).

Әйткәндәй, "башйорт" төшөнсәһен дә башҡорт этнонимының бер варианты тип ҡарарға төплө нигеҙ бар. Башйорттан башҡорт атамаһы яралыуы бик мөмкин. Эске һәм Тышҡы башҡорт ил-йорттары - Башҡа йорт – Башйорт - Башҡорт берләшеүе лә ихтимал.

**▶ Этнологтарҙың күбеһе, Гумилев теорияһына таянып, халыҡтарҙың донъяла йәшәүен бер нисә этапҡа бүлеп өйрәнеүсән. Әйтәйек, халыҡтың килеп сығышы (этногенез), йәшәүе, сәскә атыуы, аҡһаҡал йәшенә етеүе һәм юҡҡа сығыуы. Шул уҡ ваҡытта Ер шарындағы барлыҡ халыҡтар ҙа тиерлек үҙенең боронғолоғон иҫбат итергә тырыша, ошо юҫыҡта башҡалар менән бәхәсләшә, дәғүәләшә, төрлө дәлилдәр килтерә. Ти-мәк, был осраҡта Гумилев те-**

***✓Ҡыҫҡаһы, "Алтын Урҙа" тип аталған юрғанды һәр кем үҙенә тарта. Мин был күренеште барыбер ялған фән тип ҡарайым. Тарихты яһап булмай, уны күрә һәм таный белергә генә кәрәк.***



**орияһы буйынса ҡараһаҡ, үҙеңдең ни тиклем боронғо булыуыңды иҫбат итергә ынтылыу бер үк ваҡытта ғүмереңдең аҙ ҡалғанлығын иҫбат итеү ҙә булып аңлашыла түгелме? Ғөмүмән, милләт, этнос икенсе һулыш ала аламы?**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Гумилевтың ҡарашын яҡлаған ғалимдар ҙа, яҡламағандары ла бар. Уның халыҡтың этногенезы (барлыҡҡа килеүе), егетлек осоро, үҫеү осоро, ҡартайыу осоро, юҡҡа сығыуы теорияһын ҡабул итә алмайым мин. Тәбиғәттә һәм һәр төрлө тереклектә яңырыу процесы барған шикелле, этнос та яңы һулыш алып, йәшәп китергә тейеш. Заманалар, эпохалар ағышы шуны күрһәтә: эпохалар алмашыныуҙан ғына йәшәп килгән ҡәүемдәр, халыҡтар алмашынмай, юғалмай йәки ҡайҙалыр бөтә ил-йорто менән ҡубарылып күсеп китмәй, бәлки көслөрәк ҡәүем хакимиәт башына килеү, дәүләт алмашыныу менән, ғәҙәттә, ҡәүемдәр берләшмәһе, дәүләт исеме алмашына. Йәғни, этнос нигеҙҙәре шул килеш ҡала, этноним үҙгәрә. Тарихтан билдәле булыуынса, мәҫәлән, б.э.т. мең ярым тирәһе йылдар араһында Евразия территорияһында киммер, скиф, сармат, алан, һун, авар, төрки, хазар, бәжәнәк, ҡыпсаҡ кеүек эре ҡәүем берләшмәләре, конфедератив хакимлыҡ тәшкил итеп, аллы-артлы алмашынып торған. Икенсе төрлө әйткәндә, был исемдәр этностарҙың түгел, этнонимдарҙың алмашыныуын күрһәтә. Төрлө дәүләттәр, төрлө хакимиәттәр дәүерендә этнос-ара берләшмәләр, нигеҙҙә, шул көйө ҡала, йәки уларҙың йә тығыҙ берегеүенә, йә, киреһенсә, бер ҡәүемдең ҡеүәтләнеүенә, икенсеһенең көсһеҙләнеүенә генә килтергеләй. Йәғни телдәр әүәлгесә ҡала, йә хакимлыҡ иткән берләшмәнең теле өҫтөнлөк ала.

Бына скифтар дәүеренә диҡҡәт итәйек. Скифтар асылда беренсе мең йыллыҡта, беҙҙең эраның тәүге быуаттарында башта киммер, тора-бара савромат, сармат исемдәрен дә үҙ эсенә алған ҡеүәтле ҡәүемдәр конфедерацияһында булып, Азияның Көньяҡ Себер, Урта Азия, Урал тарафтарынан Кавказ, Ҡара диңгеҙ, Көнбайыш Европа киңлектәренәсә ифрат ҙур территорияларҙы иңләп һуҙылған. Ошо төрлө тарафта үҙ-ара аралашҡан күршеләш ҡәүемдәр скифтарҙы төрлө исемдәр менән атап йөрөткән. Гректар уларҙы сколот, урыҫтар - скиф, фарсылар - саҡ, саҡа, германлылар - скит, төркиҙәр скиде тип үҙҙәренсә исемләгәндәр.

**Р. ЙОСОПОВ:** Миҫалға мишәрҙәрҙе алайыҡ. Улар ҙа, башҡорттар кеүек үк һуғышсан булған, малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Мишәрҙәр ҙә бик борондан уҡ барлыҡҡа килгән. Мишәрҙәрҙең бөгөн айырым халыҡ буларак йәшәй алмауының төп сәбәбен һундар дәүеренән эҙләргә кәрәктер. Ике ҡитғаны бер итеп тигеҙләгән һундар юлы тап мишәрҙәр йәшәгән урындарҙан үткән. Уларҙың иң үр өлөшө ҡырылған, ҡүбеһе һундар менән Европаға киткән. Мишәрҙәрҙең был яҡтарҙа ҡалған өлөштәре боронғо Мещерский крайҙа ғәйнә башҡорттары менән сиктәш йәшәп, аҙаҡ татар этносына ҡушыла.

Гумилевтан айырмалы рәүештә, халыҡтарҙың этнос булараҡ юҡҡа сығыуының сәбәптәре уларҙың физик йәшенә генә бәйле булмауы ла бар. Ғайса ағай менән килешәм, халыҡтар юҡтан бар булмаған кеүек, барҙан юҡҡа ла сыҡмай: уларҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында этнонимы ғына үҙгәреүе мөмкин, этник тамыр иһә һаҡлана. Антропологик күрһәткестәр буйынса ла был хәҡиҡәт бәхәсһеҙ.

**▶ Башҡорт милләте этногенезында тел факторы ниндәй роль уйнай, тип уйлайһығыҙ? Донъя телдәрен өйрәнеүсе ғалимдар, мәҫәлән, башҡорт телендәге үҙенсәлекле өндәрҙең иң боронғо халыҡтарҙың телендә һаҡланыуын миҫал итеп килтерә.**



**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Башҡорт телендә бик борондан килгән фарсы ҡатламы бар. Беҙ хатта ул һүҙҙәрҙең фарсы һүҙҙәре икәнен дә белмәйбеҙ. Йәғни тел факторы ла халҡыбыҙҙың фарсылар менән бер тамырҙан булыуын аңлата. Тимәк, төркиләшкәнгә тиклемге боронғо башҡорт теле хәҙерге фарсы теле менән бик яҡын булған да, ҡыпсаҡтар килгәнгә тиклем халҡыбыҙ асылда шул телдә һөйләшкәндер.

Беҙҙең телдә үҙенсәлекле һаңғырау өндәрҙең булыуы боронғолоғобоҙҙо раҫлаусы күрһәткес. Күп кенә сит милләт кешеләре беҙҙең телде өйрәнеүҙәге ҡыйынлыҡты нәҡ шул өндәрҙең булыуына бәйләп аңлатырға маташа. Ул өндәр бит инглиз телендә лә бар, улайһа, ниңә инглиз теле өйрәнеүгә ҡулай тел иҫәпләнә. Икенсенән, инглиз телендә лә был өндәрҙең булыуы уртаҡ тарихи тамырҙарыбыҙ булыуын да күрһәтә.

**Р. ЙОСОПОВ:** Һаңғырау өндәр боронғо сарматтарҙан ҡалғандыр ул, тип уйлайым. Хәҙерге иран, курд телдәрендә был өндәр бар. Тағы ла бер дәлил: Алтын Урҙа дәүерендә хакимлыҡ теле булып ҡыпсаҡ төркөмөнөң сығатай диалекты һаналған. Бары тик башҡорт һәм төркмән телдәрендә генә һаңғырау өнлө фонетик төркөмдәр һаҡланып ҡалған. Антропология тибы буйынса ла башҡорт халҡы Алтын Урҙа дәүерендә үҙ-үҙен һаҡлап ҡала алған. Был нимә тураһында һөйләй: башҡорттар 14 йыл һуҙымында Алтын Урҙаға ҡаршы һуғышып, аҙаҡ дипломатия һәм стратегия ярҙамында һалым түләү шарты менән империянан үҙен һаҡлап ҡала алыусы халыҡ. Беҙҙең телде татар теле менән бер рәттән, ҡыпсаҡ-болғар төркөмөнә индерәләр. Был фәндәге хата тип уйлайым. Сөнки "болғар теле" тигән термин ысынбарлыҡта йәшәгән, аралашыу сараһы булған реаль телде белдермәй. Боронғо эпитафия теле буларак хеҙмәт иткән һәм һаҡланған "болғар теле" ысын тел факторын сағылдырмай. Башҡорт теле ҡыпсаҡ-уғыҙ төркөмөнә инергә тейешлелер тим мин.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Беҙҙең телдә үҙенсәлекле өндәрҙең һаҡланып ҡалыуында Урал тауҙарының да әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ булғандыр. Европанан - Азияға, Азиянан - Европаға һундар ҙа, монгол-татарҙар ҙа үткән. Тик тигеҙ урында ғына һуғышырға өйрәнгән империялар ғәскәре тауҙарға инеп тә тормаған. Тимәк, Уралтауыбыҙ бер үк ваҡытта халҡыбыҙҙы ла, уның ғөрөф-ғәҙәтен дә, телен дә һаҡлаған бер урын.

***Гумилевтың ҡарашын яҡлаған ғалимдар ҙа, яҡламағандары ла бар. Уның халыҡтың этногенезы (барлыҡҡа килеүе), егетлек осоро, үҫеү осоро, ҡартайыу осоро, юҡҡа сығыуы теорияһын ҡабул итә алмайым мин. Тәбиғәттә һәм һәр төрлө тереклектә яңырыу процесы барған шикелле, этнос та яңы һулыш алып, йәшәп китергә тейеш. Заманалар, эпохалар ағышы шуны күрһәтә: эпохалар алмашыныуҙан ғына йәшәп килгән ҡәүемдәр, халыҡтар алмашынмай, юғалмай йәки ҡайҙалыр бөтә ил-йорто менән ҡубарылып күсеп китмәй, бәлки көслөрәк ҡәүем хакимиәт башына килеү, дәүләт алмашыныу менән, ғәҙәттә, ҡәүемдәр берләшмәһе, дәүләт исеме алмашына. Йәғни, этнос нигеҙҙәре шул килеш ҡала, этноним үҙгәрә.***

**Р. ЙОСОПОВ:** Төрки теленә кеше тиҙерәк өйрәнә. Ни өсөн тигәндә, унда фарсы, финуғыр, монгол кеүек башҡа тел төркөмдәре компоненттары күп. Сарматтар дәүерендә Алтайҙан алып Көньяҡ Уралға тиклем, Урта Азияла, Арал диңгеҙе, Каспий буйында һинд-иран телендә һөйләшкән бер күсмә халыҡ йәшәгән. Аҙаҡ ул ҡәбиләнең теле төркиләшкән. Минеңсә, фарсы телендә һөйләшеүселәр төркигә ҡапыл ғына күсмәгән, тәүҙә ике телдә лә аралашҡан да, аҙаҡ икеһенең синтезынан төрки компоненттар күберәк булған яңы тел формалашҡан. Төрки теле шул ваҡыттан алып халыҡ-ара аралашыу теле булып иҫәпләнә, тип уйлайым.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Һинд-иран теленең боронғолоғон асыҡлай торған тағы бер фактор - мифология. Беҙҙең боронғо башҡорт мифологияһы иран һәм фарсылыҡы менән тулыһынса тап килә. Аждаһа, енпәрей, дейеүҙәр барыһы ла ике мифологиянан килә. Был бит осраҡлы күренеш түгел.

**▶ Донъя халыҡтары араһындағы йәһүд этносы феноменының асылын ниҙә күрәһегеҙ? Йәһүдтәр хатта башҡа дин, тел, ҡан солғанышында ла үҙ-үҙҙәрен һаҡлап ҡалыуға өлгәшкән милләт бит.**

**Р. ЙОСОПОВ:** Йәһүдтәрҙең туғанлығы әсәй яғынан бара, йәғни бала әсәһенең милләтен үҙенә ала. Беҙҙең башҡорт халҡында ла иң боронғо генотип ҡатын-ҡыҙҙарҙа ғына һаҡланған. Башҡорт ир-аттарында биш-алты тип, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа понтий һәм Урал тибы халҡыбыҙ яралғандан алып үҙгәрешһеҙ көйө һаҡланып килә.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Йәһүдтәр өс төрлө дин барлыҡҡа килгән донъяның дини үҙәгендә йәшәгән халыҡ. Был хәл уларҙың көнкүрешендә һәм милли сифатында сағылмай ҡалмай, әлбиттә. Ҡайҙа өс йәһүд кешеһе булһа, улар тиҙ генә берләшеп, уртаҡ тел табып, бергәләп хәрәкәт итә башлай. Йәһүдтәрҙең өс төрлө дин солғанышында йәшәүе был осраҡта тик ыңғай ғына һөҙөмтә бирә.

**▶ Ялған һәм яһалма идеология күп кешеләрҙең инаныуына әүерелгән булһа ла, ялған булыуҙан туҡтамай, тиҙәр. Был йәһәттән Советтар Союзы дәүерендә күп миллионлаған кешеләр коммунизм идеологияһына тәрән инанһа ла, был идеология утопия булып ҡалды барыбер. Шуның кеүек, хәҙер ҡайһы бер халыҡтар үҙҙәренең булмаған тарихын яҙа башланы. Булмаған тарихты ни тиклем генә итеп яҙһаң да, ул да ялған булыуҙан туҡтамай бит...**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Һәр кемдә үҙ милләтен боронғорак, әһәмиәтлерәк итеп күрергә теләү тенденцияһы йәшәй. Татарҙар, мәҫәлән, һуғышҡа тиклем, унан һуң да "Беҙ - болғарҙар" тигән идея менән йәшәп алғайны. Хәҙер татар фәне Алтын Урҙа осоро менән мәшғүл, йәғни монгол-татарҙарҙы хәҙерге татарҙарҙың ата-олаталары итеп күрергә теләү тенденцияһы көсәйҙе. Тарихтан билдәле булыуынса, монголдар менән алда, авангардта килгән татар ырыуы төркисә һөйләшмәгән ят телдәге халыҡ. Улар Алтын Урҙа дәүерендә урындағы монголдар шикелле төп халыҡтың, төрки теленең ҡыпсаҡ нигеҙен үҙләштергән, төркиләшкән. Киләсәктә тарихҡа һәм фәнгә объектив ҡараған ғалимдар ошо тарихи хәҡиҡәтте таныясаҡ. Быға тиклем тарихты үҙгәртергә теләүселәр булдыбулыуға, әммә тарих ул шундай төшөнсә: уны төрлө яҡҡа тартып, йә үҙгәртеп булмай. Ысын тарих яҡын киләсәктә барыбер аяҡҡа баҫтырыласаҡ.

Алтын Урҙа - ул төрки халыҡтарының дөйөм дәүләте булған, уның нигеҙендә ҡыпсаҡтар торған. Ҡыпсаҡ компоненты иһә башҡортта ла, ҡаҙаҡта ла, ҡырғыҙҙа ла, үзбәктә лә, ҡарағалпаҡта ла бар. Ҡаҙағстан бөгөн үҙаллы дәүләт, уларҙа ла Алтын Урҙаны тик ҡаҙаҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыу тенденцияһы барлыҡҡа килде. Ҡыҫҡаһы, "Алтын Урҙа" тип аталған юрғанды һәр кем үҙенә тарта. Мин был күренеште барыбер ялған фән тип ҡарайым. Тарихты яһап булмай, уны күрә һәм таный белергә генә кәрәк.

**Р. ЙОСОПОВ:** Төрки телдә һөйләшеүсе барлыҡ халыҡтарҙы ла татар тип ҡарау тенденцияһы әллә ҡасандан бирле йәшәй. Был тарихты белмәүҙән, наҙанлыҡтан килә, сөнки бөгөнгә һәр бер төрки халыҡтың үҙенә генә хас тарихы бар, уларҙы тел нигеҙе генә берләштерә. Татарҙы Алтын Урҙа заманында ла татар тип әйтмәгәндәр. Татар-монгол атамаһын рус ғалимдары уйлап сығарған. Шул арҡала ғына рустарҙың ауыҙынан "татар-монгол" атамаһы яңғыраш алған. Хатта монголдар үҙҙәре лә Алтын Урҙа ғәскәренең 20-25 процентын ғына тәшкил иткән, ҡалған төп өлөштә ҡыпсаҡтар һәм Алтын Урҙа яулаған халыҡтар вәкилдәре биләгән.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Беҙҙең тарихсылар әле Дәште Ҡыпсаҡ һәм Алтын Урҙа дәүләттәренең башҡорттарға ҡағылған мәсьәләләрен күтәреп сыҡҡаны юҡ. Сөнки был ике ҡеүәтле дәүләттең формалашыуында башҡорт халҡының өлөшө бик ҙур. Беҙҙең башҡорттарҙың дәүләтселек тарихы ошо Дәште Ҡыпсаҡ һәм Нуғай Урҙаһы, Алтын Урҙа дәүерендә формалаша.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмәлә ҡатнашыусы ғалимдар бер хәҡиҡәтте айырым һыҙыҡ аҫтына алып билдәләне:**

**-башҡорт халҡының этногенезы мәсьәләһен б.э.т. донъя һәм халыҡтар тарихы ерлегендә өйрәнеү фарыҙ;**

**-был мәсьәләне тарихи-сағыштырыу, комплекслы ғилми-тикшеренеү ысулдары менән генә тулыраҡ асыҡларға мөмкин;**

**-бының өсөн төрлө фән - археология, этнология, тарих, антропология, краниология, филология, дин, философия өлкәһендә шөғөлләнгән ғалимдарҙың берлектә берҙәм тырышлыҡтары бик мөһим.**

**Ғайса Хөсәйеновтың башҡорт этногенезын дүрт осорға бүлеп, төрлө фән юҫығынан өйрәнеү тигән идеяһы, Ринат Йосоповтың "башҡорт", "иштәк" этнонимдарын иран теле нигеҙендә аңлатыуы тарихыбыҙ өсөн яңы күренеш. Сөнки был ҡараштар халҡыбыҙҙың этногенезын беҙҙең эраға тиклемге боронғо савромат, сарматтар дәүеренә тоташтыра.**

**✓ Өфөлә иһә күптәрҙең төп йәшәү рәүеше өс йөҙлөлөк булып сыҡты. Бындағылар бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй һәм өсөнсө төрлө хәл ҡыла. Нык хайран итте бындай ғүмер итмеш.**



# Уйланыуҙарым



**Тамара ҒӘНИЕВА**

**7 сентябрь**

Илебеҙҙә траур. Төньяҡ Осетияның Беслан ҡалаһынан күрһәтелгән телевидение кадрҙарын ҡарау иҫ киткес ауыр.

"Һеҙ бында беҙҙең хәсрәтебеҙҙе төшөрәһегеҙ. Түрәләрҙең особняктарын да төшөрөгөҙ, әйҙә. Береһе-бер бында килеп тә күренмәне..." - тип илай ҡатын-ҡыҙ.

Мәктәпте баҫып алыусыларҙың һаны 32 тиҙәр ине. 29-ы, имештер, юҡ ителгән. Ҡалғандары нисек сығып ысҡынған һуң? Беҙҙең офицерҙарыбыҙҙың бурыс, мәртәбә тойғоһо юҡмы әллә хәҙер? Ғәрләнмәҫлекме ни?

Путин әфәнде президентлыҡ осоро эсендә тәүге тапҡыр халыҡҡа мөрәжәғәт итте. Тезистары ошондайыраҡ:

"Беҙ хәүефһеҙлек, оборона мәсьәләләренә тейешле иғтибар биреүҙән туҡтаныҡ...";

"Беҙ коррупцияның хоҡуҡ һаҡлау органдарына һәм судтарға йоғонто яһауына юл ҡуйҙыҡ...";

"Беҙ илебеҙҙә һәм донъяла барған хәл-ваҡиғаларҙың ҡатмарлы һәм ҡурҡыныс булыуын аңлап бөтмәнек..."

"Беҙ" тигәне кемдәр һуң? Рәсәй халҡымы? Әллә Президент үҙен һәм ярандарын күҙҙә тотамы? Беҙ илебеҙҙең оборонаһы һәм хәүефһеҙлегенә нисек итеп йоғонто яһарға тейеш һуң? Беҙ хәйерселек менән көрәшәбеҙ, балалар үҫтерәбеҙ, башыбыҙҙы баҫып туҡтауһыҙ эшләйбеҙ. Халыҡ һәм ил мәнфәғәтен ҡайғыртыуға бурыслы әҙәмдәрҙең беҙҙең төшкә лә инмәгән эш хаҡы алып, хатта йыш ҡына шул аҡсаға рәхәт сигеп йәшәүенә күнеп ғүмер кисерәбеҙ...

Түҙеп торғоһоҙ ҡыйын. Теге саҡ чечен ҡалалары һәм ауылдарын бомбаға тотҡанда ла шулай ауыр булғайны. Үҙәк матбуғатта яҙыуҙарынса, мәктәпте баҫып алған бандиттар араһында төрлө милләт хәшәрәттәре булған икән. Доғаларымды уҡып, илап-һыҡтап ултырам.

**9 сентябрь**

Ил халҡы Беслан фажиғәһенең сәбәптәрен эҙләй. Кем ғәйепле, йәнәһе. Кем булһын, етәкселек, әлбиттә. Бәләләребеҙҙең осо Яковлев, Горбачев, Ельцин, Чубайс, Гайдар, Новодворская, Сахаров, мәсекәй Березовскийҙарға һәм уларҙың ярандарына, финансист-идеологтарына барып тоташа. Тотош ил үкереп илағанда шуларҙың береһенең өнө лә сыҡманы бит. Илебеҙҙең ошондай хәлгә еткерелерен тап ошо бәндәләр көҫәне түгелме ни?

Телевизорҙан Төньяҡ Осетия президенты Дзасоховты күрһәттеләр. Кризис көндәрендә ыштанына шыр ебәрә яҙып "Мин бөттөм. Мин хәҙер сәйәси мәйет", тип үҙе өсөн ҡурҡып ятҡан был түрә ишараты камера алдында ҡаза күреүсе сүрәтенә ингән булып һөйләнә. Халҡы алдындағы ғәйебе һәм гонаһы хаҡында - ләм-мим.

Фажиғәне ойоштороусыларҙың маҡсаты, әлбиттә, тәрән. Кавказда милләт-ара бола сығармаҡсылар. Ул сағында АҠШ-тың һәм НАТО-ның "тыныслыҡ урынлаштырыусылары" килеп туласаҡ Кавказға. Беҙҙең ҡайһы бер мәсекәй сәйәсмәндәр кеше хәсрәтенән нәфсеһен ҡандырасаҡ. Ә ундай милләт-ара һуғыштың осо-ҡырыйы булмаясаҡ. Тауҙарҙа бит шаңдау оҙаҡ яңғырай.

**18 сентябрь**

Үҙеңдең идеалдарыңа тоғро ҡалырғамы, әллә, йәшәү еңелерәк булһын өсөн, бүтәндәргә ҡулай ҡалыпҡа инергәме?.. Ҡыҙыҡ мәсьәлә... Мине, ни өсөндөр гел ҡалыпҡа индерергә яҫҡындылар. Асылда, әллә ни боласы, экстремист, бигерәк тә халҡыбыҙ мәнфәғәтенә ҡаршы хәсиәттә булғаным юҡ. Әммә кемгәлер оҡшамаған өсөн генә үҙ фекеремдән баш тартмай торған холҡом булыуын инҡар итмәҫ инем. Үҙ фекерһеҙ яҙыусы, журналист була тиме ни?

Мин Өфөгә һуң килдем. 29 йәштә. Әммә яҙмыш мине шул йәшемдән дә олораҡ булырлыҡ ваҡиғалар менән һынағайны инде. Стәрлетамаҡта йәшәнем. Провинцияла кеше мөнәсәбәттәре ул тиклем ҡатмарлы түгел. Унда провинциаль кимәлдәге бәндәләр ваҡ-төйәк менән йөҙмә-йөҙ килешеп ғүмер итә. Ундағы иң мәғәнәһеҙ күренеш - ике йөҙлөлөк.

Өфөлә иһә күптәрҙең төп йәшәү рәүеше өс йөҙлөлөк булып сыҡты. Бындағылар бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй һәм өсөнсө төрлө хәл ҡыла. Нык хайран итте бындай ғүмер итмеш. Былар аңышыраҡ миндәй провинциалды (бигерәк тә 1-се интернатта уҡымаған кешене) уйламаған ерҙән бәрә лә йыға. Аңлағанды аңламамыш булыу - иң ҡыйыны.

Бер аҙыраҡ ҡан ялатҡансы танауға тондорғандарынан һуң, йәшеренерлек урын булмау сәбәпле, кухняға бикләнергә тура килде. Ғәҙеллек ятраҡан хәсиәтемде йүгәнләргә тура килде.

**15 октябрь**

Гәзиттәр, телевидение ветерандар һәм пенсионерҙарға бирелгән льготаларҙы бөтөрөүҙең өҫтөнлөгөн сәйнәй ҙә сәйнәй. Ә халыҡ хөкүмәткә ышанмаҫҡа өйрәнгән инде. Льготаларҙың халыҡ файҙаһына булғаны юҡ әле.

**25 октябрь**

Мостай Кәримдең 85 йәшлек юбилейы хөкүмәт тарафынан бик юғары кимәлдә ойошторолдо. Шишмә районының Келәш ауылы янындағы Ҡыҙҙар тауында мине ниндәйҙер хәүефле тулҡынланыу солғап алды. "Башҡорт милләтенең шағиры вазифаһына ҡуйып, яҙмышым миңә үтә ҙур бурыс йөкмәтмәнеме икән? Тамара Ғәниева тигән шағир менән мин бер үк кешеләрме?" Бала саҡта шағир булыу хыялым юҡ ине. Был батша булһаң ине ул, тигән нигеҙһеҙ хыял менән бер булыр ине. Сөнки батша йәки шағир булыу өсөн дә теләк менән хыял ғына аҙ. Был икәү тик тыумышың менән генә тәғәйенләнә: батшалар батшанан тыуа. Шағир итеп Аллаһ тәғәйенләй. Мин иһә Мостай Кәрим әҫәрҙәренә ингән илаһи тауға үрләгәнмен дә ҡыйынһыныуға тарығанмын: хаҡ, хәләлме минең шағирлыҡ халәтем?..

**26 октябрь**

Иҫәр бисәкәй мин барыбер... Эске ҡыйыуһыҙлығым, комплекстарҙан ошо йәшемдә лә ҡотола алғаным юҡ. Ҡиәфәтле, респектабелле бер ир-егет минең шиғырҙарымдың лирик геройы булғыһы килеүен әйтеп маташты... Мин иһә шөрләнем дә төштөм. Тырт-мырт килеп, нимәлер бығырлаған булдым. Йөҙөмә шунда уҡ бик етди ханым битлеген кейеп алдым.

**8 ноябрь**

Матбуғат биттәрендә һуңғы тапҡыр халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса ҡайһы бер статистика материалдары күренә башланы. Реформалар осоронда мосолман динле милләттәрҙең береһе лә халыҡ һанын юғалтмаған. Бөгөн ундайҙар Рәсәйҙә 20 миллион. 2050 йылда Рәсәйҙә мосолман менән христиан һаны тигеҙләнеүе ихтимал.

Халҡыбыҙ әллә ни яҡшы шарттарҙа йәшәмәй. Шулай ҙа республика Хөкүмәтенең аяулы сәйәсәте бик күп ҡыйралыштарҙан һаҡланып ҡалыу мөмкинлеген булдырҙы.

Рәсәйҙең тотош демографик хәленә килгәндә иһә, бәлә башы - хәйерселек һәм килемдәрҙең быҒаса күрелмәгән ҡырҡа үҙгәрешендә. Һайт, тигәнгә тайт, тип торған губернаторҙар ваҡытлысалыҡ тойғоһонан ҡотола алмай, илебеҙ һәм халҡыбыҙға йәлләп ҡарай алмай һәм хужа була белмәй. Бөгөн Рәсәйҙә халыҡтың дүрттән бер өлөшө үҙ тамағын саҡ-саҡ туйҙырып көн итә, яртыһы үҙен һәм бер бөртөк балаһын аҫырай ала. Был һандар фән, мәҙәниәт, әҙәбиәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләүселәргә, тимәк, халыҡтың ҡаймағына - рухы һәм аҡылы ролен үтәүселәргә ҡағыла. Илебеҙ бөгөн нәҡ ошондай кешеләрҙең генофондын юғалта бара. Рәсәй бюджеты ВВП-һының һәр һумы байҙарға 2 һум, ярлыларға 6 тин табыш килтерә. Тимәк, ҡаҙна аҡсаһын ҡулланыуҙың ғәҙел юлдарын эҙләргә кәрәк түгелме ни? Бөтә халыҡтың да уртаҡ байлығы булырға тейешле ер аҫты байлығын һатыуҙан килгән юғары табыш дәүләт һәм олигархтар кеҫәһенә инә. Хәҙер бына нефть һатыуҙан алынған табышты, "стабфонд" тигән булып, сит банктарҙа йәшерҙеләр. Ә халыҡ хәйерселектән ҡырылып бөтһә, ул запастың киләсәктә ни кәрәге бар? Рәсәйҙә, әйтеүҙәренсә, һуңғы 12 йылда йыл һайын миллион-миллион ярым тирәһе кеше үлеп тора.

**9 ноябрь**

Бер уйлаһаң, бәхеттең формулаһы бик ябай: ғаилә ныҡлығы, етешлек, сәләмәтлек, балаларың арыу булыу - шул ғына. Ләкин беҙ шундай халыҡ ул: бәхет тигән төшөнсә йөкмәткеһенә йәнә ғәҙеллек һәм Ватан менән ғорурлыҡ тигән мәғәнәне лә индерәбеҙ.

Милләтебеҙ юғары хиссиәт һәм намыҫсанлыҡ менән айырыла. Ярлылыҡ ҡына түгел, ә ғәҙеллектең күрәләтә юғалыуы, оятһыҙ, әхләҡһеҙ бәндәләрҙең әллә кем булып йөрөй алыуы ла беҙҙең кәйефте төшөрә.

Ельцин реформалары һәм демократик власть беҙгә ғәҙел һәм намыҫлы мөнәсәбәттә булыр, тип инанғайныҡ. Бәләкәй генә өйөрҙөң тотош дәүләтебеҙ байлығын ҡулына төшөрөүе һәм халыҡты төп башына ултыртыуы ғәҙеллеккә өмөттән ваз кисергә мәжбүр итте. Социализмдан капитализмға күсеү осороноң иң тәрән психологик тетрәндереүе лә шул булғандыр.

Минең йәштәге кешеләргә врачтар яңы диагноз ҡуя: "таланған кеше синдромы". Ошо рәнйеш кешеләр күңеленә бик тәрән инеп ултырҙы. Ул, әлеге таланған кешеләр донъянан китеп бөтмәйенсә тороп, юғалмаясаҡ. Ә бит тотороҡлолоҡҡа, етешлеккә дәғүә итеүгә ниәт тотоу маҡсатынан үҙгәрештәр иғлан иткән илдә еңеүселәр һәм еңелеүселәр булырға тейеш түгел.

**12 ноябрь**

Бөгөнгө шарттарҙа интеллигенцияның роле ниҙән ғибәрәт? Ул нимәләр ҡыла ала? Хисмәт Юлдашев менән бөгөн шул хаҡта "баш ваттыҡ".

Ысынлап та, кем ул интеллигент? Һәр хәлдә, юғары белемгә эйә һәр береүҙе интеллигент тип атап булмайҙыр. Минең уйымса, тарих һынауын үткән әхләҡи ҡанундарға тоғро кешене генә интеллигент тип атап була. Ә әхләҡ ҡанундары замана үҙгәрешенә ятраҡлашмай. Интеллигенция һәр ваҡыт ана шуларға тоғролоҡло булыу өсөн көрәшә, замандаштарының ҡалыпкәртәләрҙән азат булыуын теләй. Уйсан кешеләрҙең фекере, авангард идеялары йыш ҡына халыҡ тарафынан да, власть тарафынан да ҡаршылыҡһыҙ ғына ҡабул ителә һалып та бармай. Халыҡ төркөмө пирамида өсмөйөшөнөң нигеҙен тәшкил итә, ә осонда - ижадсы. Ул шул нигеҙҙе үргә тарта. Нигеҙ күтәрелә барған һайын ос та юғарыраҡ тартыла. Был схеманы В.Кандинский (рәссам, 1866-1994) уйлап тапҡан. Йәмғиәт йыш ҡына интеллигенцияның властарға ҡаршы екереүен, улар менән ыҙғышыуын, яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр талап итеүен көҫәй. Ә бит ижадсы халыҡ тарафынан һайлап ҡуйылған һәм халыҡ мәнфәғәтен яҡларға бурыслы депутат түгел.

Интеллигенцияның бурысын һәм төп асылын билдәләргә маташыу мөмкин түгел. Уға борон да аныҡ ҡына характеристика бирә алмағандар. Ул ҡатламды ятратмаусылар уға ҡарата негатив мөнәсәбәтен дә йәшермәгән. Бында, минеңсә, бер нәмә генә бәхәсһеҙ: интеллигент - намыҫына тоғро, ғәҙел, һәммә нәмәгә лә үҙ фекере булған шәхес ул.

Ә инде донъяны коррупция, ришүәтселек, агрессия, ҡанҡойош ҡамап алған бер осорҙа екеренергәме, сәбәләнергәме, йә өндәшмәй сыҙарғамы, тигән һорау ҡуйылһа, уның яуабы ла ике яҡлы: сәйәсәткә ҡыҫылдың икән, художник булыуҙан баш тартырға кәрәк. Икенсе яҡтан, рухиәткә хеҙмәт итеү юлын һайлаусы кешенең телтешһеҙ, буйһоноусан холоҡло булыуы уны интеллигент тип атарға рөхсәт итмәй. Ни эшләргә һуң? Властағылар компромисҡа, аумаҡайлыҡҡа әҙерерәк интеллигенцияны үҙ мәнфәғәтенә ауҙарырға тырыша. Ысын ижадсы быға ризалашмай. Был власть менән гел генә тартҡылашып йәшәү тигәнде лә аңлатмай. Әммә бында бер генә нәмә бәхәсһеҙ: интеллигент үҙ милләтенең намыҫы булырға бурыслы!

**13 ноябрь**

Мин бәләкәй саҡта беҙгә күрше абзый инеп йөрөй торғайны. Ауылда күршекүләндең инеп йөрөүе ғәҙәти күренеш. Был Әхәт абзый оҙаҡ итеп әнейем менән һөйләшеп ултырыр ине. Улар класташтар булған икән. Теләүмбәт мәктәбендә уҡығандар. Шундай әңгәмәләре хәтеремдә ҡалған.

- Беҙҙе, концлагерь әсирҙәрен, майҙанға теҙерҙәр ҙә, немец офицеры ниҙер һөйләр, йылмайыр ине. Оҙон хәбәренән ниндәйҙер байрам етеүе аңлашыла. Һөйләнә-һөйләнә лә, фриц бик мәғәнәле итеп ас, яланғас төркөмгә ҡарап тора. Шунан ҡуйынынан колбаса сығара ла, һелтәп тороп төркөм өҫтөнә ташлай. Ас әсирҙәр берен-бере тапап, колбасаға ташлана. Ҡай саҡта үлтерешеп тә бөтәләр. Ә офицер рәхәтләнеп көлә! Мин бер тапҡыр ҙа шул һөйәккә ташланманым, Әминә! Ышанаһыңмы?

- Ышанам,- тип башын ҡаға сабыр холоҡло, аҙ һүҙле әнейем.

Әхәт абзый битен ҡулы менән ҡаплап илап ебәрә.

..."Китап" нәшриәтендә, берәй хөкүмәт кешеһенән махсус рекомендация булмай тороп, китабыңды сығара алмайбыҙ, тигән яуапты ишетеп сыҡҡас, әллә нишләп бала саҡтағы ошо хәтирә иҫкә килеп төштө.

**21 ноябрь**

Украинала "Оранжевая революция". Арыған-талсыҡҡан украиндар баррикаданың ике яғына баҫып алған. Бына әҙәм көлкөһө! Юғары власҡа дәғүә итеүсе тәтәй егеттәрҙең мәнфәғәтен яҡлайыҡ, тип, тор инде күҙең тонғансы майҙанда баҫып. Хәйер, беҙ ҙә шул юлды үттек...

**(Дауамы бар).**

✓ **Талантлы режиссерһыҙ ҙа актер үҙен тулыһынса аса алмай. Ә инде төп шәхсән һығымтам шул: ҡатын-ҡыҙ актрисалар бала тапҡас ҡына тулыһынса үҙ һөнәренең асылына төшөнәләр ул.**



ИЖАДХАНА

# ТЕАТР – ГАРДЕРОБТАН,

## тормош әсәй булыуҙан башлана



**Сәхнә оҫталарын беҙ ниңәлер тышҡы ҡиәфәтенә генә ҡарап баһалап өйрәнгәнбеҙ. Баһалау - бер, уларҙың һәр саҡ матур булыуын хатта талап та итәбеҙ. Нисек кейенеүҙәрен күҙәтәбеҙ, яратҡан ашамлыҡтары менән ҡыҙыҡһынабыҙ, ҡайһы фирманың косметикаһы менән файҙаланыуы ла ҡыҙыҡ һымаҡ. Һары матбуғат улар тураһында төрлө ғәйбәт таратыуҙан да тартынмай. Талант эйәләренең эске донъяһы, уй-кисерештәре, донъяға ҡарашы беҙҙе артыҡ ҡыҙыҡһындыра һалып бармай, шикелле. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Сара БУРАНБАЕВА менән һөйләшкәндә уның күңел торошон төҫмөрләргә тырыштыҡ. Сәхнәлә беҙ уның уйнау оҫталығын ғына күрһәк, бөгөн ул бөтөнләй башҡа яҡтан асылды, буғай.**

### ОСРАҠЛЫЛЫҠМЫ?

Миңә был донъяла осраҡлылыҡтарға урын бар һымаҡ. Мәсәлән, үҙ яҙмышымдан сығып, шуны әйтә алам: бер ваҡытта ла артист булырға хыялланманым һәм шулай булырын күҙ алдына ла килтерә алмай инем. Бейеүсе Рәүилә апай Хәзиева осрап: "Һин сәнғәт кешеһе, һиндә ижад кешеһенең осҡоно бар", - тип әйтмәһә, был турала уйланмаҫ та инем, бәлки. Мин бит хатта Өфөлә актерҙар әҙерләгән юғары уҡыу йорто барлығы тураһында ла белмәй инем. Ошо үҙе осраҡлылыҡ түгелме ни? Мин уҡырға инергә теләгән медицина институтына ҡарағанда, сәнғәт институтының театр бүлегенә имтихандар алдараҡ ине. Шуға күрә генә актрисалыҡҡа имтихан биреп ҡарарға булдым. Бында бер урынға дүрт кеше ине. Имтихандарҙы шаярып ҡына, бер ниндәй көсөргәнешһеҙ бирҙем. Театр тип хыялланып килгән, ғүмерен театрһыҙ күҙ алдына килтерә алмаған ҡыҙҙар илай-илай кире ҡайтҡанда, мине уҡырға алыуҙары аптыратты, хатта кемдеңдер урынын тартып алған кеүегерәк хис иттем үҙемде. Уҡый башлағас та баҙнатһыҙлығым, ҡыйыуһыҙлығым йонсотто. Бәлки институттан китергәләр, тигән ҡарарға килгән ваҡыттарым да булды.

### ӘСӘ БУЛЫУ - ИҢ ҘУР ТАЛАНТ

Дүрт йыл уҡыған дәүерҙә, әлбиттә, белем туплайһың, актер булараҡ техник яҡтан шымараһың. Сәхнәлә үҙеңде нисек тотоуҙың бит бик күп ысулдары бар. Былар бары тышҡы эффект тыуҙырыусы саралар ғына, ә бына күңел, йөрәк тиҙ генә асылып китмәй. Был юҫыҡтағы тәүге аҙымымды Милли йәштәр тетрында эшләгән осорҙа яһаным, буғай. "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" спектаклендә уйнаған саҡта Ҡуҙыйҙың үлгән сәхнәһендә көбер өҫтөндә илап әйткән монологым үҙемдә шул хәтлем тетрәндерҙе һәм миндә актрисаны "уятты". Ул саҡ режиссер миңә донъялағы иң кәҙерле кешем, әсәйемдең үлемен күҙ алдына килтерергә ҡушҡайны. Күҙ алдына килтереү - ул бер нәмә, ә бына шул кисереште йөрәгеңә индереү һәм сәхнәнән бөтөн донъяға асып биреү өсөн аҡыл, белем, уй-хистән тыш, тағы ла ниндәйҙер илаһи көс кәрәк. Әммә был тәүгә аҙым ғына ине. Күрәһең, актер булып асылып китеү өсөн тағы ла сабырлыҡ һәм түҙемлек аша ваҡыт һынауын үтеү ҙә кәрәк.

Талантлы режиссерһыҙ ҙа актер үҙен тулыһынса аса алмай. Ә инде төп шәхсән һығымтам шул: ҡатын-ҡыҙ актрисалар бала тапҡас ҡына тулыһынса үҙ һөнәренең асылына төшөнәләр ул.

### СӘХНӘ ӨЙРӘТӘ

Уҡыусы әҙер булмайынса, уҡытыусы килмәй, тиҙәр. Сәнғәт институтына бер ниндәй әҙерлекһеҙ, уй-хыялһыҙ килеп инһәм дә, күрәһең, түбәнгә аң кимәлендә, күңел төбөндә ниҙер булғандыр инде. Әле бына уйлап ҡарайым да, режиссерҙар тарафынан остаз булырҙай кешеләрем юҡ һымаҡ, ә Гөлли Арыҫлан ҡыҙын күңелем менән үҙемдең уҡытыусым кеүек тоям, кәңәштәренә ҡолаҡ һалам, сөнки ул минең күңел торошомдо башҡаларға ҡарағанда тәрәнерәк һиҙә. Тел, хәрәкәттәр менән сәхнә оҫталығы сараларын ҡулланып ҡына ролде асып булмай, уны кисерештәр аша күңел тойғоһо менән генә тойомлап була. Ана шул тойомлау булғанда, тел саралары, хәрәкәттәр тик ярҙамсы функцияһын ғына үтәй икәнен аңлай башлайһың. Минеңсә, актер тик драматик йә трагик ролдәрҙә асыла. Комик ролде уйнауы ауыр, тиҙәр. Унда, күрәһең, бөтөнләй икенсе төрлө асыл кәрәктер. Әле ундай ролдәр уйнағаным юҡ, шуға күрә өҙөп бер ни әйтә алмайым. Тәҡдим иткәндәре лә юҡ. Был бер мине генә борсомай, ул күптәрҙең проблемаһы. Беҙҙә бит актерҙы бер ҡалыпҡа һалып алһалар, гел генә шул амплуала ҡулланырға тырышалар.

### СӘХНӘ

Театр актеры һөнәре бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ өсөн еңел түгел, сөнки ҡатын-ҡыҙ өсөн репетициянан һуң, йә спектакль аҙағынан ғына эш бөтмәй, күңел аша кисереп уйналынған роль театр сәхнәһенән ситтә лә эҙәрлекләп йөрөй, өйгә "эйәреп ҡайта", аҙағына тиклем уйланып бөтөлмәгән килеш күңелгә бер оронсоҡ булып тора. Ҡайтып индеңме, әсәй булараҡ, ир ҡатыны булараҡ, өй мәшәҡәттәре шундуҡ баҫып ала, иғтибарҙы талап итә. Шунан тормоштоң үҙе лә бик көслө театр икәненә инанырға тура килә: режиссерға ярарға, хужа алдында яуап тоторға, ир алдында, бала алдында ла уйнарға кәрәк. Ҡай саҡ арып, арманһыҙ булғанда ла, үҙеңде йылмайырға мәжбүр итергә тура килә. "Ниндәй бала үҙ әсәһен арыған килеш күрергә теләй? Ниңә мин уның алдында үҙемде көсһөҙ итеп күрһәтергә тейеш?", тип һорайым мин шул саҡ үҙемдән. Ул бит минең йылмайыуымды, уның менән бергә уйнауымды көтә. Теләйһеңме-юҡмы, үҙ-үҙеңде мәжбүр итергә, йылмайырға, әсәй булырға, ир ҡатыны булырға тура килә. Шунан һуң тормошто театр түгел, тип әйтеп ҡарағыҙ. Әммә уның театрҙан төп айырмаһы шунда: тормошта беҙ күпкә ихласыраҡбыҙ. Был ихласлыҡ бигерәк тә бәләкәй балаларға ҡарата булған мөнәсәбәттә үтәнән-үтә күренә. Ҡай саҡ уңайһыҙ булһа ла, күңел теләмәгәнсә лә "уйнарға" тура килә. Был бигерәк тә төрлө дәрәжәләге вазифалы кешеләр менән осрашҡанда үҙен һиҙҙертә. Уны ярамһаҡланыу тип әйтә алмайым, нисектер, үҙеңде итәғәтлерәк, әҙәплерәк, баһымсағыраҡ тота башлайһың. Был үҙенән-үҙе килеп сыға. Мин, мәсәлән, үҙемдә шул саҡ ниндәйҙер ҡалып эсенә бикләнгәндәй, бик уңайһыҙ тоям.

### ИХЛАСЛЫҠ

Бөгөн, матди яҡтан етеш йәшәү беренсе урынға ҡуйылған мәлдә, ҡай саҡ, ниңә башҡа төрлө һөнәр һайламаным икән, тигән уй ҙа тыуа. Беҙ, актерҙар, театрға килеп, ана шул матди донъянан ҡасыу юлын эҙләйбеҙҙер һымаҡ, сөнки бында бөтөнләй икенсе тормош. Беҙ үҙ-ара аралашабыҙ, бар күңелде һалып ижад итәбеҙ. Оҙаҡ ваҡыт спектаклгә алмаһалар, ҡыйын була, сөнки шул ваҡыт тормош ваҡлыҡтары, ығы-зығыһы, бөтмәҫ мәшәҡәттәре баҫа башлай. Театрҙа эшләү нисек кенә ауыр булмаһын, ул барыбер ҙә күңелгә ял бирә, сөнки театрҙан тышҡа сыҡһаң, һине бөтөнләй икенсе тормош көтөп тора. Әммә ҡайҙа ғына булһам да, ихласлыҡ юғалмаһын, яһалмалыҡ булмаһын, тип тырышам. Элек, мәсәлән, ниндәй генә кисерештәргә бирелһәм дә, үҙемде матурыраҡ тоторға, кешеләргә яһалма рәүештә булһа ла мөләйемерәк күренергә тырыша инем. Хәҙер миңә ул яһалмалыҡ кәрәкмәй, нисек бармын - шулаймын. Яһалма түгелмен, иң мөһиме - ихласмын. Һәр күңел хәрәкәтен йөрәк аша бирергә тырышам. Ниндәй генә кәйефтә булыуыма ҡарамаҫтан, тамашасының өмөтөн аҡларға ла кәрәк бит әле. Уны тик ихласлыҡ менән генә аҡлап була. Бәләкәй бала алдында үҙеңде ни тиклем ихлас тотаһың, бында ла шундай ихласлыҡ кәрәк.

### ТЕЛ САРЛАНА

Башҡорт мөхитендә тыуып үҫһәм дә, башҡорт теле предмет булараҡ ҡына өйрәнелгән мәктәптә уҡыным. Етмәһә, сәнғәт институтына уҡырға ингәс, экспериментал төркөм төҙөп, урыҫ төркөмө менән ҡушып уҡыттылар һәм тәүге сәхнә этюдтарын рус телендә уйнаныҡ. Хатта урыҫса фекерләгән осорҙар ҙа булды. Театрға килеп, үҙебеҙҙең тәжрибәле актерҙарҙың телмәренә ҡолаҡ һалып ҡына эш барышында күп нәмәгә яңынан өйрәнергә тура килде. Әле ғаиләлә лә, дуҫтар менән аралашҡанда ла ҡәтғи рәүештә тик туған телдә генә аралашам. Сөнки сәхнәлә саф башҡорт телендә һөйләйем тиһәң, башҡа урында ла уға тоғролоҡ һаҡларға кәрәк. Әле балам менән дә тик үҙебеҙсә генә һөйләшәм. Олатай-өләсәй тәрбиәһендә үҫкәндәр уларҙың һутлы телен тыңлап, күңеленә һеңдереп, уларҙың күңел байлығын да ҡабул итеп алғандыр, тип уйлайым. Үҙемә ундай мөмкинлек булманы. Атай-әсәйҙең ваҡыты булмағанмылыр, белмәйем, миңә бала саҡта башҡорт телендә әкиәт һөйләүсе булманы. Туған телендә әкиәт тыңлап үҫкән бала бит ул ғүмер буйына телмәр моңон күңелендә һаҡлап йөрөтәсәк. Балаға һис шикһеҙ сәңгелдәк йыры йырларға, әкиәт тыңлатып үҫтерергә кәрәк. Беҙҙең академия театрының бит үҙ академ теле бар. Ул тормоштағы йәнле һөйләш теленән юғарыраҡ һымаҡ. Шулай булырға тейештер ҙә, сөнки һәр театрҙың үҙ йөҙө, башҡаларҙан айырып торған үҙ стиле бар. Тормоштағы йәнле һөйләш туранан-тура сәхнәгә килеп менһә, сәхнә менән тормош буталыр ине. Театр бит матурлыҡҡа, камиллыҡҡа хеҙмәт итә, ул күңелдәрҙе генә сафландырмай, телде лә таҙартырға тейеш.

### ИҒТИБАР АРЫТА

Әле телевидениела тапшырыу алып барам. Сөнки тәжрибә туплаған һайын, ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо көсәйә, үҙеңдең икенсе мөмкинлектәреңде лә асҡы килә. Кинола уйнарға саҡырғандарында ла бик ҡыуанып барам. "Мотор, башланыҡ!", тигәндән башлап, "Стоп!" тигән арала ғына кино эсендә йәшәп алыуы бик мауыҡтырғыс. Ул үҙенә ылыҡтыра, арбай. Спектакль барышында бит сығыш ике сәғәт һуҙымында дауам итергә мөмкин, бер урында әйтеп еткермәгән интонацияны икенсе күренештә еткереп әйтеп ҡуйырға була, ә кинола бер минут эсендә генә фекер туплап, тулыһынса асылып өлгөрөргә кәрәк. Кино - ул мәңгелеккә илтеүсе бөтөнләй икенсе төрлө ылыҡтырғыс донъя.

### ИЖАД - УЛ РУХИ БАЙЛЫҠ

Театр минең өсөн аҡса эшләү сараһы түгел. Мәсәлән, бөгөн бер бай килеп, икенсе төшөмлө урын тәҡдим итһә, билләһи тим, театрҙы ташлап китә алмаҫ инем. Белмәйем, бында мин тамыр йәйҙемме, әллә үҙемде театр донъяһына ҡуша бәйләнемме? Ул минең булмышыма әйләнгән, ул - минең йәшәйешем. Ғүмеремдә сәхнәһеҙ бер нисек тә күҙаллай алмайым. Популяр булырға ла ынтылмайым, сөнки ул бер нәмә лә бирмәй. Театр һәм ғаиләм менән генә үҙемде тулыһынса бәхетле итеп тоям. Элек быны аңламай инем, ә хәҙер үҙемдең сәхнәнән әйтер һүҙем бар, тип уйлайым. Ә инде театр менән бала араһында һайларға тура килһә, мин иң тәүҙә - әсәй. Театр, ижад ҡына кешене бәхетле итә алмай. Ҡатын-ҡыҙ әсәй булғас ҡына бәхеттең ни икәнен аңлайҙыр ул. Әсәлек шул тиклем иҫ китмәле кисерештәр бирә, шунһыҙ тулы бәхетте, матурлыҡты уйнап булмайҙыр ҙа.

### ӘСӘ МОНОЛОГЫ

Ҡайһы берәүҙәрҙең хилафлыҡ эшләүен аңлап та, һаман шул хаталы эшен дауам итеүен һис тә төшөнә алмайым. Йыш ҡына "Кеше ғүмере мәңгелек түгел, әйҙә, ғаиләлә, эш урынында, урамда бер-беребеҙгә мәрхәмәтле, иғтибарлы булайыҡ, бер-беребеҙҙән көнләшмәй, бер-беребеҙгә ҡолаҡ һалып, бер-беребеҙҙе аңлабыраҡ йәшәйек", тип ҡабатлайбыҙ. Ҡабатлайбыҙ ҙа онотабыҙ. Баланы үҙ өлгөң менән йәшәйешең менән тәрбиәләргә кәрәк, тип мөйөш һайын ҡабатлаған хәлдә лә, кеше изге балаһы эргәһендә лә тормош хаталарын ҡабатлай. Әле тормошта барған кире күренештәрҙе бик әсенеп ҡабул итәм. Ҡалала байҙар менән ярлылар араһындағы айырмаға иҫем китә. Ауыл халҡы сағыштырмаса тигеҙ йәшәһә лә, бер үк самала ыҙаланып та йәшәй. Әле, ярай, балам бәләкәй, ҙурайғас, уны нисек урамға сығарып ебәрермен, тип ҡурҡам. Бөгөн көпә-көндөҙ кеше туҡмайҙар, кеше талайҙар. Әсәй булғас, был проблемалар уғата нығыраҡ борсой башланы. Ҡай саҡ аптырап та ҡуям: ҡайҙа баҫып оран һалырға, кемгә әйтергә икән? Бөтә донъя, бөтөн кешелек йоҡлаған кеүек. Бөтәһе лә аңлай, ләкин бер ни ҙә эшләнмәй. Бәлки, ниҙер эшләнәләр ҙә, ә шулай булғас, ниңә һөҙөмтәләре тойолмай, тәртип үҙгәрмәй? Театрға, ғөмүмән, сәнғәткә килгәндә, кеше матурлыҡтан ситләшә. Бөгөн телевидение аша күрһәтелгән һәр сериалдан үлтереш тә һуғыш күрһәтелә. Иң ҡыҙғанысы шул: тап шуның кеүек вәхшилек ылыҡтыра бөгөнгө кешене, үҙенә йәлеп итә. Ыңғай күренештәргә телеэфирҙа бик әҙ ваҡыт бүленә. Балам ҙурая килә, шул телевизорҙы тоҡандырасаҡ. Ә унда һыра, үлтереш-ҡыйралыш... Был турала ла күп һөйләнелә, ә эш һаман кирегә китеп бара.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Актриса менән ижад, сәхнә тураһында һөйләшһәк тә, беренсе урында гел әсә образы балҡыны. Был ғәжәп түгел, был - мөғжизә! Тимәк, Ҡатын-ҡыҙ өсөн Әсәй булыу - иң ҙур һәләт.**

*✓ Тәүтормош заманында Һинд океанында һәм Тымыҡ океандың төньяҡ өлөшөндә табылған бәләкәй генә каури моллюскыһының ҡабырсағы аҡса урынына ҙур популярлыҡ менән файҙаланған.*



*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

**Ун етенсе быуат башында немец астрономы И. Кеплер "Яңы йыл бүләге, йәки алты мөйөшлө ҡар бөртөктәре хаҡында" исемле хеҙмәт баҫтыра. Был хеҙмәттә автор ҡар бөртөктәренең формаһы хаҡында уйлана һәм уҡыусылар иғтибарына: "Ни өсөн ҡар бөртөктәре алты мөйөшлө?"- тигән һорау тәҡдим итә. Үҙе иһә шул китапта уҡ: "Мин белмәйем",- тип яуап бирергә мәжбүр була. Шул ваҡыттан һуң әллә күпме быуаттар үтһә лә, был һорауға бөгөнгө көнгә тиклем аныҡ яуап табылғаны юҡ.**

## Ҡар бөртөктәре...

### төрлө-төрлө һәм серле

Ҡар бөртөктәре нисек барлыҡҡа килә һуң? Тәү сиратта ваҡ ҡына ят есемле өлөшсәләр тирәләй кристалдарҙың боҙ яралғылары килеп һырыша. Аҫҡа-өҫкә хәрәкәт итеү һөҙөмтәһендә улар һауа ағымына барып эләгә һәм һалҡын һыу тамсылары менән ҡушыла. Был осраҡта буласаҡ ҡар бөртөгөнөң ауырлығы арта башлай. Шулай итеп, ябай бер пластинанан алты мөйөшлө йондоҙсоҡ барлыҡҡа килә.

Ҡар бөртөктәренең барлыҡҡа килеүенә бик күп шарттар йоғонто яһай. Иң яҡшылары тип табылған микрофотографиялар йыйылмаһында бер-береһенә оҡшамаған ҡар бөртөктәренең биш меңдән ашыу һүрәте һаҡлана.

Һауала уҡ ҡар бөртөктәренең туҡтауһыҙ үҙгәреш кисергәне, һәр төбәктең "үҙ" ҡары булғанлығы билдәле. Прибалтикала, мәҫәлән, эре, ҡатмарлы һүрәтле ҡар бөртөктәре яуа.

Бер ваҡыт 1944 йылда Мәскәүҙә диаметры ун сантиметр булған ҡар бөртөктәре яуа. Улар сынаяҡ аҫтын хәтерләтеп, көнө буйы һауала кәйелеп йөрөй. Ҡара тротуарға төшкән бындай ҡар бөртөгө ҙур аҡ эҙҙәр ҡалдыра. Себерҙә иһә диаметры утыҙ сантиметрға еткән ҡар бөртөктәре яуған.

Ел юҡта ҡар бөртөктәре йә аҫҡа төшөп, йә өҫкә күтәрелеп, бик оҙаҡ кәйелеп осоп йөрөүе мөмкин. Улар һауала ни тиклем күберәк сәйәхәт итә, шул тиклем бер-береһенә эләгеп, ҡушыла бара. Уҡмашып осоп йөрөгән ҡар бөртөктәрен көслө ел айырып, өлөштәргә бүлә. Ҡар бөртөгөнөң ауырлығы бер, арта китһә, ике-өс миллиграм.

Ҡар Ер шарына үҙенең ауырлығы менән генә йоғонто яһамай.

Ул йыһанға Ҡояш энергияһының туҡһан процентын сағылдырып, ҙур көҙгө функцияһын үтәй.

Беҙ ҡар ҡатламын ергә, тереклек донъяһына йылылыҡ бирә, тип уйларға күнеккәнбеҙ. Ысынлап та, ҡар йәнлектәрҙе, үҫемлектәрҙе һыуыҡтан һаҡлай. Ләкин бөтә Ер шарын күҙ уңында тотоп әйткәндә, ҡар ҡатламы планетаны ҡояш йылыһынан мәхрүм итә. Мәҫәлән, апрель айында ер ҡатламын йылытыр өсөн етерлек ҡояш нуры төшә. Ләкин ер өҫтөндәге ҡалын ҡар нурҙарҙы төпкә үткәрмәй. Шунлыҡтан, ҡар яй ирей, һауа ла тиҙ йылына алмай.

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП*

# Аҡсалары, аҡсалары

## тимер, алтын, көмөштән

**Ҡабырсаҡ, уҡтың осло тимере, һарыҡ көтөүе, ҡойған алтын, таш тоҙ, какао һәм...пластик кредит карточкалары кеүек төрлө әйберҙәрҙе нимә берләштерә? Быларҙың барыһы ла төрлө замандарҙа төрлө илдәрҙә аҡса ролен үтәгән. Бөгөнгө заманда беҙҙең өсөн аҡса - ул эреле-ваҡлы тимер тинлектәр һәм ҡағыҙ купюралар. Ләкин аҡсаның төрҙәре һәм тарихы күпкә байыраҡ.**



### Барлыҡҡа килеүе

Тәүтормош йәмғиәттә кешеләр ырыу, ҡәбилә булып йәшәгәндә, балыҡ тотоу, һунарға йөрөү, емеш-еләк йыйыу булһынмы, бөтөн эште бергәләп эшләгәндәр. Йылдар үтә тора һәр кем үҙе башҡарған эштә камиллаша бара. Хеҙмәт һөҙөмтәләре лә күренә башлай: аҙ көс түгеп, күп продукция етештерелә. Кешеләр үҙҙәре етештергән аҙыҡ-түлек менән алыш-биреш итергә өйрәнә. Хеҙмәт бүленеше алыш-биреш үҫешенә сәбәпсе була. Археологтар ҡәбиләләр араһында тауар алышыу таш быуатта уҡ булыуын асыҡлай. Сауҙа алышыуы Африка һәм Индонезиялағы ҡайһы бер ырыуҙар араһында X1X быуатҡа тиклем дауам итә.

1873 йылда Лондон география йәмғиәтенең Африкаға экспедицияһын етәкләүсе инглиз Верни Ловетт Камерон да ҡитғала тауар алышыу операцияһын күҙәтеүен яҙып ҡалдыра. Камеронға күлдең икенсе ярына сығырға кәмә алыр өсөн ошондай алыш-биреш яһарға тура килә:

тимер сым - өҫ һәм аяҡ кейеме - филдең һуҡҡы тештәре - кәмә.

Был операцияларға 10 көндән ашыу ваҡыт талап ителгәс, кешеләргә кәрәкле тауар артынан оҙаҡ йөрөргә тура килә. Тауар алышҡан саҡта әйберҙәрҙең хаҡы күпме тороуын баһаларға мөмкинлек биреүсе универсаль эквивалент кәрәк була. Аҡсалар шул эквивалент булып әүерелә лә инде.



Аҡса сифатында кеше нимәләрҙе генә файҙаланмай! Борнео утрауында һыйырҙың баш һөйәген, Конгола - һөңгөнө, Һиндостанда - ынйыны, Боронғо Рустә - йәнлек тиреләрен, ә бик боронғо халыҡтар хатта һарыҡ, һыйыр көтөүен файҙаланған. Әйткәндәй, капитал һүҙе латинса капит - "баш" тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан, йәғни мал менән түләгәндә мал башынан һанар булғандар.

Тәүтормош заманында Һинд океанында һәм Тымыҡ океандың төньяҡ өлөшөндә табылған бәләкәй генә каури моллюскыһының ҡабырсағы аҡса урынына ҙур популярлыҡ менән файҙаланған. Күп ҡәбиләләрҙә был ҡабырсаҡ-аҡсаларҙы бөртөгө лә юғалмаһын өсөн епкә теҙеп йөрөткәндәр һәм илгә хәүеф-хәтәр янағанда ергә ҡаҙып йәшергәндәр. Бик борондан һәм XX быуатҡа тиклем ер шарының ҡайһы бер төбәктәрендә уларҙы биҙәүес урынына ла файҙаланғандар. Ҡабырсаҡ-аҡсалар Европа, Азия, Африка һәм Тымыҡ океан утрауҙарындағы бик күп халыҡтарҙа алыш-биреш сараһы булып торған.

### Тинлектәр тураһында

Ваҡ аҡсалар урынына элек тимер көрәк, балта, балдаҡ, ҡайраҡ, яныуыс кеүек әйберҙәрҙе тотонғандар. Металл әйберҙәр, боҙолмағас, ҡиммәт хаҡҡа баһаланған һәм уларҙы теләһә ҡайһы сауҙала файҙаланырға мөмкин булған. Бик боронғо замандарҙа Италияла тинлек урынына ҡойолған еҙ кирбесен файҙаланғандар. X1X быуат башында Бирмаға сәйәхәт ҡылған этнограф Бастиан, мәҫәлән, үҙенең иҫтәлектәрендә: "Баҙарға барғанда, кеҫәбеҙгә көмөш киҫәктәре, бәләкәй сүкеш һәм ваҡ ҡына герҙәр һалып ала торғайныҡ. Әйбер алһаҡ, аҡса урынына ҡулыбыҙҙағы тимерҙәрҙең береһен бирәбеҙ",- тип яҙып ҡалдырған. Һатыусы әйбере өсөн көмөш киҫәге менән түләүҙе талап итһә, уға күпме кәрәк, көмөштө шунса киҫәккә турап биргәндәр. Грецияла аҡса сифатында тимер сыбыҡтар файҙаланылған.

**Ҡайҙа, күпме алтын бар**

Бөтөн донъя мәғлүмәттәре буйынса, АҠШ-та - 8133,5 тонна, Германияла - 3427,8 тонна, Халыҡ-ара валюта фондында - 3217,3 тонна, Францияла - 2892,6 тонна, Италияла - 2451,8 тонна, Щвейцарияла - 1290,1 тонна, Японияла - 765,2 тонна, Нидерландтарҙа - 722,4 тонна, Европа Үҙәк банкында - 719,9 тонна һәм Ҡытайҙа - 600 тонна алтын бар. Рәсәйҙең алтын запасы 386 тонна тәшкил итә.

Мәҫәлән, алты тимер сыбыҡты драхма тип атағандар, йәғни ул бер ус аҡса, тигәнде аңлата. Һуңынаныраҡ Грецияла көмөш тинлектәрҙе драхма тип атағандар. Шулай ҙа алтын кеше иң тәүҙә тапҡан металы һанала. Ғалимдар түңәрәк итеп эшләнгән иң тәүге алтын тинлектәрҙең беҙҙең эраға тиклем VII быуатта Лидия дәүләтендә (хәҙер Төркиә еренә ҡарай) барлыҡҡа килгән, тип иҫбатлай.

### Ғәрәп дәүләте аҡсалары

Мөхәммәт бәйғәмбәр йәшәгән замандарҙа Ғәрәп ярымутрауында Византияның алтын тинлектәре һәм солидтары өлгөһөндә ике төрҙәге (дирхем һәм динар) тинлек аҡса һуҡҡандар һәм кеше, төрлө кейек-йәнлек һүрәте менән биҙәгәндәр. Ү11 быуат аҙағында хәлиф Үмейәт Әбделмалик ибн Мәрүән үткәргән аҡса реформаһынан һуң көмөш һәм алтын тинлек аҡсаларға Ираҡ ҡалаларында барлыҡҡа килгән көфи яҙмаһын төшөрә башлайҙар. Шулай итеп тинлектәрҙә кеше һәм йәнлек һүрәттәре бөтөрөлә. Ислам дәүләттәрендә барлыҡҡа килгән тинлектәр иң беренсе булып халыҡ-ара кимәлдә популярға әүерелә. Ғәрәп хәлифәтендәге тинлектәр боронғо Рәсәйгә лә килеп етә. Уларҙың бер яғында Ҡөрьәндән изге һүҙҙәр яҙыла, икенсе яғында аҡсаның ҡасан, ҡайҙа баҫылыуы, хакимдың исеме яҙыла. Көнсығыш дирхемдары Рустә бөгөн ҡулланылған Америка доллары ише бик популяр була һәм улар 1X быуат башына тиклем әйләнештә йөрөй. Көнсығышта Ғәрәп хәлифәтенән ҡала Төркиә дәүләте икенсе булып тинлек аҡсалар һуға башлай. Төрөктәрҙең беренсе аҡса һуғыу бинаһы Солтан Мехмет тарафынан Баязет мәсете эргәһендә булдырыла һәм ул үҙенең исеме баҫылған беренсе алтын тинлекте 1476 йылда ҡулына ала.

**Һандар, факттар**

Иң беренсе ҡағыҙ аҡсалар Ҡытайҙа, Тан династияһы (618-907 йй) хакимлыҡ иткән дәүерҙә сығарылған. Иранда ҡағыҙ аҡса 1294 йылда, Японияла - 1337 йылда, Францияла - 1571 йылда, АҠШ-та - 1690 йылда һәм Рәсәйҙә Екатерина П батшалыҡ иткән 1769 йылда сығарыла башлаған.

### Ҡағыҙ аҡса

Ни өсөн әйләнештәге алтын тинлектәрҙе ҡағыҙ аҡсалар алмаштыра...

Беренсенән, алтын сығарыу тауар етештереү артыу менән аҡсаға талапты тулыһынса тәьмин итә алмаған. Был факт алтын запасы аҙая барған бөгөнгө заманда ла күҙгә ташлана. Мәҫәлән, бөгөн Англияла 20 миллион эшсе һанала һәм уларҙың һәр береһе ай аҙағында 2 мең фунт стерлинг эш хаҡы ала. Шулай булғас, дәүләт ай һайын эшселәргә эш хаҡын түләр өсөн 40 биллион фунт стерлинг эшләп сығарырға тейеш. Ә ул 4 мең тонна алтынға бәрәбәр. Ә Англияның үҙәк банкында ни бары 400 тонна ғына алтын бар...

Алтын запасы күләме аҙ булыу арҡаһында аңлы рәүештә тинлектәрҙәге алтын миҡдары кәметелә. Ғөмүмән, тарихта дәүләт тарафынан тинлектәрҙе боҙоу осрағы байтаҡ теркәлгән. Мәҫәлән, француз короле Филипп 1Ү, составында алтыны мөмкин тиклем аҙ булған тинлектәр сығарған өсөн "Ялған аҡса яһаусы" ҡушаматы алған.



Рәсәйҙә XYШ быуатҡа тиклемге тинлектәрҙә көмөш ни бары 1 процент ҡына булған. Икенсенән, ҡағыҙ аҡсалар күренә башлауҙың тағы бер сәбәбе: алтын тинлектәрҙең хаҡы үтә юғары булғанлыҡтан, уларға ваҡ тауар һатып алыу ауырлашҡан. Ҡағыҙ аҡсалар сығара башлау алтын һәм көмөш тинлектәргә ҡарағанда халыҡ өсөн ҡулайлы булып, уны ер шарының бөтөн илдәрендә лә файҙалана башлағандар. Өҫтәүенә, ҡағыҙ аҡсаның алтын-көмөш кеүек ҡиммәте юҡ һәм үҙаллы хаҡҡа ла эйә түгел. Улар аҡсаның йөҙөн, бөтөнләгөн генә билдәләй һәм әйләнештәге күләме дәүләттең алтын запасының хаҡы менән билдәләнә.

Аҡса кешене бәхет юғарылығына ла күтәргән, фажиғәләргә юлыҡтырып, тормош төпкөлөнә төшөргән...Аҡса, бәлки, кешеләргә һаулыҡ, эскерһеҙлек, миһырбанлыҡ һәм мөхәббәт кеүек мәңгелек төшөнсәләрҙе бер ваҡытта ла аҡсаға һатып алып булмаясағын иҫебеҙҙән сығармаҫ өсөн генә лә йәшәйештә ҡалалыр...

**✓ Шуны иҫеңдән сығарма: "Һин бер ваҡытта ла яҡшы тормошта йәшәй алмаясаҡһың", тип әйтергә бер кемдең дә хоҡуғы юҡ һәм кеше үҙ-үҙенә лә шулай тип әйтергә тейеш түгел"...**



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# ЮҒАРЫ БЕЛЕМЛЕ БУЛЫУ

## рухи юғарылыҡҡа өлгәшеү түгел әле

**"Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһына, ниһайәт, Әҙһәмдән дә (гәзитте даими уҡыусылар уның тураһында хәбәрҙар) яуап килде.**

"Бик фәһемле кинәйә, - тип башлап киткән ул хатын. - "Ғалим менән дөйә ҡыуыусы" кинәйәһе тураһында үҙ фекеремде яҙырҙан алда, үҙем менән булған бер ваҡиғаны һөйләп үтәйем. 1990 йылда бер таныш ҡатын ғәжәйеп күрәҙәсе тураһында һөйләне. Уның һөйләүе буйынса, күрәҙәсе ҡатын танышыма: "Тиҙҙән һинең өйөңдә "гид" менән осрашыу буласаҡ", - тигән. Танышым башта аптыраған: "Гид" тигәне нәмә була, әгәр ул кеше булһа, кем буласаҡ?". Ул ваҡытта был хәбәргә мин артыҡ иғтибар итмәнем, сөнки бала саҡта МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫ мине тап "гид" тип атауы иҫемдән сыҡҡайны.

Миндә күрәҙәсе менән осрашыу теләге тыуҙы. Ни өсөн тигәндә, мин быға тиклем үҙен күрәҙәсе тип атаған кешеләр менән осрашҡаным булды һәм уларға ҡарата күптән инде үҙ ҡарашым бар. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уларға һағайып ҡарайым. Шуны беләм: был донъяны барлыҡҡа килтереүсе Көс йыһандың яҙмышын "яҙып" ҡалдырған инде. Хәҙерге заман - ул шул программаның тормошҡа ашҡан өлөшө генә, ә үткәне һәм киләсәге икенсе ғаләм киңлегендә, йәғни параллель донъялағы Ваҡыт киңлегендә хәрәкәтһеҙ хәлдә. Тормошта буласаҡ ваҡиғалар кинотаҫмалағы кадрҙарҙы хәтерләтә. Әммә күрәҙә ҡылыу ана шул ваҡиғаларҙы тулы килеш күреү тигәнде аңлатмай. Әлбиттә, күрәҙәселәрҙең ниндәй ысул ярҙамында күҙаллауын белмәйем. Мин иһә шул яҙмыш программаһын үҙ ғүмеремдә ике-өс тапҡыр күрҙем. Унда киләсәктә була торған һәр ваҡиғаның миллионлаған варианты бар ине. Тимәк, беҙҙең һәр беребеҙгә үҙенең алдағы яҙмышын позитив яҡҡа үҙгәртеү мөмкинлеге бирелгән. Мәҫәлән, күптәр хыялдарының тормошҡа ашыуына аптырамай. Ғәмәлдә бит, хыял тормошҡа ашмай, ә хыял аша моделләштергән (күҙаллаған) киләсәк тормошҡа аша. Хәҙерге заман да ваҡиғаларҙың тормошҡа ашҡан бер өлөшө генә. Яҡын киләсәкте интуиция ярҙамында күҙаллау һәләте беҙҙең һәр беребеҙҙә лә бар. Әммә бөгөнгө йәшәү шарттары ул һәләтте өлөшләтә юҡҡа сығарған. Шуныһы аяныслы: күрәҙәселәрҙең күпселеге киләсәктә була торған негатив мәғлүмәтте нисек күрә, шулай еткереп, кешенең өмөтөн өҙә. Ә бит һәр кешегә аяныслы яҙмыштан тайпылыу мөмкинлеге лә бирелгән. Шуға күрә лә мин күрәҙәселәргә һаҡлыҡ менән ҡарай инем. Әммә был күрәҙәсегә ҡарата һағайыуым буш булды, шикелле.

Алдан килешеп, танышым күрәҙәсене фатирына саҡырҙы. Хужабикәнең 14 һәм 16 йәшлек ике ҡыҙы бар. Улар менән бергә танышымдың ғүмер буйы белем туплауҙан башы сыҡмаған, өс юғары уҡыу йорто бөткән оло йәштәге апайы ла йәшәй ине. Күрәҙәсе, тигәне бик мөләйем йөҙлө, зәңгәр күҙле ҡатын булып сыҡты. Сәй табыны артында донъя хәлдәре тураһында һөйләшеп ултырғандан һуң, һөйләшеүҙең беҙҙе ҡыҙыҡһындырған өлөшөнә күстек. Күрәҙәсе уң ҡулын өҫтәл өҫтөнән сәғәт ыңғайына йөрөтөп алды һәм шул рәүешле үҙе генә белгән ниндәйҙер бәйләнешкә инде. Башта бер ҡатлы күренгән ҡатын, ҡапыл үҙгәреп, төплө, тәрән фекер йөрөтөүсе аҡыл эйәһенә әйләнде лә ҡуйҙы. Ул тәүҙә күрәҙәсене күрергә килеүселәрҙең тормошҡа ҡағылышлы шәхси һорауҙарына яуап бирҙе. Шул яуаптарҙың береһе бик тә ҡыҙыҡлы тойолдо. Хужабикәнең 14 йәшлек ҡыҙы һорау бирәм тип уҡталды, тик ауыҙын да асып өлгөрмәне, күрәҙәсе яуап бирҙе: "Ололар эшенә ҡыҫылма, уҡыуың тураһында уйла, тиҙҙән өс бүлмәле фатир алырһығыҙ!". Хужабикә ҡыҙына: "Ҡыҙым, һин ниндәй һорау бирергә теләгәйнең?" - тип ҡыҙыҡһынды. "Мин, беҙ ҙурыраҡ фатир алырбыҙмы, тип һорарға уйлағайным", - тине ( Ысынлап та, улар бер нисә йылдан өс бүлмәле фатирлы булды).

Шул саҡ күрәҙәсе иғтибарын миңә йүнәлтте: "Үтә ҡиммәт тора һинең маңлайың, - тине ул йылмайып (Күп йылдар үткәс кенә мин был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңланым. Ысынлап та, бала саҡта Иблестең дә мөғәмәләһен аңымда тойорға тура килгәйне. Ул миңә: "Әгәр ҙә һин үҙеңдең кешелек донъяһын һаҡлау теләгенән баш тартһаң, мин һиңә болотһоҙ көндәр вәғәҙә итәм, һин донъяла иң бай кеше буласаҡһың", - тигәйне) - Һине алда диңгеҙҙәй ҙур бәхет көтә. Көҙгөгә йыш ҡарауыңды ташла (мин, ысынлап та, көҙгөгә йыш ҡарарға ярата инем). Күберәк күк йөҙөнә ҡара, унда Пираниҙе ( был һүҙ ни аңлатҡанын әле лә белмәйем) күрерһең. Әле һин сырмалсыҡтар менән уралғанһың, уларҙы өҙөп ташла, иртәме-һуңмы, быны барыбер эшләргә тура киләсәк. Ике йылдан буласаҡ ваҡиға аңыңды үҙ урынына ҡуйыр ( ике йылдан ул ваҡиға, ысынлап та, булды һәм балалыҡ осоронда МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫнан алған мәғлүмәт бермә-бер хәтеремә төштө).

Мин унан: "МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫ минең менән тағы ла бәйләнешкә инерме, инһә, ул ҡасан буласаҡ?" - тип һораным. Ул алыҫ киләсәктәге ниндәйҙер датаны әйтте, ләкин ул хәтеремдә ҡалманы. "Булды, миңә башҡа мәғлүмәт кәрәкмәй", - тинем. Күрәҙәсе тыныс ҡына ҡараны ла: "Улай тупаҫ ҡыланма, кем өйөндә икәнлегеңде онотма", - тине. (Быны мәғәнәһен дә бер нисә йылдан һуң ғына аңланым. Ҡасандыр МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫ миңә былай тип аңлатҡайны: "Һеҙ йәшәгән тормош Иблестең йорто. Үҙ өйөндә ул тупаҫлыҡты өнәмәй һәм тупаҫ кешеләрҙе, иртәме-һуңмы, яҙаға тарттыра. Уның йоғонтоһона бирелмәҫ өсөн итәғәтле булырға кәрәк"). Мин үҙ ғүмеремдә ҡылған ҡайһы бер алама ҡылыҡтарым өсөн оялып, был үтәнән-үтә күреүсе ҡатын алдында ҡаушап ҡалдым.

Ошо һөйләшеүҙән һуң күпмелер ваҡыт уҙғас, хужабикәне яңынан осраттым. Күрәҙәсе менән булған осрашыуҙы иҫкә төшөрҙөк. "Теге ваҡыт һеҙ сығып киткәс, апайым ( өс ВУЗ бөткән апай) рәнйеү ҡатыш көнләшеү менән: "Шул хәтлем һәләтте ниңә бер иҫәркәй ҡатынға бирҙеләр икән?" - тип көйәләнде. Апайым ғүмер буйы уҡыны һәм үҙен иң аҡыллы итеп тоя ине. Шулай ҙа белеменең үҙе өсөн бер файҙаһы булмаһа ла, өс дипломы булыуы менән ғорурланып йәшәне. Күрәҙәсе менән осрашҡас, ғорурланыуы бушҡа булыуын һәм ыҙалап алған белеменең күрәҙәсенең һәләте алдында бары тик сүп икәнен аңлағандыр, күрәһең", - тип һөйләне танышым.

Ысынлап та, күрәҙәселек һәләте ябай, әскерһеҙ кешеләргә хастыр. Быны өсөн өс дипломлы булыу мотлаҡ түгел.

МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫның әйтеүенсә, бөтә кешелек донъяһы туплаған тәжрибә - кеше өсөн бер кәрәге лә булмаған сүп-сарҙан да азат түгел. Рухи юғарылыҡҡа күтәрелә алған кеше генә аҡылын артабан камиллаштыра ала. Рухилыҡ тигәндә, мин иң тәүҙә уйҙар һәм тойғолар яҡтылығын күҙ уңында тотам - бөгөнгө ҡатып ҡалған догмаларҙы түгел. Үрмәксе ауы кеүек, Интернет системаһы бөгөн бөтөн Ер шарын сырмап алған. Бынан башҡа ла белем биреүсе сығанаҡтар етерлек, тик зиһенең етһен дә, ялҡауың килмәһен. Әммә тойғолар сафлығы ғына кешене камил итә, ә кәрәкмәгән мәғлүмәт аңды тырым-тырағай уй-фекерҙәргә этәрә. Томаланған аң камиллыҡтың нимә икәнен аңларға һәләтле түгел. Шунлыҡтан, кешелек донъяһы ҡолдарға хас тыңлаусанлыҡ менән технократия тип аталған аждаһаның йоғонтоһона күнгән. Фән тешетырнағы менән технократик үҫеште хуплай. Быңдай ҡараш аң камиллығына алып бармай, киреһенсә, кешелек донъяһын көрсөккә этәрә.



Мәҫәлән, философия, фән тармағы булараҡ, яҡты тормошҡа алып сығырлыҡ юл күрһәтә алдымы? Ә медицина кеше ғүмерен күпмегә оҙайтыуға ирешө? Бәлки сәйәсмәндәр үҙ-ара низағлашыуҙан туҡтап, юл күрһәтер?

"Ғалим менән дөйә ҡыуыусы" кинәйәһенә таянып, уҡымышлы, белемле кеше тураһында фараз йөрөтөп ҡарайыҡ. Юғары белем алырға теләүсе башта ниндәй маҡсат ҡуя? Күптәр абруй һәм дан яулауҙы күҙ уңында тота. Берәй вазифалы урын да ҡамасауламаҫ, әлбиттә. Был юлға баҫҡандар, ҡағиҙә булараҡ, үҙенең рухи тәғәйенләнеше тураһында уйлап һалып бармай. Уҡып бөткәс, үҙе белгәнде ул башҡаларға тарата.

Миҫал өсөн көтөүсе һөнәрен алып ҡарайыҡ. Ул көнөн тәбиғәт ҡосағында үткәрә. Уның аңы технократик белем менән ағыуланмаған, әммә уны кемегеҙ, батырсылығы етеп, аҡылһыҙ тип әйтә ала? "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһендәге кеүек, рухи яҡтылыҡ биреүсе "ҡояштың" тәүге нурҙары бер ҡатлы булып күренгән "белемһеҙ" көтөүсенең күңеленә лә төшөүе мөмкин түгелме?

**ШУЛАЙ ИТЕП, ЯҢЫ КИНӘЙӘ:**
**"ДӨЙӘҢДЕ БӘЙЛӘРГӘ ОНОТМА"**

**Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һүҙен тыңлау өсөн халыҡ күпләп йыйыла торған булған. Улар араһынан берәү бәйғәмбәрҙең һәр һүҙен бигерәк тә иғтибарлап тыңлаған, доғаларҙы ла бар күңелен биреп уҡыған. Кис булғас ҡына майҙандан киткән. Бер минут та үтмәгән, ул яр һалып кире йүгереп килгән һәм ҡалтыранған тауыш менән аҡыра башлаған: "О, әфәндем! Мин һине - Аллаһтың рәсүлен тыңлар өсөн бөгөн дөйә менеп килгәйнем. Дөйәм әллә ҡайҙа булған! Мин бит һинең һәр һүҙеңде йотлоғоп тыңланым һәм Аллаһтың ҡөҙрәтенә ышандым. Шул арҡала дөйәһеҙ тороп ҡалдым! Ошо буламы ни Илаһи Хәҡиҡәт? Минең инаныуым өсөн "бүләк"ме был?" Мөхәммәт бәйғәмбәр был кешенең рух төшөнкөлөгөнә бирелгән һүҙҙәрен тыңлап бөткәс, шәфҡәтле йылмайып, былай тигән: "Аллаға ышан, әммә дөйәңде ышаныслыраҡ итеп бәйлә".**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠЫЛЫМ ҺЕҘҘЕҢ ӨСӨН

**Үҙеңде ҙур уңыш яуларға һәләтлемен, тип иҫәпләйһеңме? Һин хыялланаһың, ләкин көндәлек ығы-зығыларҙан арына алмауҙан маҡсатыңа табан юл ала алмайһың, йә тамамлайһы эштәрең бар, йәки күп нәмәгә күңелең һүрелеп өлгөргән?**

Эйнштейн, мәҫәлән, һәр балала генийлыҡ йәшеренгән, тип иҫәпләгән. Һәр кемдең еңеүсе булырға хоҡуғы һәм мөмкинселеге бар. Моғайын, әлеге мәлдә һин күп йылдар элек мин кисергән нәмәләрҙе кисерәһеңдер. Ул ваҡытта мин "юл күрһәтеүсене", йәғни тормошта үҙ урынымды билдәләргә ярҙам итерҙәй кәңәште эҙләү менән мәшғүл инем. Барыһы ла остазыма: "Тормошта һеҙҙең кеүек ҙур уңыш яулар өсөн барыһын да бирер инем", тиеүҙән башланды. Был һүҙҙәремде ишеткән остазым: "Быныӊ дөрөҫлөгөнә ышанмайым, Шефер әфәнде", тине, башын сайҡап. "Мин ысынды һөйләйем", тигәйнем, ул: "Улайһа, аҙнаһына өс тапҡыр минән дәрестәр алырға кил. Нимә һөйләйем - барыһын да яҙып бар һәм ни ҡушам - шуны эшлә", тине.

Тәүҙә үҙем өсөн бәхет һәм уңыш формулаһын табырға теләгәйнем, ләкин ундай формула юҡ бит. Шунан ҡайһы бер проблемаларымдың асылына төшөнөр өсөн остазымдан ярҙам һораным. Ләкин бында ла өмөтөм аҡланманы, сөнки тормошомда килеп тыуған ҡайһы бер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе сисеү урынына, ул миңә еңеүселәр законын аңлатырға тотондо. Тәүҙә аңламаған ҡайһы бер нәмәләр һуңынан аҡылдың бөтмәҫ хазинаһына әүерелде һәм мин бөтөн проблемаларымдан арыныуҙан тыш, киләсәккә үҙем өсөн кәрәкле белемгә лә эйә булдым.

Әлбиттә, бөгөн дә ҡайһы бер ҡаршылыҡтарға осрайым, ләкин үҙемә һәр саҡ: "Остазым быға нисек ҡарар ине?" -тигән һорау бирәм. Ни өсөн тигәндә, уның төплө кәңәштәрен ишетәм, ярҙамын тоям һәм йөҙө лә күҙ алдымдан китмәй...

Һайлаған юлымдың дөрөҫлөгөнә шик белдереп, унан ситкә тайпылдырырға тырышыусылар ҙа булды. Шундай мәлдәрҙә остазымдың: "Кемдәрҙеңдер башҡаларҙы күрә алмауы мине сығырымдан сығара, сөнки ундайҙар кешегә бәхет һәм уңыш яуларға мөмкинлек бирмәй. Шуны иҫеңдән сығарма: "Һин бер ваҡытта ла яҡшы тормошта йәшәй алмаясаҡһың", тип әйтергә бер кемдең дә хоҡуғы юҡ һәм кеше үҙ-үҙенә лә шулай тип әйтергә тейеш түгел"...

**Бодо ШЕФЕР.**

***Бәхәс формулаһы шулай: "Һарыҡ дөйөм аңлашылмаусылыҡ тураһында һөйләй. Ҡуян дөйөм икеләнеүҙе еткерә. Һуңынан арыҫлан аяғүрә баҫа һәм дөйөм фекерҙе белдерә.***



БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!

# Ҡумыҙҙары...
## күңелдәргә сиртте



**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Бәйгелә иһә ҡумыҙҙа анык музыкаль оҙатыуһыҙ ғына уйнанылар. Ҡатнашыусылар 16 йәшкә тиклем һәм унан өлкән йәштәге ике төркөмдә, "Өҙләү", "Ҡумыҙсылар ансамбле", "Яңғыҙ башҡарыусы" номинацияларында сығыш яһаны.

**Йәш буйынса ике төркөмдәгеләрҙең уйнауын тыңлағандан һуң, ҡайһы төркөм ҡумыҙсылары сығышын көслөрәк, сағыуыраҡ тип билдәләп була?**

- Йәштәр импровизацияларҙы оҫтарак башҡарһа, ололар көйҙе дөрөҫ итеп, еренә еткереп уйнай. Йәштәр араһында ла көйҙә боҙмай, матур уйнағандар аҙ булманы. Элек ҡумыҙҙа ябай ғына сиртһәләр, хәҙер иһә бер нисә бармак, ҡул суғы менән ҡатмарлыраҡ итеп уйнарға мөмкин, ваҡыт үтеү менән уйнау техникаһы камиллаша бара. Мәҫәлән, алты йәшлек Азамат Зәйнетдинов башҡорт халыҡ көйҙәрен аныҡ, көйҙән ситкә тайпылмай уйнауы менән һокландырҙы. Уға жюри ике талапты ла үтәгәне өсөн һис икеләнмәй I урын бирҙе.

Нисек кенә булмаһын, конкурсҡа йәш башҡарыусыларҙың - балаларҙың күп килеүенә айырыуса шатландым. Уларҙың сығыштарын ҡарағас, башҡорт ҡумыҙының киләсәге өмөтлө буласағына ышаныс артты. Моң хакимлыҡ иткән ерҙә тәртип тә, матурлыҡ та була, баланың билдәле генә шөғөлө бар икән, насар ғәҙәттәргә ваҡыты ла, теләге лә булмаясаҡ. Ҡумыҙға ҡыҙыҡһыныу уятып, балаларыбыҙҙы насар ғәҙәттәрҙән ҡурсаларбыҙ, ҡумыҙ сиртеү баланың һаулығына ла ыңғай йоғонто яһаясаҡ, әҫтәүенә, милли уйын ҡоралыбыҙҙы һаҡлап ҡала аласаҡбыҙ. Ғөмүмән, йәштәргә оололарҙан өйрәнеү, ҡатнашыусыларға бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлашыу, сәм, дәрт уятыу йәһәтенән бәйге бигерәк тә фәһемле булды. Йәнә шуныһы: ғәҙәттә, төрлө сараларға ситтән килгәндәрҙе ҡунаҡханаға урынлаштыралар, ә бында ҡунаҡхананан тыш бәйгеселәр өйҙәргә урынлаштырылды. Шулай итеп, бәйге артабан байрам төҫөн алып, өйҙәргә дауам итте, ҡумыҙсыларға яҡындан аралашыу мөмкинлеге бирелде.

**Сараның Башҡортостанда беренсе тапҡыр ойошторолоуын иҫәпкә алғанда, уның географияһы ярайһы уҡ киң. Ҡайһы төбәк ҡумыҙсыларында боронғоса уйнау тәртибе һаҡланған?**

- Ҡумыҙсыларҙың барыһы ла сағыу уйнағандай тойолһа ла, иғтибарлабыраҡ тыңлағанда, көйҙең яңғырашы, уйнау техникаһы йәһәтенән айырмалыҡтар бар. Мәсетле районы элек-әлектән көслө ҡумыҙсылары менән дан алған, был юлы ла улар һынатманы. Белорет районынан Үҙәнбаевтар, Хафизовтар, Зәйнетдиновтар ғаиләһе, Учалы, Сибай, Баймаҡ, Ейәнсура ҡумыҙсыларында тәбиғилек бар, улар боронғоса уйнауы менән алдырҙы.

**Белеүебеҙсә, элек халыҡ ағас ҡумыҙҙа уйнаһа, хәҙер ул онотолоп бөтөп бара. Бөгөн башлыса тимер ҡумыҙ өҫтөнлөк алған...**

- Ысынлап та, ағас ҡумыҙ юғалып ҡалыу ҡурҡынысы аҫтында. Бөгөнгө көндә Мәсетле районында ағас ҡумыҙ һаҡланып ҡалған. Бәйгелә мәсетлеләрҙең ағас ҡумыҙҙа уйнағанын барыһы ла таң ҡалып тыңланы, башҡа райондарҙан килеүселәр ағас ҡумыҙ эшләтергә заказ бирҙе. Ә бит бындай ҡумыҙҙа көй башҡасараҡ, үҙенсәлекле яңғырай. Киләсәктә ойоштороласаҡ бәйгегә ағас ҡумыҙҙа уйнау талабын да индерергә тигән фекер ныҡыны. Талаптарға килгәндә, уларҙы тағы ла ныҡытырға кәрәк буласаҡ, сөнки был юлы күпселек "Ҡарабай", "Хәтирә" кеүек ябай көйҙәрҙе генә әҙерләп килгәйне. Ҡумыҙҙың мөмкинлектәре ҙур, бәйгеселәрҙә киләһе юлы яңы алымдар үҙләштерергә, ҡатмарлыраҡ башҡорт халыҡ көйҙәрен дә өйрәнергә тура килер. Хатта был конкурсты халыҡ-ара кимәлдә үткәрерлек мөмкинлегебеҙ бар. Киләсәктә был хыялдың бойомға ашырыла ла иманым камил.

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Виртуоз ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов етәкселегендәге абруйлы жюри Гран-прины Мәсетленән Энгельс Ғәлиәкбәровка, "Өҙләү" номинацияһында I урынды Учалынан Рәис Низаметдиновка, "Ҡумыҙсылар ансамбле"ндә - Баймаҡ районынан "Ирәндек" һәм Мәсетле районынан "Тамсыҡай" ансамбленә тапшырҙы. Учалынан Сәлим Йәшелбаев менән 16 йәшкә тиклемге төркөмдән Азамат Зәйнетдинов "Яңғыҙ башҡарыусы" номинацияһында еңеүсе тип танылды. Ә Ейәнсура районы ҡумыҙсылары һәм Салауат районынан Мөфариха Хәбибуллина махсус приз менән бүләкләнһә, Ҡыйғы, Хәйбулла, районының ҡумыҙсылар ансамбле, Илһам Мөхәмәҙиев, Дамир Аҡнаҙаров, Руслан Илтуғанов һәм башҡалар дипломант исеменә лайыҡ булды. Киләсәктә ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр республика конкурсын ике йылға бер тапҡыр үткәрергә ҡарар ителде.**

СПОРТ! СПОРТ!

# Беҙҙән - өмөт,
## һеҙҙән - дарман

**Һүҙҙе Өфөнөң генә түгел, бәлки, бөтә Башҡортостандың хоккей уйынын яратыусылар көйәрмәндәре өсөн ҡыуаныслы хәбәрҙән башлайыҡ.**

"Салауат Юлаев" командаһы хоккейсылары бик мөһим еңеүгә өлгәште! Улар Рәсәй чемпионатының плей-офф уйындарында Санкт-Петербургтың СКА командаһын өс осрашыуҙа ла отто. Еңеүҙәр ҙур ауырлыҡтар менән бирелде. Беренсе осрашыу "Салауат Юлаев"сылар өсөн ярайһы уҡ күңелһеҙ башланды: Питер хоккейсылары иҫәпте уйын башынан уҡ асып ебәрҙе. Боҙ майҙанға еңел еңеүгә иҫәп тотоп сыккан хоккейсыларыбыҙ был хәлдән һуң шаңҡып та ҡалдылар, шикелле. Төп уйын ваҡыты ла үтеп китте, ә еңеүсе һаман юк. Өҫтәмә ваҡыт барын хәл итте. Майҙан хужалары шул сакта ғына аңына килде. Был уйын беҙҙең еңеү менән тамамланды.

Икенсе уйында ла беҙҙең хоккейсылар СКА командаһын еңеп, иҫәпте беҙҙең файҙаға дүрткә - ике менән ябып ҡуйҙы. Өсөнсө уйын иһә тигеҙ иҫәп менән бөттө.

Плей-офф уйынынан һуң еңеүсе мотлаҡ булырға тейеш. Был уйында "Салауат Юлаев" командаһы үҙен көслө уйынсы итеп күрһәтә алды һәм СКА командаһын өскә - ноль иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

**Ҡыҫҡаһы, беҙҙең команда мизал өсөн көрәште дауам итә. Көйәрмәндәр, кәмендә, бронза миҙалға өмөт баглай. Беҙҙән - өмөт, һеҙҙән - дарман...**

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БУШЛЫҠТЫ...
## асыу менән тултырма

Йәштәрҙе карттарға ярҙам итергә ҡушалар, ә мин киреһенсә эшләр һәм карттарҙы йәштәргә ярҙамға ҡушыр инем.

**(Бер аҡһаҡал аҡылы).**

Һиңә ярҙам итә торған һүҙҙе һин үҙ-үҙеңә әйтә алмайһың.

**(Эфиоп мәҡәле).**

Хеҙмәткәрҙе идеялар генераторына әйләндереүҙең иң яҡшы ысулы - уға иң юғары яуаплылыҡ йөкмәтеү.

**(Д. Огилви).**

Мин киләсәк менән ҡыҙыҡһынам, сөнки үҙемдең ҡалған бар ғүмеремде унда үткәрергә йыйынам.

**(Чарлз Ф. Кеттерлинг).**

Һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн ике генә фекер бар: үҙенеке һәм... дөрөҫ булмағаны.

**(Билдәһеҙ автор).**

Бәләгә ҡалғанда иһә ҡурҡыныс ҡарарҙар ҡабул итмәй сараң юк.

**(Сенека).**

Тәрбиәләү парадоксы шул: тәрбиәгә уға мохтаж булмағандар тиҙерәк бирелә.

**(Фазил Искәндәр).**

Ысын ял - ул байрам итеү түгел, ә шөғөлдәрҙе генә алыштырыу.

**(И. Сеченов).**

Бәхәс формулаһы шулай: "Һарыҡ дөйөм аңлашылмаусылыҡ тураһында һөйләй. Ҡуян дөйөм икеләнеүҙе еткерә. Һуңынан арыҫлан аяғүрә баҫа һәм дөйөм фекерҙе белдерә.

**(Феликс Кривин).**

Тарихтан ала алған берҙән-бер һабаҡ шунда: кешеләр тарихтан бер ниндәй һабаҡ та алмай.

**(Бернард Шоу).**

Алда барғандар тураһында насар фекер йөрөтмә, иҫеңдә тот: һинең артыңдан килеүселәр ҙә бар бит.

**(Борис Ручьев).**

Мәңгелек хәҡиҡәт, мәңгелек булыуға ҡарамаҫтан, даими хәтергә төшөрөп һәм раҫлап тороуға мохтаж.

**(Махатма Ганди).**

Бер аҡһаҡалдан: "Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?" тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуап биргән аҡһаҡал.

**(Су Дун-по).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

Идея ҡоло булыу - ул идеяны ла, үҙеңде лә һәләк итеү.

**(Авентус).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: " Әгәр ҙә һин тиҙ һәм насар эшләһәң, һинең тиҙ эшләүеңде онотторҙар, ә насар эшләүең оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалыр. Әгәр ҙә һин эште аҡрын һәм яҡшы башҡарһаң, һинең аҡрын эшләүеңде онотторҙар, ә яҡшы эшеңде оҙаҡ ваҡыт хәтерҙә ҡалдырырҙар".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррират:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6212
Заказ 1211